ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

15-21 август (урағай) 2020

№33 (919)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атай нигеҙен һатмағыҙ,**

йәғни Ситтә эшләгән уландарыбыҙға мөрәжәғәт



3

**Алтын урталыҡ ҡайҙа?**



6

**Беҙҙең мәҙәниәт министры...**

Әхмәтбаҡый хәҙрәт бүләсәре ул



8-11

**Йәшлек нисек тә үтә,**

ҡартлыҡта бәхет кәрәк



12

**ТВ-программа** 14

***Сәғәт - ғүмерҙең бик тиҙ үтеүен иҫкә төшөрөп тороусы машина ул. Кеше сәғәтте уйлап сығармаған булһа, ихтимал, хәҙерге һымаҡ ҡабаланыу, ығы-зығы һәм уфтаныуҙар аҙыраҡ булыр ине.***

***Ибраһим АБДУЛЛИН.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## РФ Дәүләт Думаһы дистанцион эш хаҡында закон проектын ҡабул итергә йыйына. Ошоға бәйле фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?

*Марат ЕНИКЕЕВ, компьютерҙа автодиагностикалау белгесе, Әбйәлил районы Ташбулат ауылы:* Дистанцион эштең уңайлы яҡтарына ҡарамаҫтан, дөйөм алғанда, минең был мәсьәләгә мөнәсәбәтем бик ыңғайҙан түгел. Ниндәй генә эш төрөн алып ҡараһаҡ та, ул мотлаҡ социумда аралашыуҙы, кешеләр менән йәнле бәйләнеште күҙҙә тота. Йыш ҡына бит ҡайһы бер мәсьәләләрҙе фәҡәт күҙмә-күҙ осрашып, үҙ-ара аңлашыу барышында ғына уңышлы хәл итеүгә өлгәшеп була. Шуғалыр ҙа, күрәһең, ошоға тиклем был төр эшкә әллә ни атлығып тороусылар булманы, булған хәлдә лә улар һирәк ине. Мәсәлән, 2019 йылға тиклем эшләп йөрөүсе 67,1 млн кеше араһынан өйҙә, йәғни аралыҡта (дистанцион) эш буйынса хеҙмәт килешеүе нигеҙендә мәшғүлдәр һаны ни бары 30 мең генә кеше ине. РФ Хеҙмәт кодексында был турала положение булыуға ла ҡарамаҫтан, кешеләрҙә дистанцион эшкә ҡарата ниндәйҙер өмөтһөҙ, ышанмаусан мөнәсәбәт өҫтөнлөк итеп килде, сөнки өйҙә эшләү тәртибе хаҡында ғәмәлдәге РФ Хеҙмәт Кодексында тулы аңлатма юҡ, тик был төшөнсә хаҡында билдәләмә генә бар ине. Хәҙер иһә закон ҡабул ителһә, дистанцион хеҙмәткәр рәсми эш урынында эшләүселәр кеүек үк тулы хоҡуҡлы булып иҫәпләнәсәк һәм уны эштән сығарыуы ла элеккеләй еңел генә булмаясаҡ. Әлегә тиклем эш биреүсе өйҙән эшләгән хеҙмәткәрҙе, уны етерлек кимәлдә эш менән тәьмин итә алмауға һылтанып та, йә башҡа шундай сәбәптәр менән дә еңел генә эштән сығара ала ине. Дистанцион эш тәртибе тураһында закон проектын тәҡдим итеүселәр был эш төрө режимын индереү ике яҡтың да килешеүе нигеҙендә генә башҡарылыуы мөмкинлеген билдәләй. Шул уҡ ваҡытта бының эш барышында килеп тыуған ихтыяж йәки көтөлмәгән хәлдәр менән бәйле булыу ихтималлығын да төп шарт итеп күрһәтеүҙе кәрәк таба.

Был хаҡта һүҙ башлағанда мин дистанцион эш тәртибенең ыңғай яғына туҡтала биреп ҡуйғайным. Тулыраҡ итеп шуны әйтергә мөмкин: ер йөҙөнөң интернет булған теләһә ҡайһы урынынан эшләй алыу мөмкинлеге бик уңай. Икенсенән, эшкә йөрөү өсөн аҡса һәм ваҡыт экономиялана. Шәхсән үҙемә оҡшап етмәгән яғы, бая әйткәнемсә,коллективта бер-берең менән аралашыу мөмкинлеге булмау. Ә былай, дөйөм алғанда, бөгөнгө электрон технология шарттарында мәшғүллектең был төрө - ваҡыт талабы һәм бигерәк тә әлеге кеүек пандемия осоронда ул айырыуса кәрәкле. Шуға күрә был эш төрөн законлаштырыуҙы хупларға ғына ҡала.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ИХ, ҠЫМЫҘСЫЛАРЫ!

**Башҡортостанда йыл да үткәрелгән "Ҡымыҙфест" республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Быйыл ул, коронавирус пандемияһы сәбәпле, тәүге тапҡыр онлайн форматта уҙғарылды. Башҡорт халҡының боронғо кәсептәренең береһен һаҡлап ҡалыу, үҫтереүгә йүнәлтелгән проектты Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы һәм Халыҡтар дуҫлығы йорто ойоштороҙо.**

Конкурста ҡатнашыу өсөн һәр етештереүсе үҙ продукцияһы тураһында видеоролик төшөрөп, БР Халыҡтар дуҫлығы йортоноң "YouTube" каналында урынлаштырҙы. Һөҙөмтәлә I урынды Әбйәлил районы "Тамъян" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт ҡымыҙсыһы **Гөлназ Әминева** (һүрәттә уртала) яуланы. Рязань өлкәһе, Рыбнов районы, Дивово ҡасабаһынан "Йылҡысылыҡ Бөтә Рәсәй ғилми тикшеренеү үҙәге" төшөргән видеояҙма II урын, ә Бүздәк районы Күҙәй ауылынан Альбина Сәлимоваға видеояҙмаһы өсөн III урын бирелде. Баймаҡ районы Бәхтегәрәй ауылынан Гүзәлиә Рәхмәтуллина "Әүҙем ҡатнашҡан өсөн" һәм "Ҡыҙыл Яр" урыҫ тарихи-мәҙәни үҙәк методисы Алена Шәмсетдинова "Иң билдәле ҡымыҙ" номинацияларында жюриҙың махсус призҙары менән билдәләнде. Әйтергә кәрәк, әлеге ваҡытта Башҡортостанда 170-кә яҡын ҡымыҙ эшләү фермаһы бар, унда 8 мең баш йылҡы көтәләр. Был Рәсәйҙә үрсетелгән йылҡы һанының 9 процентын тәшкил итһә лә, ил буйынса бейә һөтөн етештереүҙең 45 проценты - 3,7 мең тонна, беҙҙең республикаға тура килә.



12+

✔ *Интернет-технология ҡаҙаныштары заманында йәшәйбеҙ, шуға күрә дистанцион эш режимы хеҙмәткәрҙе аралашыуҙан мәхрүм итә тип уйларға ярамайҙыр. Күп йәһәттән аралашыу мөмкинлеге кешенең үҙенән дә тора.*



АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ӘЖЕРЕН ҠАЙТАРЫП ТОРА

**Һөйләгән һүҙебеҙ, ҡылған эшебеҙ өсөн бағыйлыҡта яуап тотоуыбыҙ хаҡында изге китаптарҙа ла, хәҙис-шәрифтәрҙә лә күп әйтелә. Ә бына был ваҡиға иһә күп ҡылығыбыҙҙың әжерен фани донъяла уҡ алыуыбыҙҙы дәлилләй.**

- Был тормошта беҙ үлсәү өҫтөндә кеүек. Бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. Аллаһ ҡаршыһында барыһы өсөн дә яуап бирәбеҙ, - тип башланы танышым һүҙен. - Ҡоҙа тейешле кешем яңыраҡ ике ҡыҙын ерләне. Башын стенаға бәреп-бәреп иланы, тип һөйләне ерләүҙә ҡатнашҡандар. Башын бәрмәҫлек тә түгел шул ҡайғыһы: бер юлы ике ғәзиз кешеһен юғалтыуҙы дуҫына түгел, дошманына күрһәтмәһен! Ҡыҙҙарының олоһона яңы 24 йәш тулған, кесеһе егермене генә артмаҡлаған. Юл-транспорт фажиғәһендә һәләк булған улар. Ҡаршыға осраған автомобилдәгеләр енелсә яра менән ҡотолған, хәүефһеҙлек мендәре ярҙамға килгән, тинеләр. Ә ҡоҙаның ике ҡыҙы ла, машиналары артыҡ зыян күрмәһә лә, үлемесле яраланған. Олоһо шунда уҡ йән биргән, икенсеһенең йөрәге дауахана юлында тибеүҙән туҡтаған. Бынан утыҙ йыл элек баяғы ҡоҙа тейешле кешем иҫерек килеш үҙе бер туған ике ҡыҙҙы машинаһы менән бәрҙереп киткән булған. Тик ни ғиллә менәндер ул тейешле яҙаһын алмаған. Һәләк булған ике ҡыҙҙы ғәйеплегә сығарып, төрмә ғазабынан ҡурәләтә ҡотолған. Юғары ултырған ағай-энеһе лә, "йәнтәҫ" ҡуллы таныштары ла күп булған уның. Ә зыян күргән ҡыҙҙарҙың яңғыҙ әсәһенән башҡа бер кеме лә булмаған. Ҡара ҡайғыға батҡан ҡатындың яҡларлыҡ кешеһе лә, янынан судҡа бареү өсөн көсө лә, ваҡыты ла, аҡсаһы ла, һаулығы ла ҡалмаған.

Ҡоҙа иһә бер нәмә лә булмағандай, һин дә мин йәшәне лә китте. Шулай ҙа эсеүен ташланы ташлауын. Башҡаса ауыҙына алманы иҫерткес эсемлекте. Туғандары өгөтләүе буйынса тиҙерәк өйләнә һалды, йорт күтәрҙе, ике ҡыҙ үҫтерҙе. Машина ене ҡағылған тейҙәр ундайҙар хаҡында. Йыл һайын булмаһа ла, ике-өс йылға бер яңыртты ул "тимер ат"ын. Бер түгел, ике кеше ғүмерен өҙөүгә барып етһә лә, иллә-мәгәр ҙур тиҙлектә йөрөүен ташламаны. Уға һәр ваҡыт үҙе бер урында тик тора, ә башҡалар, уны артта ҡалдырып, уҙып китер һымаҡ тойолдо. Нинҙәйҙер самаһыҙ сәм, көнсөллөк тойғоһо менән йәшәне. Өс тиҫтә йыл элек ҡылған енәйәтен күптән оноткан булғандыр инде. Онотмаһа, нинҙәй гонаһтарым өсөн минә шундай ҡайғы ебәрҙең, тип һыктамаҫ ине.

Әммә енәйәтсе кәмәгә ултырып ҡаса ла, эҙе ҡала тиҙәр. Тейешле яҙаһы эҙләп тапты инде уны. Тик иң ҡыҙғанысы шунда: оҙаҡ йылдар элек ҡылған ҡурҡыныс енәйәте өсөн яуап икәне башына ла инеп сыҡмай бит уның...

Әйткәнен йөпләп, танышым тағы шундай миҫал килтерҙе:

- Беҙ бәләкәй саҡта ситтән килен булып төшкән бер еңгә ҡартайғанса ауыл ҡыҙҙары тураһында имеш-мимеш һүҙ таратты, яманатлы итте. Ә хәҙер үҙенең өс ҡыҙы ла бәйһеҙ, әхлаҡһыҙ тормош менән йәшәй. Был да ҡатындың ғәйбәт һүҙҙәре өсөн хаҡ түләүеләр, тип уйлайым...

Әйе, беҙ бөтәбеҙ ҙә Аллаһ хөкөмөндә. Күктәрҙең хужаһы беҙҙең нимә эшләгәнебеҙҙе, һөйләгәнебеҙҙе генә түгел, ә уйыбыҙҙы ла белә...Һәм шуның әжерен биреп тора.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Дәүләт Думаһы дистанцион эш хаҡында закон проектын ҡабул итергә йыйына. Ошоға бәйле фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?



**(Башы 1-се биттә).**

***Миҙхәт ШӘРИПОВ, журналистика ветераны:*** Байтаҡ йылдар иң төп республика баҫмаһында -"Башҡортостан" гәзитендә үҙ хәбәрсе булып эшләнем. Үҙ хәбәрсе - ул, асылда, шул уҡ дистанцион эш тип әйтергә лә була. Шул уҡ ваҡытта беҙ редакцияның башҡа стационар журналистары һәм хеҙмәткәрҙәре менән бер тиң хоҡуктар һәм бурыстарға эйә инек һәм рәсми рәүештә хеҙмәт килешеүе нигеҙендә эшкә алындыҡ. Республикабыҙҙың төрлө ҡала һәм район үҙәктәрендә йәшәп, өйҙә эшләнек, ләкин нинҙәйҙер аралашыу ҡытлығы кисерҙек тип әйтә алмайым: журналист халҡымы һуң инде йәнле аралашыуҙан ситтә йәшәр! Көнө-төнө тип әйтерлек үҙ төбәгебеҙгә ҡараған районды буйлап йөрөп, хужалыҡтар, предприятиелар эшсәндәре менән аралашып, материалдар туплай инек тә, әгәр мәҡәлә ашығыс кәрәк икән (ә ул гел тип әйтерлек ашығыс задание булыр ине) төн ултырып яҙып та ебәрер инек. Шуны әйткем килә: дистанцион эш - ул һәр ваҡытта ла аралашыуҙан ситтә ултырыу түгел, был эш режимы хеҙмәткәрҙең һөнәр үҫенсәлегенә бәйле. Ә бит өйҙә генә ултырып эшләгәндә лә әллә күпме кеше менән аралашыу мөмкинлеге бар: аудио-, видеобәйләнеш, скайп, ватсап һ.б. Хәҙер бит беҙ интернет-технология ҡаҙаныштары заманында йәшәйбеҙ, шуға күрә дистанцион эш режимы хеҙмәткәрҙе аралашыуҙан мәхрүм итә тип уйларға ярамайҙыр, минеңсә. Күп йәһәттән аралашыу мөмкинлеге кешенең үҙенән дә тора. Эш урынында ултырып та көнө буйы баш күтәрмәй, кеше күрмәй эшләп ултырыусылар юҡ түгел бит, улайға китһә... Унан һуң, быға ихтыяж булған осраҡта кем һуң өйҙә эшләүсегә рәсми эш урынына килеп, күнеле булғанса хеҙмәттәштәре менән аралашып, етәксеһен күреп, һөйләшеп китеүҙән тыя? Тик әлегә бының өсөн бер генә кәртә: пандемия. Ә бит өйҙә эшләү хаҡында закон проекты ошо сәбәпле яҙылһа ла, бер мәл, бирһен Хоҙай, коронавирус та сигенер: бөгөнгө фән һәм медицина ҡаҙаныштары, моғайын, уны ла "ауыҙлыҡлар", ә закон һәр дайым ғәмәлдә ҡаласаҡ.

Әйтеүемсә, өйҙә эшләү күп йәһәттән хеҙмәткәрҙең үҙ эш көнөн ойоштора белеүе, эшкә мөнәсәбәте һәм, әлбиттә, намыҫына бәйле, юғиһә, бәғзе берәүҙәр өйҙәрендә ирәйеп китеп, эш ҡайғыһын онотоп китеүҙәре лә ихтимал. Шуның өсөн дә законда, әлбиттә, өйҙә эшләүселәрҙең эш режимын көйләүсе положениелар ҙа буласаҡ. Йәғни сәғәт нисәнән алып нисәгә тиклем уның эш ваҡыты иҫәпләнә һәм был ваҡыт эсендә ул етәксе, башҡа хеҙмәттәштәре менән эш буйынса бәйләнешкә сығырға һәр ваҡыт әҙер булырға тейешлеге законда ҡараласаҡ.

Шуға бәйле иҫкә төшөп китте әле: партияның өлкә комитеты хөкөм һөргәндә байтаҡ йылдар бик талапсан, ҡаты тәртип яратҡан баш мөхәррир менән эшләнек. Ул инде көнмө-төнмө - ҡарап тормаҫтан, ҡасан килтереп ҡыҫа, бәлки, беҙҙе тикшерер өсөндөр ҙә - ашығыс йомош менән шылтыратҡанда телефонды алмаңыҙмы - ғауға ҡубыр ине. Был, бер яҡтан, хеҙмәткәргә стресс булып (айырыуса кис, төндә), һәр ваҡыт кешене көсөргәнештә тотһа һәм ҡаты тәртипкә күнеп йәшәргә өйрәтһә лә, икенсе яҡтан, ныҡ ҡына көйәфте лә ҡыра ине. Буласаҡ законда иһә эш биреүсе ғәмәлдәрен дә нормаға килтереүсе положениелар бар. Был бик дөрөҫ, тип уйлайым, сөнки хеҙмәткәрҙе даими рәүештә контролдә тотоп, эҙәрлекләүгә юл ҡуйылмаясаҡ. Ә инде уның тәртибен башҡарған эше буйынса ла баһаларға мөмкин бит. Ошоға бәйле дистанцион эш тураһында закон проекты менән танышҡанда шундай юлдар иғтибарҙы йәләп итте: әгәр эш биреүсе, тиеләунда, хеҙмәткәрҙең эш сәғәттәренән тыш ваҡытта уның менән бәйләнешкә инә икән, был ваҡыт өҫтәмә эш ваҡыты булып иҫәпләнәсәк һәм шуға ярашлы өйҙә эшләүсегә түләнергә тейеш. Йәл, беҙҙең замандарҙа бындай тәртип булһа, беҙ, моғайын, икеләтә эш хаҡы алып эшләгән дә булыр инек. Шаяртам, әлбиттә, ә шулай ҙа өйҙә (йә ҡайҙандыр аранан тороп) эшләүсе хеҙмәткәрҙе аяу саралары-ның береһе булараҡ, был бик ғәҙел ҡарар тип уйлайым.

***Вәкилә ИШМӨХӘМӘТОВА, хеҙмәткәр:*** Дөрөҫөн әйткәндә, өйҙә эшләү тәртибе нинҙәйҙер яңылыҡ түгел. Был хаҡта РФ Хеҙмәт кодексында ла хатта бер аҙ әйтелә биреп ҡуйылғайны инде. Дөрөҫ, тик унда ошо эш төрҙәре һәм уның тәртиптәре хаҡында айырым-асыҡ аңлатмалар булмаһа ла, бындай төр мәшғүллектең төп хеҙмәт законына нигеҙләнеүенә бағым яһала ине. Әле иһә дистанцион эш тураһында закон проекты авторҙарына ошо положениены аныҡларараҡ, шулай уҡ уның нормаларын, эш һәм ял сәғәттәрен, эш биреүсе менән хеҙмәткәрҙең бәйләнеш-мөнәсәбәттәрен билдәләп сығырға ғына ҡалғайны. Бынан тыш, өйҙә эшләү өс төргә бүлеп ҡарала: даими, ваҡытлы һәм ҡатнаш дистанцион эш. Әйтергә кәрәк, минә закон проектының ошоға тиклем йәшәп килгән нинҙәйҙер айырып ҡарау (документта ул дискриминация тип әйтелә) мөнәсәбәтенән хеҙмәткәрҙе яҡлауы күңелгә ятты, сөнки элек, был хаҡта Хеҙмәт кодексында дөйөм положение ғына булып, өйҙә эшләүсенең хоҡуҡ һәм бурыстары, эш һәм ял нормалары, эш биреүсе менән мөнәсәбәттәре хаҡында бер нинҙәй аңлатма булмағанлыктан, уға етди ҡараш, һанлау ҙа юҡ иҫәбендә ине.

Документта тағы ла өйҙә эшләүсенең эш буйынса тотонолған сығымдарына компенсация түләү тураһында иҫкә алыныуы ла бик урынлы. "Дистанцион эш тураһында ... хеҙмәт килешеүҙәрендә хеҙмәткәр тарафынан үҙенең шәхси ҡорамалдарын, программа-техник сараларын, мәғлүмәтте яҡлау сараларын файҙаланып эшләүе менән бәйле сығымдарын ҡаплаусы компенсация түләү мөмкинлеге ҡарала", - тип әйтелә закон проектында. Бынан тыш, нинҙәйҙер көтөлмәгән хәл-ваҡиға (тәбиғи йә техноген һәләкәт, производствола берәй фажиғә йәки әлеге кеүек пандемия һ.б.) килеп тыуған осраҡта хеҙмәткәрҙәрҙе ваҡытлы дистанцион эшкә ябайлаштырылған тәртип буйынса һәм тәү сиратта ауырлы ҡатындарҙы, 14 йәшкә тиклемге һәм инвалид балаһы булғандарҙы, йәше буйынса пенсионерҙарҙы ябайлаштырылған тәртиптә, йәғни килешеү төҙөмәйенсә лә локаль норматив актҡа нигеҙләнеп күсерергә рөхсәт ителә. Шулай уҡ хеҙмәткәргә нинҙәйҙер ашығыс эште уның эш сәғәтенән һуң эшләргә тура килгән осраҡтарҙа уға был ваҡыт өсөн түләү талап ителеүе лә бик ғәҙел, әлбиттә. Ғөмүмән, закон проектының кешелеклә йүнәлештә булыуы, эш кешеһенә, уның ҡайҙан тороп үҙ бурысын башҡарыуына ҡарамаҫтан, ихтирамлы мөнәсәбәт талап ителеүе минә оҡшай һәм мин был закон проектының тиҙ арала ҡабул ителеүен теләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда коронавирус менән сирләүҙең симптомһыҙ йәки еңел формаһы арта. Дөйөм ауырыуҙар һанының 6,1 проценты - пенсионерҙар, 60 проценты 40 йәштән 60-ҡа тиклемгеләр. Башҡортостанда бөтәһе 7197 Covid-19 йоктороусы иҫәпләнә, тәүлек эсендә улар 35-кә артҡан. Шуларҙың 2784 осрағы Өфөлә теркәлгән. Вафат булыусылар һаны үҙгәрмәгән - 25 кеше. Рәсәйҙә 13 августа мәғлүмәттәр буйынса 907,7 меңдән артыҡ сирле теркәлгән, уларҙың 716,3 меңе һауыҡҡан, 15,3 меңе яҡты донъя менән хушлашҡан.

✔Башҡортостанда дауахананан тыш үпкә шеше (пневмония) осраҡтары арта. Һуңғы тәүлек эсендә был диагноз 89 кешегә ҡуйылған. Был сир менән август башынан төбәктә меңгә яҡын кеше ауырыған. Һуңғы тәүлектә 134 кеше пневмониянан һауыҡҡан. Төбәктең Роспотребнадзор белгестәре үпкә шеше ауырыуҙары күпләп асыҡланыуын үткәрелгән тикшереүҙәргә бәйләп аңлата.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Азат Бадрановты БР Хөкүмәте вице-премьеры вазифаһына тәғәйенләне. Быға тиклем ул Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы булды. "Ул милләт-ара һәм диндәр-ара мөнәсәбәттәрҙе, халыҡтар араһындағы төрлөлөктө - телдәрҙе, мәҙәниәттәрҙе, традицияларҙы һ.б. һаҡлау өсөн яуаплы була", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Радий Хәбиров.

✔Тәүге коронавирус вакциналарын ике аҙна эсендә сығаралар, тип хәбәр итә "Известия" Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашкоға һылтанма менән. Мурашко әйтеүенсә, башта медицина хеҙмәткәрҙәре үҙ ирке менән вакцина ҡаҙатасаҡ. Вакцина алған рәсәйҙәр үҙ хәлдәрен махсус эшләнелгән мобиль ҡушымтала теркәп барасаҡ, шулай уҡ кешеләрҙең вакцинаға реакцияһын теркәүсе мәғлүмәт системаһы асылған. Аденовируслы вектор нигеҙендәге вакцина Рәсәйҙә 11 август теркәү үтте. Ул донъялағы беренсе вакцина.

✔3 сентябрҙә үтәсәк Енеү диктанты Башҡортостанда 80 майҙансыҡта ойоштороласаҡ. Акцияла республиканың барлыҡ район, ҡалалары ҡатнашасаҡ. Бынан тыш, Енеү диктантын илдең бөтә музейҙарына, Башҡортостанда Республика Хәрби Дан музейына барып та яҙырға буласаҡ.

✓ *Төпкө аңда ятҡан тойғо - кеше булмышының асылы ерҙә икәнен аңлау тойғоһо уянған хәҙер уларҙа. Бигерәк тә хәҙерге коронавирус афәтенән һуң уларҙың күҙҙәре нығыраҡ асылды.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# МИҘАЛДЫҢ ИКЕНСЕ ЯҒЫ

**Бөтәһенә лә бөгөн аҡса кәрәк һәм бөтәһе лә уны дәүләттән талап итә, теләнселәй, бик булмаһа, ниндәйҙер бер ҡатлам, категория мәнфәғәттәре хаҡына абруйлыраҡ иҫәпләнгән фирҡә, йәмәғәт ойошмаһы тарафынан власть структураларына баҫым яһала. Ләкин быны өсөн бер кемде лә ғәйепләп булмай, бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм: иҡтисад көрсөктә, предприятиелар ябыла, эшһеҙҙәр армияһы арта, ә йәшәргә кәрәк.**



Юғары иҡтисад мәктәбе мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә ярлылыҡ кимәле 16 процентҡа артып китте. Ошо көндәрҙә генә РФ Президенты Владимир Путин 2030 йылға тиклем Рәсәй үҫешенең милли йүнәлештәре тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Тинен тингә ялғап, иртәгә ни булырын да күҙаллай алмаған бер мәлдә ярлы халыҡ өсөн ун йыл, әлбиттә, байтаҡ ваҡыт. Ләкин уға табан аҙымдар яһала, тик ул әлегә бер яҡлыраҡ ярҙам сараларынан ғибәрәт. Балалары күп булған ғаиләләргә, мәғлүм булыуынса, бик күп төрлө түләүҙәр һәм пособиелар таратыла, уларҙың осо-һанына сығырлыҡ түгел. Әммә ләкин ғаиләләр үҙҙәренә тейеш был түләү төрҙәрен бик яҡшы белә. Һүҙ ҙә юҡ, был уларға балалар тәрбиәләүҙә ҙур ярҙам. Үкенескә, миҙалдың икенсе яғы ла бар: айлыҡ балалар аҡсаһын эскегә, үҙ ихтыяждарына тотоноп ятыусылар ҙа бар. Мин яҡшы белгән бер ғаилә башлығының башы эскенән сыҡмай, үҙе бер ҡайҙа ла эшләмәй, бар һөнәре эсеп-һуғышыу, аҡса йә эсергә теләнселәү. Ҡатыны бер балаһы менән йүнһеҙ ирҙән ҡасып йөрөй, икенсе балаһын туғандары аҫрай, өсөнсөһө - иң өлкәне - эшкә ашмаған атаһы янында. Аслы-туҡлы ул бахыр үҫмерҙең хәлен кем белә лә кем күрәлер инде...

Бындай ғаиләләр берәү генә түгел. Интернеттағы "Серләшәйек" төркөмөнә шундайыраҡ хәлдә булыуы хаҡында яҙып, кәңәш һораусы ҡатын-ҡыҙ байтаҡ. Яңыраҡ, мәҫәлән, үҙенең банк картаһы ғәмәлдә булмау сәбәпле, балалар аҡсаһын ире алып ятыуы, ләкин ғаиләһенә бер тин дә эләкмәүе хаҡында зарланыусы тағы бер яҙма килеп сыҡты...

Бына шундай ғаиләләр дәүләттән әҙерҙе генә көтөп, эшләмәй ятырға өйрәнеп китмәҫме, тигән хәүеф тыуҙыра. Хәҙер улар буштан килгән пособиеларға ғына өмөт итергә буйтым күнекте инде. Ә бит түләүҙәрҙең ҡайһы берҙәре, бирһен Хоҙай, ваҡытлы сара - пандемия баҫылғансы, илдә финанс-бюджет хәлдәре тотороҡланғансы күрелгән ярҙам саралары. Бына шунда унар меңдәр шыпылдап ҡына ай һайын килеүҙән туҡтағас, улар үҙҙәрен нисек тотор икән? Дәүләт ҡаҙнаһы ла бит төпһөҙ түгел. Ахыр сиктә, бала ҡарау, аҫрау бурысы иң тәүҙә ғаиләнең үҙ иңендә ятыуын ғаилә планлаштырғанда уҡ самаларға тейештер бит һәр кем.Өҫтәүенә, 43 миллиондан ашыу пенсионерҙар армияһына ла ярҙам талап ителә. Юҡ, эшләп йөрөгән өлкәндәр хаҡында түгел, улар хәле-көсө барса үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә тырыша. Эшләмәгәндәре өсөн дә (ә бит улар ҙа бөлтерәгәнсе эшләп йөрөй алмай, улар былай ҙа бөтөн ғүмерен эштә үткәргән) уларҙың пенсияларын индексациялау, өҫтәмә түләүҙәр, субсидия кеүек дәүләт ярҙам саралары аҡмаһа ла тамып тора. Шуның өсөн дә Пенсия фондына бер ҡасан да аҡса етмәй, уның бюджет "тоғон" тулыландырыу юлдары эҙләнә.

Ҡайһы саҡ бындай эҙләнеүҙәр имеш-мимеш хәбәрҙәр тыуҙырып та ҡуйғылай. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә аңын-тоңон белештермәйенсә интернетҡа шундай хәбәр ебәрелде: имеш, барлыҡ Рәсәй граждандарының да намыҫлы юл менән эшләп алыныуы иҫбат ителмәгән мөлкәте һәм һаҡлыҡта ятҡан аҡсаһы конфискацияланасаҡ һәм Пенсия фондына күсереләсәк. Был хәбәр йәмғәтселектә меҫкен пенсионерҙарға ҡарата ниндәй мөнәсәбәт тыуҙырырын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Бер аҙҙан был мәғлүмәткә асыҡлыҡ индерелгәндәй булды һәм уның барлыҡ граждандарға ла ҡағылмауы, ә коррупционерҙар һәм чиновниктар күҙҙә тотолоуы хәбәр ителһә лә, ундай закондың ике йыл инде ғәмәлдә булыуы ла мәғлүм ки. Быйыл хатта Генпрокуратура мәғлүмәттәре буйынса шул законға ярашлы Пенсия фонды 21,4 млрд һумға тулыланған да икән әле. "Новая газета" хәбәрҙәренә ҡараһаң, граждандарҙың һаҡлыҡтағы аҡсаһына яҫҡыныу властарҙың күптәнге хыялы, имеш; был рәсәйҙәр иҫәбендә тупланған 25 трлн. һум аҡсаны ҡулға төшөрөргә маташыу. Бына шундай имеш-мимештәр халыҡты һаҡлыҡ кассаһында ятҡан аҡсаларын барып алырға, ә инде үткән быуаттың ҡәһәрле 90-сы йылдарында бер тапҡыр хәләл аҡсаһынан яҙып алданған пенсионерҙар иһә үлемтеккә йыйған барлыҡ ҡына аҡсаларын өйҙә, яҫтыҡ аҫтында тоторға мәжбүр. Шул сәбәпле улар муттар сәбе генә түгел, ҡанһыҙ бандиттар ҡорбанына ла әйләнеп ҡуя. Ундай йөрәк ярғыс миҫалдарҙы иҫкә төшөрөп тороу кәрәкмәйҙер.

Һәр хәлдә, дәүләтебеҙҙең дә ҡул менән баштан һыйпап, аяҡ менән артҡа тибеүенән биҙерәп бөткәндер халыҡ. Шундай уҡ ныҡышмалылыҡ менән байҙар (хәҙер олигархтар тип әйтергә ҡушмайҙар ), чиновниктар, коррупционерҙарҙың законһыҙ килеменә кәртә ҡуйылһын ине лә... Быны өсөн бит эшләргә, тикшеренергә, "законлы бурҙар" менән мөнәсәбәттәрҙе боҙорға кәрәк, ә халыҡ аҡсаһы - бына ул, ал да бүлгелә - былай ҙа власть структуралары ҡулында. Әммә ләкин илебеҙҙең яңыртылған Төп законы - Конституцияһы өсөн 78 процент халыҡ тауышы бының өсөн бирелмәне...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# АТАЙ НИГЕҘЕН ҺАТМАҒЫҘ,

## йәғни Ситтә эшләгән уландарыбыҙға мөрәжәғәт



**Хәҙер эш булмауҙы сәбәп итеп тә, яҡшы тормош эҙләп тә ауылын ташлап сығып киткәндәр бик күп. Һөҙөмтәлә ауыл урамдары тынып ҡалған. Атай-әсәй ҡуйынында иркәләнеп үҫкән балаларҙың, ғаиләләр йылыһын һаҡлаған тыуған йорттоң ишектәренә бик күптән асылмаған йоҙаҡтар эленгән. Атай ҡулдарының ҙур өмөттәр бағлап һалған нигеҙҙәре әкренләп серей.**

Ә һеҙ, тыуған ерегеҙҙе ҡалдырып киткәндәр, сит тарафтарҙа һаулығығыҙҙы, бөтә көсөгөҙҙө биреп эшләп тапҡан аҡсағыҙға ҡыйбат хаҡҡа ер һатып алып, йорттар һалаһығыҙ. Һеҙ һатып алған ул биләмә ниҙәр генә кисермәгәндер. Бәлки, тап һеҙ ҡорған нигеҙҙә кеше ғүмерҙәре өҙөлгәндер, ниндәйҙер аяныслы ваҡиғалар булғандыр ( беҙҙең халыҡта ҡан ҡойолған урында йорт нигеҙе ҡормау йолаһы бар). Ә һеҙ, бер нигә ҡарамайынса, һатып алған биләмәгеҙҙә сүп-сар өйөмдәрен таҙартып, ташлы ерҙәренә тупраҡ ташып һалып, баҡса үҫтерергә, донъя көтөргә, сит ерҙә нисек кенә булһа ла тамыр йәйергә ынтылаһығыҙ. Ә был саҡта, шағирыбыҙ әйткәнсә, икмәккә май итеп һыларлыҡ уңдырышлы тупрағыбыҙ, балаларын көткән әсә кеүек, тын ғына, сабыр ғына һеҙҙе көтә.

Һеҙ, башҡорт балалары, ерегеҙҙән яңы айырылып, шаулы-күңелле, уңайлы тормоштан башығыҙ әйләнеп, үҙегеҙсә кинәнеп йәшәргә өйрәнә башлаған ваҡытта, ситтәр йоҡламай. Һеҙ ынтылған рәхәт тормошто улар күптән үҙ быуынында татыған. Татыған һәм... туйған. Төпкө аңда ятҡан тойғо - кеше булмышының асылы ерҙә икәнен аңлау тойғоһо уянған хәҙер уларҙа. Бигерәк тә хәҙерге коронавирус афәтенән һуң уларҙың күҙҙәре нығыраҡ асылды. Хәҙер ҙур ҡалаларҙа йәшәгән халыҡтар күпләп ауылдарҙағы буш торған өйҙәрҙе һатып ала башланы. Дөрөҫ, улар хәҙергә был өйҙәрҙе ваҡытлыса ял урыны өсөн дачалар итеп файҙалана. Ләкин, әйҙәгеҙ, төптән уйлап, киләсәккә күҙ ташлайыҡ. Кеше ҡайҙа ғына йәшәмәһен, барыбер йәшәүҙең асылы - үҙен туйындырыусы, йәшәтеүсе ер икәнен аңлаясаҡ. Хәҙер һеҙҙең ташландыҡ йорттарығыҙҙы һатып алған пенсионер йәшендәгеләрҙең киләсәктә ейән-ейәнсәрҙәре ошо ергә ныҡлы хужа булып, һеҙ тыуып-үҫкән ерҙә гөрләтеп, донъя көтәсәк. Ә һеҙҙең, һағынып, тыуған нигеҙҙе күреп килер өсөн генә ҡайтҡан уландарҙың, үҙ ауылығыҙ урамдарынан ирkенләп үтергә лә хоҡуғығыҙ булмаясаҡ...

Ә бит ошо еребеҙҙе, Уралыбыҙҙы һаҡлап, ата-бабалар нисек көрәшкәнен, халҡыбыҙ башынан ниндәй ғазаптар үткәнен тарихтан яҡшы беләбеҙ. Беләбеҙ, ләкин маңҡортлоҡҡа барып, онотабыҙ. Ә онотторға хаҡыбыҙ юҡ! Ауыл-ауыл яндырылған ерҙәр, һеҙ бөгөн аҡса тип сапҡан Себергә аяҡ-ҡулдары бығаулы йәйәү һөрөлгән, тыуған тупрағын ятҡа бирмәҫ өсөн яуға сапҡан тотҡондар, "Уралым" тип әйтмәҫ өсөн теле ҡырҡылған милләттәштәр ҡаны рөхсәт итмәй беҙгә быны. Хаҡыбыҙ юҡ быны онотторға!

Эйе, заман башҡа, заң башҡа. Эйе, донъя көтөргә, йәшәргә, хәҙерге заман менән тиң атларға кәрәк. Ә йәшәүҙең асылы барыбер бер: ул - Тыуған ер. Шуның өсөн дә, милләттәштәрем, һеҙгә өндәшәм: "Ташламағыҙ тыуған ерегеҙҙе, атай нигеҙен ситтәргә бирмәгеҙ!" Бөгөн аҡса эшләп, ситтә йәшәһәгеҙ ҙә, ауылдарҙағы нигеҙегеҙҙе ҡоротмағыҙ. Олоғайғас булһа ла барыбер кире ҡайтырһығыҙ. Үҙегеҙ ҡайтмаһағыҙ, балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ ҡайтыр. Уларҙың тыуған ер тип ҡайтыр атай нигеҙҙәре булһын.

**Айһылыу УРАҘГИЛДИНА.**
**Баймаҡ районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөрө, Ишембай һәм Бәләбәй ҡалалары федераль һәм республика бюджетынан ҡала территорияларын төҙөкләндереү, тарихи һәм мәҙәни ландшафтарын һаҡлап, заманса архитектура эштәрен башҡарыу өсөн 580 миллион һумға яҡын аҡса алған. Ҡалаларҙың уңайлы шарттар тыуҙырыу буйынса проекттары 2019 йылда Бөтә Рәсәй конкурсында еңгән, федераль аҡса 1 сентябргә тиклем үҙләштерелергә тейеш. 2020 йылда лауреаттар исемлегенә Мәләүез, Янауыл, Дүртөйлө, Ағиҙел ҡалалары һәм Краснокама районының Николо-Березовка ауылы инде.

✓15 август Ирәмәл тәбиғи паркы территорияһында #принёсзабери девизы менән экологик акция үтте. Ҡатнашыусылар Николаевка ауылынан алып Ирәмәлгә менгән юл буйын сүп-сарҙан таҙартты. Акция "Йәшел Башҡортостан" хәрәкте менән берлектә Махсус һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләре дирекцияһы, Белорет районы хакимиәте һәм БР Экология министрлығы ярҙамында урындағы туристик һәм йәмәғәт ойошмалары тарафынан ойошторолдо.

✓Яҡташыбыҙ Кристен Гайнеттың "Ҡатын" ("Жена") тулы метражлы документаль фильмы Грециялағы VII Халыҡ-ара документаль фильмдар фестивалендә икенсе премия лауреаты булды. Фильмдың сценарийын Кристен Гайнет үҙе яҙған. Унда йәш мосолман ҡатыны Әлфиназ ғүмерлеккә төрмәгә ябылған ирен күрергә Себерҙәге Харп ҡалаһына поезда китеп бара һәм үҙ тормошо тураһында һөйләй. Фильм быға тиклем Мәскәүҙә, Германия, Румыния, Ирак илдәрендә күрһәтелгән.

✓Айнур Аҫҡаровтың Мостай Кәрим әҫәре буйынса төшөрөлгән "Өҫ таған" фильмы "Будем жить" IX Мәскәү кинофестиваленең конкурс программаһына ингән. Фестиваль Рәсәй киноһы һәм Мәскәү ҡалаһы көндәренә арнап, илдең баш ҡалаһында 2020 йылдың август аҙағы-сентябрь башында уҙғарыла.

✓2021 йылда Башҡортостан колледждары һәм вуздары нигеҙендә 24 заманса оҫтахана асыла. Төбәктең 6 белем биреү учреждениеһы "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә "Йәш оҫталар" федераль проекты конкурсының грантын алды. Улар араһында Бәләбәй, Дыуан, Стәрлетамаҡ, Өфө һөнәри колледждары, ӨДАТУ һәм БДУ.

***✓ Башҡортостан музейҙарында мәктәп йәшендәге балалар менән башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса дәрестәр ойошторола. Акция онлайн форматта 2020 йылдың 25 декабренә тиклем дауам итә.***



ҠЫҪҠАСА

# СИТКӘ СЫҒАРАБЫҘ...

✓ **Йыл башынан Башҡортостан 93 млн АҠШ доллары күләмендә агросәнәғәт продукцияһын экспортҡа сығарҙы.** Был АПК продукцияһын экспортлау буйынса былтырғы йыл күрһәткестәренән юғары, тип билдәләйҙәр Ауыл хужалығы буйынса төбәк министрлығында. Башҡорт экспорты күләмендә эшкәртелгән продукцияның өстөнлөк ала барыуы күҙәтелә. Бөгөнгө көнгә ҡарата экспорт күләменең яртыһы тип әйтерлек май һәм май продукттарына тура килә. Шәкәр һәм башҡа төр аҙыҡ-түлек тә байтаҡ өлөштө тәшкил итә. Шуныһы мөһим: республика буйынса экспортланыусы тауарҙар ассортименты киңәйә бара. Мәҫәлән, Туймазы районы предприятиеларының береһе ситкә тәм-том сығара. Башҡорт кондитерҙары тауарҙары Рәсәй төбәктәрендә лә, унан ситтә, БДБ илдәрендә лә үҙ һатып алыусыларын таба. Әлеге ваҡытта башҡорт тәм-томон экспортлау буйынса Япония, Вьетнам, Төньяҡ Ҡытай, Израиль, АҠШ менән килешеүҙәр төҙөлгән. "Башинформ" хәбәр итеүенсә, Башҡортостан агросәнәғәтризыҡтарын экспортлау күрһәткесе 2024 йылға 230 млн доллар тәшкил итәсәк.

✓ **Башҡортостандың Асҡын районында автомобиль күрһәткесендәге хата чиновниктан штраф түләтеүгә сәбәп булды.** Республиканың Росреестр идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2020 йылдың икенсе кварталында дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлында ҡуйылған юл күрһәткесендә ике географик объекттың хаталы яҙылыуы асыҡланды. "Автомобиль юлы һәм ундағы ҡоролмалар йөкмәткеһе өсөн яуаплы вазифа биләүсегә ҡарата идаралыҡ тарафынан административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙөлдө",- тип хәбәр итәләр Росреестрҙың төбәк матбуғат хеҙмәтенән. Документтарҙа, картографик һәм башҡа баҫмаларҙа, юл һәм башҡа төрлө күрһәткестәрҙә Башҡортостандың географик объекттары атамаһында хаталар хаҡында граждандарҙан Росреестр идаралығының геодезия һәм картография бүлегенә түбәндәге адрес буйынса хәбәр итеүҙе һорайҙар: 450075, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 70 -се йорт, тел.: (847) 224-36-06 йәки ogk2@ rosreestr 02.ru.

✓ **Яңы йылдан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға пособие күләме 12 меңгә тиклем артасаҡ.** Рәсәй Хеҙмәт министрлығы законға ошоға ярашлы төҙәтмәләр буйынса эшләй, тип хәбәр итә "Известия" әлеге ведомствоның матбуғат хеҙмәтенә һылтанып. Әлеге ваҡытта ил буйынса бер балаға уртаса 5,5 мең һум аҡса түләнә. Башҡортостанда ул 4,9 мең тирәһе тәшкил итә. 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға әлеге күләмдә түләнгән айлыҡ пособие йыш ғаиләләрҙә ярлылыҡта көн итеүҙән ҡотҡарырлыҡ күләмдә булмай сыға, тип һөйләйҙәр Хеҙмәт министрлығында. Шунлыҡтан, 2021 йылға Министрлыҡ пособие күләмен арттырыуҙы маҡсатҡа ярашлы тип иҫәпләй. Төбәк Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, июлдә Башҡортостандан "Госуслуги" порталына әлеге түләүҙәр төрө буйынса 130 меңдән ашыу ғариза килгән, шуларҙың 64 меңе әле эшкәртеү үтә. Үҙ ғаризалары яҙмышы хаҡында республика граждандары автоинформатор ярҙамында белә ала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АУЫЛ ТРЕНЕРЫНА



**Башҡортостанда "Ауыл тренеры" программаһы булдырылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә хәбәр итеүенсә, 11 спорт төрө буйынса 600-әр мең һум ярҙам аласаҡ тәүге 15 кеше билдәләнгән.**

Еңеүселәр араһына спорт көрәше, бокс, көрәш, хоккей, биатлон, еңел һәм ауыр атлетика, яндан уҡ атыу, каратэ, спорт ориентирлашыуы һәм тай боксы тренерҙары бар. Улар Архангел, Бәләбәй, Белорет, Бөрө, Балтас, Өфө райондарындағы ауылдарҙа эшләй. "Аҡса ҡулға бирелмәй, сертификат рәүешендә тапшырыла. Уны өй һатып алыу йәки төҙөүгә тотонорға була. Рәсәй буйынса быңдай программа тик беҙҙә генә бар. Уның менән башҡа төбәктәр ҙә ҡыҙыҡһына башланы. Әлегә өс йылға тип планлаштырабыҙ, 250 тренерға ярҙам итергә иҫәпләйбеҙ. Белгестәр әйтеүенсә, был рәүешле беҙ ауылдарҙа тренерҙар һанын арттырабыҙ һәм төҙәп ятҡан спорт комплекстарын ныҡытабыҙ", - тип аңлатма бирҙе Радий Хәбиров.

Быға тиклем БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов "Ауыл тренеры" программаһы буйынса йыллыҡ финанслау күләме 60 миллион һум тәшкил итәсәк, тип хәбәр иткәйне. Уның һүҙҙәренсә, тренер быңдай бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе алыу тураһында район хакимиәте менән килешеү төҙөгәндән алып хеҙмәт бурысын 5 йылдан да кәм үтәмәҫкә тейеш.

# ЙӨҘ БАЛЛ ЙЫЙҒАНДАР




**Башҡортостанда БДИ һөҙөмтәләре буйынса 100-әр балл йыйған уҡыусыларҙы әҙерләгән уҡытыусылар 50-шәр мең һум аҡса аласаҡ.**

Был хаҡта Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин төбәк хөкүмәтенең оператив ултырышында хәбәр итте. Мәғлүм булыуынса, ошо йылдың апрелендә республика Башлығы Радий Хәбиров имтиханда100 балл йыйған уҡыусыларҙы әҙерләүсе дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларын аҡсалата дәртләндереү хаҡында указға ҡул ҡуйғайны. 100 балл туплаған уҡыусылар һаны күпме булыуға ҡарамаҫтан, премия күләме бөтәһенә лә 50-шәр мең тәшкил итә. "Бөгөнгө көнгә быңдай педагогтар һаны 106 кеше иҫәпләнә. Ошо арала эшен тамамлаясаҡ апелляция һөҙөмтәләре буйынса был уҡытыусыларҙың һаны бер аҙ ғына үҙгәреүе лә ихтимал, тип белдерҙе Айбулат Хажин.- Премия түләү өсөн яҡынса 5,5 млн һум талап ителә. Был аҡса бюджетта ҡаралмаған, уны хәл итеүҙе һорайбыҙ. Беҙҙә Төп дәүләт имтиханы буйынса янда ҡалған аҡса бар, сөнки тығыҙынсы кластар имтихан тапшырмағанлыҡтан, аҡса тотонолмай ҡалды..." Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ксекмәҫтән мәсьәләне хәл итергә һәм ошо айҙа уҡ уҡыусыларға премия аҡсаһын түләп ҡуйырға ҡушты. "Был түләүҙе беҙ экономияланған аҡса булмаған хәлдә лә башҡарыр инек. Бөгөн үк мәсьәләне ҡарап, хатта Уҡытыусылар көнө алдынан да түгел, ә августа уҡ түләргә кәрәк. Улар быға лайыҡ, был бик ҙур хеҙмәт",- тине Радий Хәбиров. "Башинформ" хәбәр итеүенсә, быйыл 17,9 мең уҡыусы БДИ тапшырҙы. Башҡортостанда имтиханға килеү кимәле 94 процент тәшкил итте. Шуға ярашлы, ун беренселәрҙән 6 проценты имтиханға килмәне. 100 баллы имтихан эштәре быйыл 127-гә тиклем артты. 100 балл туплаған эштәрҙең иң күбе (35)- химиянан, рус теленән (25), информатика һәм физиканан (20).

# ФИҘАҠӘРЛЕККӘ БАҺА




**Башҡортостанда уҡытыусылар һәм Берҙәм дәүләт имтиханын ойоштороусылар республиканан бер тапҡыр бирелә торған түләү алыуы мөмкин.**

Республика Мәғариф министрлығы документ проектын әҙерләй, уға ярашлы, уҡытыусылар COVID-19 таралыуы шарттарында Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыуына ҡарап, 2-нән 4 мең һумға тиклем аҡса алыуы ихтимал. Документ проектында әйтелгәнсә, имтихан үткәреү пункттары етәкселәре, Берҙәм дәүләт имтиханын уҙғарыуҙы контролдә тотҡан дәүләт имтихан комиссияһы ағзалары, муниципаль координаторҙар, аудиторияларҙағы ойоштороусылар, программа тәьминәте менән эшләү буйынса техник белгестәр, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының Төбәк мәғлүмәт эшкәртеү үҙәге директоры һәм директор урынбаҫары 4 мең һум алыуы мөмкин. Республика конфликт комиссияһы һәм республика фән комиссиялары рәйестәренә, рәйес урынбаҫарҙарына, секретарҙарына, ағзаларына бер тапҡыр 2500 һум түләргә тәҡдим ителә. Аудиториянан тыш ойоштороусыларға, һаулыҡ мөмкинлектәре сикле уҡыусыларға, уҙған йылдарҙа мәктәп тамамлаусыларға техник ярҙам күрһәткән ассистенттарға, Төбәк мәғлүмәт үҙәге хеҙмәткәрҙәренә - 2000 һум. Шуны билдәләп үтәйек: республика Башлығы указы проекты әҙерләнә һәм ғәмәлдәге документ булып һаналмай.

# "ТУҒАН ТЕЛ ИЛСЕЛӘРЕ"



**Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә "Туған тел илселәре" республика акцияһын үткәрә.**

Уның барышында Башҡортостан Республикаһы музейҙарында мәктәп йәшендәге балалар менән башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса дәрестәр ойошторола. Акция онлайн форматта 2020 йылдың 25 декабренә тиклем дауам итә. Республика акцияһы барышында Башҡортостан музейҙарында интерактив дәрестәрҙе төшөрөү башланды. Тәүге роликтар Баймаҡ районы Темәс ауылында Темәс тарихы-тыуған яҡты өйрәнеү музейында һәм Күгәрсен районы Төйөмбәт ауылында Зәйнәб Биишеваның йорт-музейында башланды. Сиратта - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында киләһе дәресте төшөрөү. Дәрестәрҙе "Туған тел донъяһы" сайтында ҡарарға мөмкин. "Проект уҡытыусылар, балалар һәм өлкәндәр араһында хуплау табыр, шулай уҡ тыуған төбәктең тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн сығанаҡ булып хеҙмәт итер тип ышанабыҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Булат Зиннуров.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөгөн республиканың 53 районында уңыш йыйыу бара, 387 гектарҙа бөртөклө иген һәм бөртөклө-ҡуҙаҡлы культуралары урып алынған. Был бөтә ашлыҡтың 20 процентын тәшкил итә. Бураларға 941 мең центнер иген һалынған. Төбәктә уртаса уңдырышлыҡ насар түгел, бер гектарҙан 26 центнер тәшкил итә. Йыйылған уныштың ҙур өлөшө ужым ашлыҡтары.

✓2011 йылдан алып Башҡортостанда "Домокомплект" программаһы буйынса 1598 ғаилә 434 миллион һумға льготалы займдар алып, торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Проект буйынса ағастан йорт һалыуға 300 мең һумға тиклем 5 йылға займ бирелә, уны 5 процент менән ҡайтарыу ҡаралған. Был осорҙа "Жилстройсбережения" һәм "Ауыл ипотекаһы" кеүек яңы тәҡдимдәр барлыҡҡа килде. Һуңғыһы 25 йылға 3 миллионға тиклем торлаҡ кредиты алып, йылына 3 процентҡа тиклем аҡса ҡайтарып тороуҙы ҡуҙаллай.

✓2020-2021 уҡыу йылында Өфө дәүләт нефть техник университетына 500-ҙән ашыу өҫтәлмә бюджет урындары бүленгән. Бакалавр, магистратура, специалитет һәм аспирантура программалары буйынса университет 3073 бюджет урыны тәҡдим итә. Әлеге көндә абитуриенттарҙан 25 мең ғариза килгән. Уҡыу йортонда сит ил вәкилдәре, юғары әҙерлекле һәм олимпиадаларҙа еңеү яулаған йәштәрҙән ғаризалар һаны артыуы билдәләнә.

✓Әлеге көндә Өфө ҡалаһы даими пассажирҙар ташыу муниципаль маршруттары туҡталҡа урындары реестрына 1233 туҡталҡа индерелгән. Ҡалала бөгөн 135 "Аҡыллы туҡталҡа" ҡуйылған. Шуларҙың 115-ен "Уфагортранс" МУП-ы хеҙмәтләндерә. Был туҡталҡалар светодиод яҡтылыҡ, транспорт килеүен хәбәр иткән мәғлүмәти табло, "112" берҙәм һандары буйынса ашығыс ярҙам хеҙмәттәрен саҡырыу, мобиль ҡоролмалар өсөн usb-зарядка менән йыһазландырылған. Шулай уҡ унда 3 тышҡы видеокүҙәтеү камераһы ҡуйылған.

✓Башҡортостанда юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплексының һуңғы 114 партияһын ҡуйыу ваҡытында тамамланды. Республиканың 63 муниципалитетында улар бөтәһе - 609. Камералар республика юлдарының аварриялар йыш теркәлгән урындарына ҡуйылды. ЮХХДИ-ла камераларҙың булыуы юл-транспорт ваҡиғалары һанына туранан-тура йоғонто яһай тип иҫәпләйҙәр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Шул ғына теүәл билдәле - Октябрь проспекты буйлап трамвайҙар хәрәкәт итмәйәсәк. Планда 10 километрға һуҙылған һәм Инорс, Сипайлово менән ҡаланың төньяҡ өлөшөн тоташтырған юл төҙөү", - тине мэр.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТРАМВАЙ ЮЛЫ КӘРӘК!

**Сираттағы оператив кәңәшмәне лә Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин видеоконференция форматында уҙғарҙы. Көн ҡаҙағына ҡуйылған мәсьәләләр буйынса фекер алыша башлаҙан алда ул республика территорияһында битлек кейеү режимы һаҡланыуын тағы бер ҡат хәтергә төшөрҙө.**

- Йома көндө республика Башлығы юғары әҙерлек режимы тураһындағы указына сираттағы үҙгәрештәр индерҙе. Айырып әйткәндә, сауҙа, финанс учреждениеларына барғанда, йәмәғәт транспортына ултырып йөрөгәндә һәм кешеләр күп йыйылған урындарҙа булғанда бөтәһе лә битлек һәм бирсәткәләр ҡулланырға тейеш. Ошо шәхси һаҡланыу әйберҙәре булмаған осраҡта ойошмалар клиенттарҙы хеҙмәтләндермәскә хоҡуҡлы, - тип билдәләне Өлфәт Мансур улы.

Өфө хакимиәте башлығы бүлек етәкселәре еткергән мәғлүмәттәрҙе тыңлағандан һуң, баш ҡаланың төньяҡ өлөшөндә яуған көслө ямғыр һөҙөмтәһендә канализациялар рәшәткәләренә һәм улаҡтарына килтерелгән зыянды тикшерергә ҡушты. Артабан кәңәшмә барышында тағы бер нисә көнүҙәк мәсьәлә күтәрелде. Ҡалала Берҙәм дәүләт имтиханы уҙғарыу һөҙөмтәләре тураһында Мәғариф идараһы етәксеһе урынбаҫары Тамара Ғәлимова һөйләне:

- Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханы 3 июлдән 8 августа тиклем үтте. Өфө мәктәптәре нигеҙендә 25 имтихан тапшырыу пункты эшләне. Имтихандар барышында бөтә хәүефһеҙлек саралары - пропуск режимы, балаларҙың тән температураһын күҙәтеү, бүлмәләрҙе таҙартыу һәм социаль аралыҡ һаҡлау үтәлде. БДИ осоронда 2 уҡыусы ғына сәләмәтлектәренә бәйле имтихан үткәрелгән урынға индерелмәне. Улар өҫтәлмә көндәрҙә имтихан тапшыра алды. Быйыл 8 предмет буйынса 58 уҡыусы 61 эште 100 балға эшләне. Былтырғы йыл һөҙөмтәләре менән сағыштырғанда юғары балл йыйған эштәр һаны 16-ға артҡан, 3 уҡыусы бер юлы ике предметтан 100 балл йыйҙы. 100 балл алыусыларҙың 38 проценты (22 кеше) республика вуздарына уҡырға инергә ниәтләй, - тине докладсы. Билдәләнеүенсә, быйылғы уҡыу йылында Өфөлә 5205 уҡыусы мәктәп тамамланы һәм улар, гәзәттәгесә, профилле математика (3395 кеше һайлаған), йәмғиәтте өйрәнеү (1993), физика (1456) предметтары буйынса имтихан тапшырыуға өҫтөнлөк бирҙе.

Артабан оператив кәңәшмәлә төҙөкләндерелгән юлдар сифаты тураһында Ҡаланың йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеү буйынса идаралыҡ етәксеһе Антон Тристан һәм Өфө хакимиәте Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе Рөстәм Хәмитов бәйән итте. Өлфәт Мостафин иһә, ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған сираттағы "Транспорт сәғәте"ндә яҡын киләсәктә Өфөлә трамвай селтәрен киңәйтеү тураһында фекер алышыуҙары тураһында һөйләне. "Беҙгә баш ҡаланың төньяҡ һәм көньяғы араһында берҙәм трамвай юлы бәйләнешен булдырыу мөһим. Әле беҙ хәрәкәтте тергеҙеүҙең бер нисә вариантын ҡарайбыҙ. Шул ғына теүәл билдәле - Октябрь проспекты буйлап трамвайҙар хәрәкәт итмәйәсәк. Планда 10 километрға һуҙылған һәм Инорс, Сипайлово менән ҡаланың төньяҡ өлөшөн тоташтырған юл төҙөү", - тине ул һәм мотлаҡ Өфө халҡының да фекерен ишетеү мөһим булыуына баҫым яһаны.

Кәңәшмәне йомғаҡлап, Өлфәт Мостафин 12 август көнө Өфө ҡалаһы өсөн иҫтәлекле ваҡиға, миллионлы ҡала статусы бирелеүгә 40 йыл тулыуы билдәләнеүен хәтергә төшөрҙө. "Йылдан йыл республиканың баш ҡалаһында халыҡ һаны арта бара. Шуны иҫәпкә алып, ҡала программалары һәм үҫеш пландары ҡабул ителә - яңы торлаҡ йорттар, мәктәп һәм балалар баҡсалары, социаль объекттар төҙөлә. 40 йыл эсендә Өфө бик үҙгәрҙе, ҡала замандан артта ҡалмай һәм ҙур мегаполисҡа әүерелде. Бик күп эштәр әле алда, шуға артабан да дәррәү, актив, ҡала халҡы менән берлектә эшләргә тейешбеҙ", - тип мөрәжәғәт итте кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға Өлфәт Мостафин.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҮТКӘҮЕЛДӘН ҮТЕҮ КҮҢЕЛЛЕ



**Өфөлә Воровский урамындағы ер аҫты үткәүелендә капиталь ремонт тамамланды. Ул Ағиҙел ярын реконструкциялау сиктәрендә тормошҡа ашырылды.**

1978 йылда асылған үткәүелде авария торошонда булыу сәбәпле ябалар һәм былтыр яҙ унда ремонт эштәре башлана. Ул яр буйын Салауат Юлаев баҡсаһы менән тоташтырырға тейеш. Объекттың оҙонлого 142 метр. Эш барышында инженер коммуникациялары яңыртылған, теръүҙәре һәм стеналары гранит менән йөҙләнгән, гидроизоляция эштәре башҡарылған. Бынан тыш, ер аҫты үткәүеленә 13 видеокамера, яҡтылыҡ сығанаҡтары ҡуйылған, хәрәкәт мөмкинлектәре сикле граждандар өсөн күтәргес платформаһы эшләнгән.

*ҠЫҪҠАСА*

# ӨФӨ МЕНӘН ТАНЫШ!

✓**Баш ҡалала тарихи һәм иҫтәлекле урындар буйлап бушлай экскурсиялар башланды.** Экскурсиялар аҙна һайын киске сәғәт 7-лә һәм 9-сы яртыла үтә. Ҡатнашыу өсөн, пандемия осорон иҫәпкә алып, мотлаҡ битлектә булыу һәм социаль дистанция һаҡлау талап ителә. Йыйылыу урыны: "Кунаҡһарай", "TERRA BASHKIRIA" арт-объекты. Бушлай экскурсияға эләгеү өсөн terrabashkiria.ru/open-bashkortastan/ufa сайтында алдан теркәлеү үтергә кәрәк. Электрон бланкыла тулыһынса исем-шәрифте, бәйләнеш номерын, кеше һанын, экскурсия сәғәтен һәм көнөн күрһәтеү кәрәк. Экскурсияға яҙылыу сара башланғанға тиклем өс сәғәт ҡалғас туҡтатыла. Төркөмгә 12 кеше генә алына. Ойоштороусылар булып БР Туризм буйынса дәүләт комитеты, Өфө ҡалаһы хакимиәте, БР экскурсоводтар гильдияһы һәм "Столица" туристик фирмаһы тора. "Өфө - бик ҡыҙыҡлы ҡала, әммә был турала барыһы ла, хатта өфөләр үҙҙәре лә белмәй. Беҙ ҡала халҡы һәм уның ҡунаҡтары ҡаланы яратыуын, уның тураһында күберәк белеүен теләйбеҙ", - ти БР Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов.

✓**Өфөлә Комсомол урамын яңыртыу эштәре дауам итә, ул 2019-2021 йылдар эсендә тамамланырға тейеш.** Ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, эштәр графикка ярашлы башҡарыла. Төҙөү-монтажлау эштәре барышында юл хәрәкәтен кварталдар буйлап сикләйҙәр. "Һәзиә Дәүләтшина бульварынан алып Галле ҡалаһы урамына тиклемге арауыҡта асфальттың аҫҡы өлөшө һалынды. Бөгөн Бессонов урамы транспорт өсөн асыласаҡ", - тип хәбәр итте участка етәксеһе Алексей Федотов. Комсомол урамын төҙөкләндереү барышында ҡойма яуын коллекторы һәм бөтә элемтәләр яңыртып ҡорола, асфальт һалына. Әле Галле ҡалаһы урамынан СССР-ҙың 50 йыллығы урамына тиклем эштәр бара. Яңыртылғандан һуң был урамдарҙа яҡшы юл, ҡойма яуын канализацияһы, йәйәүлеләр өсөн юлдар, яҡтылыҡ, туҡталҡалар, видеокүҙәтеү камералары, яңы юл хәрәкәте күрһәткестәре барлыҡҡа киләсәк. Урам "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә төҙөкләндерелә.

✓**Ошо көндәрҙә республикаға ябырылған ямғырҙар тиҙҙән туктаясаҡ, тип фаразлай Башгидрометүҙәк синоптиктары.** Августың 20-ләренән һауа температураһы + 24 градусҡаса күтәрелә башлаясаҡ. Был айҙа тотороҡланасаҡ унайлы һауа температураһы көҙ буйы һаҡланасаҡ, тип вәғәҙәләй синоптиктар. "Күп йыллыҡ күҙаллауҙарға ҡарағанда, Уралда сентябрҙең тәүге көндәрендә унайлы һауа шарттары көтөлә. Көндәҙ йылы торасаҡ, төнгө сәғәттәрҙә лә әллә ни һалҡынайтмаясаҡ. Йылы һауа шарттары октябрҙең икенсе ун көнлөгөнә тиклем дауам итәсәк, унан температура нуль градусҡаса түбәнәйә башлай. Ноябрҙә иһә терегөмөш бағанаһы минус күрһәткесендә нығынасаҡ", - "Пронедра" прогназ порталы ошондай күҙаллауҙар бирә.

✓**Өфөлә ташландыҡ, хужаһыҙ һәм һүтеп алынған транспорт саралары хужаларын эҙләү эше дауам итә.** Килгән ғаризалар буйынса 29 июль Өфөнөң Ленин һәм Дим райондарында махсус комиссия үткәргән рейд һөҙөмтәһендә 14 ҡарауһыҙ торған автомобиль барлығы асыҡланған, уларҙы үҙ иректәре менән күсереп ҡуйыу тураһында белдереүҙәр урынлаштырылған. Шул уҡ ваҡытта, килгән ғаризалар буйынса, комиссия йомғеһе 21 транспортты тикшергән. Уларҙың бишәүһе ғаризала күрһәтелгән адрес буйынса табылмаған, ә икәүһен комиссия ағзалары ташландыҡ, хужаһыҙ һәм һүтелгән тип танымаған. Ҡабаттан тикшереү 26 августан да һуңға ҡалдырмай үткәреләсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һоло бәлзәме

❖ Һолонан эшләнгән бәлзәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы, ашҡаҙан язваһы, ашҡаҙан аҫты биҙе, үт ҡыуығы, бауыр ауырыуҙарын дауалағанда шифалы. Сөнки һоло организмдағы матдәләр алмашыуын яйға һалырға ярҙам итә, уны аминокислоталар, микроорганизмдар менән байыта, көс бирә. Һолонан шыйыҡ бәлзәм әҙерләү өсөн 3 литрлыҡ банканың яртыһына тиклем ярмаға тарттырылған һолоно йәки геркулес һалырға. 10 ҡалаҡ онтаҡланған һоло ҡушырға. Өҫтөнән бүлмә температураһына тиклем һыуытылған ҡайнаған һыу ҡойорға. Әсеһен өсөн ҙур булмаған ҡара икмәк телеме һәм ярты стакан кефир ҡушырға. Банканың 90 проценты тулырға тейеш. 2-3 тәүлек үткәс, әсегән ҡатышманы тишекле сүмес аша ҙур эмалле һауытҡа һөҙөп алырға, шунан киренән 3 литрлыҡ банкаға ҡойоп, тондорорға. Артабан 3 литрлыҡ ике банка алып, ҡалған төпрәгә аҙлап-аҙлап һыу ҡойоп, таҙарғансы сайҡатырға һәм буш банкаларҙың береһенә ҡойорға. Был сайҡанды әсетелгән шыйыҡсанан өс тапҡыр күберәк булырға тейеш. Шунан банкаларҙың ауыҙын ябып, 12-16 сәғәт торорға. Тондоролған банкаларҙа ике ҡатлам: өҫкөһө - шыйыҡ, аҫта ҡуйы аҡ ҡатлам барлыҡҡа килә. Өҫтөн һаҡ ҡына 1 литрлыҡ банкаға ҡойоп алғас, ул ярты литр тәшкил итәсәк. Был кеҫәл әҙерләмәһе була. Банкаларҙы һыуытҡыста һаҡларға.

Кеҫәл әҙерләү өсөн 2-6 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1,5-2 стакан һөҙөп алынған тондоролған шыйыҡсаны ҡойорға. Кәрәкле ҡуйылыҡҡа тиклем талғын утта ҡайнатырға, болғап торорға. 5 минут ҡайнатыу ҙа етә. Шунан 1-2 ҡалаҡ көнбағыш майы һәм теләгәнсә тоҙ ҡушып, кеҫәлде бер аҙ һыуытырға. Ярты стакан бәлзәмгә 1 балғалаҡ бал ҡушҡанда, тағы ла тәмлерәк була. Ул ҡанда холестерин һәм шәкәрҙе кәметә. 30-45 көн дауамында иртәнсәк һайын 150 - 200 мл кеҫәл+ 100 г ҡара икмәк һәм 2 ҡалаҡ үҫемлек майы ҡабул итеү файҙалы. Һоло бәлзәме аҡыл һәм физик эшмәкәрлекте, йоҡоно яҡшырта, ашҡаҙан-эсәк юлын һәм үт-бауыр эшмәкәрлеген яйға һала.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында ҡайыу туҡыусылыҡтан ҡалышмаған. Ҡайылған орнамент менән үҙенсәлекле көнкүреш әйберҙәре биҙәлгән: өрләксәгә ҡыҫҡа шаршау, былай ваҡытта стенаға панно кеүек элеп ҡуйылған намаҙлыҡ, ашъяулыҡ, ҡулъяулыҡ, таҫтамал остары.



*Ҡайылған таҫтамал (БР, Ҡырмыҫҡалы районы, Ибраһим ауылы). РЭМ. XX б. уртаһы.*



*Өрләксә шаршауы (БР, Стәрлебаш районы, Табылды ауылы). РЭМ. XX б. уртаһы*

Ҡайыу башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының борондан килгән ҡул эштәренең береһе булған һәм Дим үрендә, Ағиҙелдең урта ағымы буйлап ул биҙәкле туҡыусылыҡҡа ҡарағанда ғәҙәтиерәк шөғөл һаналған. Ҡайылған әйберҙәр, Урал аръяғында кеүек үк, ғаиләлә генә түгел, күмәк башҡарылған йолаларҙа ла бүләк өсөн ҡулланылған. И.И. Лепехин Урал алды Ҡотлоғужа ауылында үткәрелгән һабантуй тураһында көндәлегенә күҙәтеүҙәрен теркәгән саҡта йола буйынса яңы ғына кейәүгә сыҡҡан йәш ҡатын бәйгелә еңеүселәргә бүләк итеп әҙерләгән "мөйөштәре буйлап төрлө төҫтәге ебәк еп менән ҡайылған" аҡ ҡулъяулыҡты телгә ала.

1909 йылда М.А. Круковский юл яҙмалары китабында Дим йылғаһы үҙәнендәге башҡорт өйөнөң ҡәҙимге биҙәлешен былай тасуирлай: "Мейестән бирге стенаға тиклем бүлмәне икегә бүлгән төрлө төҫлө биҙәктәр ҡайылған шаршау тартылған, ә киң, тәпәш урындыҡ бирге стенаның буйынан буйына һуҙылған". Улар өҫтөндә "стеналарҙан һәм һайғауҙан остары семәрләп сигелгән бихисап таҫтамалдар төшөп тора. Был таҫтамалдар күҙҙең яуын алырлыҡ була, биҙәктәре бер ҡасан да ҡабатланмай". Башҡорт ҡатыны, "халҡының сәнғәтен һаҡлаусы", "биҙәкте эстән уйлап ҡайый".

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КӨНАУАЗ*

# АЛТЫН УРТАЛЫҠ ҠАЙҘА?

**Ваҡиғалар ҡабатлана. Республика йәмәғәтселегеге оҙаҡ йылдар "Башҡортостан сода компанияһы"на сеймалға Ишембай районы биләмәһендә урынлашҡан изге тауыбыҙ Торатауҙы бирмәү өсөн көрәште. Хәҙер иһә көрәш тағы бер изге тауыбыҙ Ҡуштау буйынса йәйелдерелә. Белеүегеҙсә, 9 августа Ҡуштау буйында сираттағы флешмобҡа йыйылды 3 меңдән ашыу халыҡ. Бәхеткә күрә, бер ниндәй мажара-фәләнһеҙ үтте ул сара. Кисен иһә социаль селтәрҙәр Ҡуштауҙы яҡлаусылар лагерына 300-ләп билдәһеҙ кешеләр килеп тулыуы, уларҙың тәртипһеҙ ҡылыҡтары, янауҙары, быларҙың барыһын да БСК ойоштороуы тураһындағы хәбәрҙәр менән тулды. 10 августа иһә Ҡуштау эргәһенә тауҙы эшкәртеүгә ҡамасауламауҙы талап иткән БСК эшселәре йыйылыуын хәбәр иттеләр. Республика халҡы интернет хәбәрҙәре менән генә мөрхәтһенмәй, улар сәйәсмәндәрҙең, ғалимдарҙың, был мәсьәләгә компетентлы баһа биреүселәрҙең фекерҙәрен ишетергә теләй бөгөн. Мәҫәлән, "Башинформ" шундай бер нисә кешенең фекерен баҫтырып сығарҙы. Уларҙы гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ:**



***Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү буйынса Совет Ҡуштау шиханы тирәләй көсөргәнеш артыуға бәйле Фейсбуктағы сәхифәһендә рәсми белдереү менән сығыш яһаны:*** "Ишембай районы Үрнәк ауылы янындағы Ҡуштауҙа "Башҡортостан сода компанияһы" акционер йәмғиәте ағастарҙы ҡырҡып, геология-разведка эштәрен башлауға бәйле, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостандың тәбиғәт һәм тарихи ҡомартҡыһын һаҡлау, экологик именлек, хәүефһеҙлек нормалары өсөн сығыш яһаған республика йәмәғәтселегеге протест белдерҙе.

Геология-разведка эше алып барылған урынға илткән юл эргәһендә урманда активистар лагеры барлыҡҡа килде. Унда шәхси һаҡ предприятиеһы (ЧОП), полиция хеҙмәткәрҙәре, граждандар араһында бер нисә бәрелеш булды. 9 августа активистар Ҡуштауҙы һаҡлау тураһында ҡараш белдереп, флешмоб үткәрҙе. Сарала ҡатнашҡан Совет ағзалары белдереүенсә, "Ҡуштау, йәшә!" кеүек акцияларҙа тауға яҡын урынлашҡан Үрнәк ауылы халҡы төп ролде уйнай. Сара тыныс үтте, әммә 9 августан 10-на ҡарай төндә хәл киҫкенләште", - тиелә ғаризала.

Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү буйынса Совет ағзалары Ҡуштауға бәйле ҡаршылыҡтың көсәйеүе уларҙа ҙур борсолоу тыуҙырыуын билдәләй: "Проблема ҙурайып китмәһен өсөн, ике яҡтың да хоҡуғын иҫәпкә алып, Совет "Башҡортостан сода компанияһы" акционер йәмғиәтен активистар, ғалимдар һәм урындағы власть вәкилдәре менән тура диалогҡа сығырға саҡыра. Йәмғиәт тауҙы эшкәртергә рөхсәт биргән бөтә документын баҫтырып сығарһа, йәмәғәтселектең, киң мәғлүмәт сараларының һорауҙарына тура яуап бирһә, көсөргәнеш кәмейәсәк. Совет был ҡаршылыҡта һәр төрлө дәүләт булмаған бизнес-структуралар һәм билдәһеҙ формированиелар ҡатнашырға тейеш түгел тип иҫәпләй".

Совет шулай уҡ БСК-ға шәхси һаҡ предприятиелары көсөн шәхси милкен һаҡлау маҡсатында ғына файҙаланырға һәм активистарға ҡарата физик көс ҡулланмаҫҡа, Эске эштәр министрлығына, Рәсәй гвардияһына һәм башҡа көс ведомстволарына хеҙмәт бурыстарын үтәгәндә Ҡуштауҙы сәнәғәт эшкәртеү мәсьәләһе буйынса үҙ ҡарашын белдергән граждандарҙың законлы мәнфәғәтен һәм хоҡуғын иҫәпкә алып эшләргә тәҡдим итә.

***Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Ҡуштау менән бәйле хәлгә ҡарата борсолоу белдерә һәм тиҙ арала конструктив диалог башларға кәрәк тип иҫәпләй:*** "Мөһим социаль мәсьәләләрҙе протест йәки көс ҡулланыу ысулы менән хәл итеүгә юл ҡуйырға ярамай. Уларға сәйәси йәки милли йөкмәтке тағырға маташыу иһә бөтөнләй урынһыҙ.

"Башҡортостан сода компанияһы" эшмәкәрлегенең республика социаль - иҡтисади үҫешендә әһәмиәте ҙур, ул Стәрлетамаҡ ҡалаһының төп сәнәғәт предприятиеһы, федераль кимәлдәге стратегик объект булып тора. Әммә БСК етәкселеге ҡайһы бер мәсьәләләрҙә компетентлы булмауын күрһәтте, мәғлүмәти асыҡлыҡ мөһим икәнен һанға һуҡманы.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы компаниянан Ҡуштауҙа геологик разведка үткәреү мөмкинлектәре буйынса етди һәм объектив экспертиза үткәреүҙе талап итә. Бынан тыш, БСК һуңғы көндәрҙәге ваҡиғаларға аңлатма бирерҙәй барлыҡ документтарҙы йәмәғәтселеккә еткерергә бурыслы! Көс ҡулланыу, баҫым, провокациялар юлына йәмғиәтебеҙҙә урын булырға тейеш түгел. Был юл Башҡортостандағы ижтимағи-сәйәси тотороҡлолоҡто ҡаҡшатыу менән янай, мәсьәләнең конструктив хәл итеүен сикләй", - тиелә белдереүҙә.

***Территориаль ижтимағи-сәйәси процестар өлкәһендәге ғалим Александр Егоров шулай ти:*** "Ҡуштауҙы сеймал итеп эшкәртеүгә ҡаршы үткәрелгән акциялар республика халҡының гражданлыҡ әүҙемлеге үҫә икәнен күрһәтте. Был шатландыра, әлбиттә. Башҡортостан тәбиғәте күп яҡтан уникаль, уны һаҡлау - тәбиғәт һәм киләһе быуындар алдындағы бурысыбыҙ. Бер үк ваҡытта файҙалы ҡаҙылмалар табыу һәм эшкәртеү ҙә беҙҙең иҡтисадтың бер өлөшө. Үҙҙәренең эш урынын юғалтыуҙан ҡурҡҡан кешеләрҙе лә аңларға була. Шуға ла объектив факттарҙан һәм перспективаларҙан сығып эш итеү кәрәк был мәсьәләлә. География фәндәре кандидаты булараҡ, геоэкологик процестар тураһында ла, етештереүҙең техник-экономик нигеҙҙәре тураһында ла яҡшы беләм. Ғалимдар һәм белгестәр тарафынан шихандарҙы эшкәртеүҙең аҙыраҡ рентабелле булһа ла альтернатив варианттарын табыу тураһындағы фекерҙәр бер тапҡыр ғына яңғыраманы. Беҙ бер шиханды "ашаныҡ" инде, әлбиттә, ул бик күптәрҙе әлеге көнгә тиклем эш урыны менән тәьмин итә. Ләкин шихан урынында барлыҡҡа килгән карьер ҙа ниҙер тураһындалыр һөйләй бит. Ҡуштауҙы эшкәртеүгә ҡаршы кешеләрҙең күплеге артабан да был юлдан барыуҙы дауам итеүгә һәр кемдең дә әҙер түгеллеген күрһәтә..."

***Ғалим, сәйәсмән, БР Халыҡтары ассамблеяһы Советы ағзаһы Сергей Семенов:*** "Проблеманы комплекслы һәм йәмәғәтселек менән берҙәмлектә хәл итеү кәрәктер. "Сода"ға тап Башҡортостанда - эшләгән урынында үҙенең позитив позицияһын аныҡыраҡ билдәләү, был төбәктә тәбиғәтте һаҡлау буйынса саралар комплексы булдырыу һәм киләсәктә сеймал табыуҙың башҡа варианттары тураһында уйлау кәрәктер..."

***Эксперт, сәйәсмән Евгений Соболев:*** "Минеңсә, был һөйләшеүҙе "таҙа биттән" башлау мөһимдер. Иң беренсе сиратта, кемдеңдер, шул уҡ ваҡытта сит илдәгеләр "мәнфәғәте" тураһындағы күптән килгән риториканы онотоға һәм ике яҡты ла тыңлап, был диалогты асыҡ киңлеккә сығарыу кәрәк. Минеңсә, мәсьәләне көс ҡулланып хәл итергә тырышыу төбәк власына ышанысты юғалтыуға, республикала ҙур бүленешкә һәм агрессия үҫеүгә килтерәсәк".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беләһегеҙ, өлкән быуындың да, урта быуындың да телендә бер теләк: "Донъялар тыныс булһын!" Ошондай теләк менән янған бар халыҡ тулҡынланып, хәүефләнеп күҙәтә бөгөн Ҡуштау тирәләй барған ваҡиғаларҙы. Уның ер-һыуы өсөн янып-көйгән урындағы халыҡ өсөн дә, әллә күпме кешене эш урындары менән тәьмин иткән предприятие өсөн дә ниндәйҙер ыңғай сиселеше булырға тейештер бит инде? Фекер белдереүселәр һүҙенән дә аңлашыла был: йәмәғәтселек тә, ғалимдар, сәйәсмәндәр ҙә асыҡлыҡ, диалог, мәсьәләне тыныс хәл итеү яғында.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әҙерләне.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЙЫЛАН ЫРЫУЫНАН,

## боронғо башҡорт затынан беҙ



Тарихи фараз буйынса, боронғо осорҙарҙа ҡәүемдәш-ҡәрҙәш булып, "ҡай", "уран" һәм "аджлар" ("джилан") исемдәре менән аталып йөрөтөлгән халыҡтарҙың яҙмышы, тарихи ареналағы роле тәрлөсә була. Ошо этнонимдарҙы урта быуаттарҙа йәшәгән авторҙарҙың әҫәрҙәрендә осратып була. Фарсы тарихсыһы Фәхр ад-дин Мөбәрәкшах Мәрүәрруди (1206 йылда вафат) үҙенең "Китаб әл-ансаб" тигән әҫәрендә уға билдәле булған төрки ҡәбиләләр исемлеген теркәп ҡалдыра, бында ҡай һәм уран ҡәүемдәре йәнәш ҡуйылған: "турк, иймак, киркиз, карлух, чикиль, аймур, харлух, киник, йаги, салук, халадж, угуз, хита, гай, урус, кай, уран, тухси, тибат, кара тибат, саклай (саклаб), кимджи, кимак, хазар, кара хазар, кифджак, алтай, куджат, биджинак, угул, сатик, сутук, татар, кара татар, канклы, баргу, гуз, кара гур (гуз), тогуз гуз, ягма һәм агма, аракун (аракир), кайк, салгир, йагиз (йагир), рукур, байандур, алайандулук, угур, туграк, байат, тугурга, дуджира, суийк, йабагу, афшар, бекдиз, бакдали, икба, аткук, луузтара, урул (урал), ларталак, басмил, ильбарсхан".

Ҡасандыр үтә ҙур һәм көслө булған ҡай халҡы бер нисә быуат дауамында бүлгеләнеү, айырымланыу процестарын кисерә. Тора-бара ул төрлө территорияларҙа таралып йәшәүсе 4 өлөшкә бүленә: 1) Байкал күле аръяғында көн итеүсе уранҡай ҡәүеме; 2) Көнсығыш Монголияла һәм Ҡытай сигендә йәшәүсе төп ҡай халҡы; 3) кимак ҡәбиләләре союзы составындағы аджлар ("йыландар"); 4) угыҙ конфедерацияһы составындағы байси ("аҡ си"), йәғни "аҡ ҡай" халҡы.

IX быуат аҙағында угыҙҙар кимактар, хазарҙар һәм карлуктар хәрби союз төҙөп, Арал диңгеҙе буйы далаларына хужа булыу маҡсатында ошо территорияла өҫтөнлөк иткән бәшәнәктәргә һәм башҡорттарға оло яу аса. Аяуһыҙ алыштарҙа һан яғынан күберәк һәм көслөрәк дошман ҡыҫымына ҡаршы тора алмаған бәшәнәктәр һәм башҡорттарҙың бер өлөшө Ҡара диңгеҙҙән төньяҡтараҡ ятҡан киң территорияны үҙләштерергә мәжбүр ителә. Бәшәнәк һәм башҡорт союзы ошо ваҡыттан башлап ике быуат дауамында Көньяҡ рус кенәзлектәренә лә, Византия империяһына ла йыш ҡына һөжүм итеп, улар өсөн үтә хәүефле көскә әүерелә.

Элекке территорияларын ташлап китмәгән башҡорттар Һырдарья угыҙҙары дәүләтенә нигеҙ һалыусы легендар Угыҙ ханға арналған "Угыҙнамә" дастанында бына ниҙәр бәйән ителә: "Курал һәм Башгурд иленә килгәндә, уларҙың кешеләре буйһонмаҫ һәм мәкерле халыҡтарҙан ине. Үҙҙәренең тәкәбберлеге һәм ғорурлығы арҡаһында улар бер генә хаким алдында ла баш эймәҫ ине. Шул сағында Угыҙ уларҙың Ҡарашит исемле падишахын әсиргә алды. Шунан һуң Курал һәм Башгурд ил булып, яһаҡ түләргә риза булды... Угыҙ улдарының башҡа илдәрҙәге эштәре камиллыҡҡа еткерелгәс, шундай ҡарар сығарылды: уң ҡанатты хасил иткән Бузук ҡәбиләһе Сайрам сиктәренән һәм Башгурд тауҙарынан Карабахтың үҙенә тиклем йәйләүҙәргә хужа булырға тейеш".

Бузук составында ҡайлылар ҙур өҫтөнлөк ала, IX быуат аҙағында уларҙың күтәүлектәре "Башҡорт тауҙарына" (Кухход Башгурд) тиклем һуҙылған була. Тимәк, ошо осорҙан бирле ҡайлылар һәм Көньяҡ Урал башҡорттары тығыҙ бәйләнешкә инә башлай.

Әммә XI быуатта Угыҙ дәүләтендә эске кризис процестары көсәйә бара, сельджукиттар үҙәк хөкүмәткә ҡаршы көрәшкә күтәрелә. Шул уҡ ваҡытта Ляо империяһы кидандары Ҡытай сигендә йәшәүсе ҡай һәм кундарҙы ҡыҫырыҡлай башлай, һуңғылары ошо ваҡиғалар барышында үҙҙәре Кимак ҡағанатына бәреп инеп, бында йәшәгән ҡыпсаҡтарҙы элекке ерҙәренән ҡысеп китергә мәжбүр итә. Ҡыпсаҡтар, 1030 йылда фарсы тарихсыһы Бейхаки яҙыуынса, Арал диңгеҙе буйы далаларында йәшәүсе угыҙҙарҙы ла ҡасып китергә мәжбүр итә. Улары ике тарафҡа - бер өлөшө көньяҡҡа, Ислам илдәренә табан йүнәлһә, икенселәре Көньяҡ рус далаларына тиклем барып етә. Уларҙы рус йылъяҙмаларында торктар, тип атайҙар. Әммә 1054 йылда Киев Русе сиктәренә килеп еткән сарышары (рус вариантында - половецтар) угыҙҙарҙы был ерҙәрҙән дә ҡыуып ебәрә, уларҙың эҙҙәре Дунай буйында, Балканда бөтөнләйгә юғала. Көньяҡҡа киткән угыҙҙар Сельджуктар дәүләтен төҙөүҙә ҡатнаша, Иран, Ирак, Сирия һәм Кесе Азия территорияларын баҫып алып, көслө империя булдыра. XIII быуатта ошо империя айырым кенәзлектәргә - бейлектәргә тарҡалғас, ҡайлы ҡәбиләһе юлбашсыһы Сөләймән шахтың улы - Эртогрул бей Византия империяһының тәре йөрөтөүселәренә лә, Үҙәк Азияға баҫып ингән монгол ғәскәренә лә ҡаршы көрәш башлап, үҙе тирәһенә ошо яҡтарҙа көн итеүсе башҡа ҡәүемдәрҙе туплай. Уның улы, Осман султан төрөктәрҙең Осман империяһына нигеҙ һала.

XI быуат аҙаҡтарына, XII быуат башына ҡараған рус йылъяҙмаларында Дәште-Ҡыпсаҡ (Поле Половецкое) хандары Бүнәк (Боняк Шелудивый) һәм Тугоркан -Туғырхандың (Тугарин Змеевич) көньяҡ рус кенәзлектәренә һөжүм итеп, күп зыян килтереүҙәре хаҡында бәйән ителә. Ошо уҡ хандарҙың исемдәре европаса үҙгәртелгән хәлдә (Тогортак һәм Маниак) Византия императорының ҡыҙы Анна Комнинаның хатында телгә алына.

1091 йылда бәшәнәктәр Константинополдә ҡамап алғас, император Алексей Комнин үҙенең элекке дошмандарын - ҡыпсаҡ хандарын ярҙамға саҡыра, уларҙың ярҙамында империяны тамам тармар ителеүҙән йолоп ҡала. Бында шуныһы ҡыҙыҡлы: Тугоркан - Туғырхандың Змеевич, тип аталыуы. Шул уҡ рус йылъяҙмаларында ҡыпсаҡ-половецтарҙың бер һуғышсан ҡәбиләһе кешеләрен "каепичтар" тип атайҙар. Был Туғырхандың тотемдары йылан булған ҡәүемдең, йәғни шул уҡ "каепичтарҙың", йәғни ҡайлы ҡәбиләһенең ханы булыуына ишара.

Шулай итеп, X-XIII быуаттарҙа Көнбайыш Евразия тарихында ҡайлыларҙың ике ҙур төркөмө тергәлеп ҡала: угыҙҙарҙың Үҙәк Азиялағы ҡайы ҡәбиләһе (төрөк империяһын төҙөүселәр) һәм Ҡыпсаҡ Далаһы ҡайлылары. Башҡорттарҙың "йылан" тип исемләнә башлаған ырыуы халҡы угыҙ сығышлы булһа, ҡай (ҡайлы) этнонимын һаҡлап ҡалған башҡорттар ҙа бар. Ошо хаҡта Ә.-З. Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр" китабында ла мәғлүмәт бар: "Беҙҙең төп ырыуыбыҙ Суҡлы Ҡай, һәм шулай уҡ беҙгә яҡын булған Санаҡлы Ҡай, Йөрәктау Ҡай, Таулы Ҡайҙар Ҡай, йәғни Ҡайлы ырыуына инә".

Ҡайлыларҙың ошо ике тармағы вәкилдәренең башҡорт халҡына ҡушылыуы бер үк осорға ҡарамай, тигән фекер менән ризалашырға була. "Угыҙнамә" дастанына ярашлы, тәүге ҡайлылар Көньяҡ Уралға IX быуат аҙаҡтарында уҡ килеп етә. Тикшереүсе С.Г. Агаджанов ошо турала былай тип яҙа: "Көнбайыш Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән угыҙ ҡәбиләләре көндәлек тормоштарында башҡорттар һәм башҡа күрше халыҡтар менән өҡшаш һыҙаттарға эйә булған. Көньяҡ Башҡортостанда ҡаҙып асылған, IX-XIII быуаттарға ҡараған курган ҡәберлектәрендә табылған инвентарь ошо хаҡта һөйләй. Ошо кургандарҙа табылған көнкүреш һәм хәрби йыһаз-ҡоралдар, ерләү йолалары көньяҡ рус далаларындағы торк-угыҙҙарҙан ҡалған ҡәберлектәрҙәге инвентарға оҡшаш".

X быуат башында Бөйөк Булгар ханлығына сәйәхәт ҡылған ғәрәп илселеге секретары Ибн Фаҙландың башҡорттар араһында йыланға табыныусылар булыуы хаҡындағы мәғлүмәте, күрәһең, был ваҡытта башҡорт халҡы составына ҡайлы йәиһә йылан ырыуы вәкилдәре ҡушылыуын асыҡ сағылдырып тора. Әйтергә кәрәк, Угыҙ дәүләтселеге тарҡала барған осорҙа, Көньяҡ Уралға килеп етеп, бында төп халыҡ сифатында көн иткән башҡорттарға башҡа бөләкәйерәк ҡәүемдәр ҙа ҡушылған. Улар иҫәбенә угыҙҙарҙың байат ҡәбиләһен дә индерергә була, Башҡорт илендә ул байлар ырыуы исемендә билдәле була. Ә Дәште Ҡыпсаҡта дан алған ҡайлыларҙың бер киҫәге (рус йылъяҙмаларындағы каепичтар), ошо уҡ далалар иленең уран, ҡобау, ҡыпсаҡ кеүек халыҡтары менән бер рәттән, XIII быуатта Евразия ҡитғаһын тетрәткән монгол яуҙарынан һуң, тарихи Башҡортостан территорияһында ахырынаса башҡортлашып, халҡыбыҙҙың айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелә.

Алтын Урҙа дәүләте тарҡалғандан һуң, йәғни XIV быуат аҙаҡтарынан башлап, көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорт ырыуҙары кеүек үк, йылан, ҡайлы ырыуҙары Нуғай хандарына буйһонған хәлдә йәшәй. 1557 йылда тарҡалыу кисергән нуғайҙарҙың ханы Исмаил бей Мәскәү подданствоһын ала. Шул уҡ осорҙа башҡорт ырыуҙары бейҙәре лә, Нуғай ханлығына буйһоноуҙан ваз кисеп, туранан-тура Рус дәүләте власын танып, Иван Грозный хакимиәте менән тарихта билдәле килешеүҙәр төҙөүгә өлгәшә. Йылан ырыуы башҡорттары ла, документаль сығанаҡтарҙан күренеүенсә, 1573-1574 йылдарҙа Аҡ батшанан үҙҙәре биләгән ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғын ҡанунлаштырған жалованный грамоталар ала.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Дивизияның политбүлек начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадиров үҙенең "Урал бәркөтө" китабында былай тип яҙҙы: "Майор Нафиҡовтың үлеүенә Шайморатов бик ныҡ ҡайғырҙы - ул батыр командир, уның тоғро дуҫы, таянысы ине. Ауыр көрһөнөп: "Ҡыйыу йөрәкле, Коммунистар партияһына, Бөйөк Ватанға йәне-тәне менән бирелгән, үҙ эшен яҡшы белгән, тактик яҡтан оҫта командир ине", - тине. Ошо ҡайғылы хәбәрҙе ишетеү менән, бөтә подразделениеларҙа матәм митингылары уҙғарылды. Һөйөклө тыуған ергә, Башҡортостан халҡына башҡорт һуғышсыларының изге анты рәүешендә хат яҙып ҡабул ителде".

1942 йылдың июлендә яҙылған ошо хатта бына ниҙәр бәйән ителә:

"Башҡорт атлылары дошманды
аяуһыҙ ҡыра!
Башҡортостан халҡына - үҙенең
героик улдарынан.

Ҡәҙерле иптәштәр! Әшселәр, әшсе ҡатын-ҡыҙҙар, колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, хеҙмәтсән интеллигенция, беҙҙең ғаиләләребеҙ һәм туғандарыбыҙ!

Беҙ, Башҡортостандан килгән боецтар, командирҙар һәм политработниктар, кәрәкле хәрби әҙерлек үтеп, хәҙер дошманға ҡаршы актив һуғыш хәрәкәттәре алып бара башланыҡ һәм һеҙгә боевой сәләмебеҙҙе ебәрәбеҙ.

Беҙ, Совет Башҡортостаны улдары, һәр ҡарыш еребеҙҙе яуыз дошмандан батырҙарса һаҡлайбыҙ. Башҡортостан атлылары дошманға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа уны артҡа алып ташланылар һәм уға ҙур юғалтыу килтерҙеләр. Күп йәнле көстәрен ҡоралдары һәм материаль частары менән бергә ҡырҙылар. Байтаҡ орудиеларын, миномёттарын, пулемёттарын, һуғыш припастарын юҡ иттеләр һәм трофейҙар баҫып алдылар.

Башҡорт халҡының воиндары, бөйөк Советтар Союзының бөтә воиндары - рус, украин, белорус, ҡаҙаҡ, грузин һәм башҡа халыҡтарҙың воиндары кеүек үк, үҙҙәренең намыҫы һәм азатлығы өсөн, Тыуған илде Гитлер эттәренән азат итеү өсөн көрәшеүҙәрен беләләр. Боецтарыбыҙ, командирҙарыбыҙ һәм политработниктарыбыҙ арыҫлан кеүек һуғышалар, ысын геройлыҡ күрһәтәләр.

Беҙ үҙебеҙҙең һуғыш хәрәкәттәребеҙ айырым эпизодтары һәм батыр атлы воиндарыбыҙҙың героизмы тураһында һеҙҙең менән уртаҡлашыуыбыҙға шатбыҙ.

Оборона һыҙығының бер участкаһында дошман эсэсовсылар менән көсәйтелгән, автоматик ҡорал менән ҡоралланған мотомеханизацияланған пехотаһын килтерҙе һәм танкылар, самолеттар ышығы аҫтында оборона районына йырып үтеү һәм частарыбыҙҙы ҡамап алыу өсөн беҙгә удар бирергә әҙерләнде. Иҫерек фашист бандиттары миномёттан һәм пулемёттан өҙлөкһөҙ алып барылған ут аҫтына ышыҡланып, Н. йылғаһы аша сыға алдылар. Ләкин беҙҙең атлылар ҡаушап ҡалманылар. Улар фрицтарҙы мөмкин тиклем яҡынығараҡ үткәреп ебәрҙеләр һәм "ура", "Тыуған ил өсөн" тигән орандар менән контратакаға ташландылар, немецтарҙы элекке позицияларына ҡыҫырыҡланылар. Дошмандың психик атакаһы кире ҡағылды, ул ҙур юғалтыу кисерҙе.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Иң тәүге аҙымым - республикала һәм баш ҡалала балалар музыка мәктәптәренең матди базаһын нығытыу, уҡыу шарттарын яҡшыртыу булды. Быға тиклем ҡаралмаған музыка мәктәбе бүлмәләрендә ремонт үткәрелде.***

# БЕҘҘЕҢ МӘҘӘНИӘТ

## Әхмәтбаҡый хәҙрәт

**Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡова менән осрашыуға ентекләп әҙерләндем, дәүләт хеҙмәте кешеһенә бирәсәк һорауҙарымды ҡат-ҡат барлап сыҡтым. Бөгөнгө гәзит уҡыусыларға уның ниндәй уй-фекерҙәре кәрәкле һәм фәһемле булыр икән, йәнәһе... Әминә Ивнәй ҡыҙы, ғәҙәтенсә, йүгерә-атлай "Киске Өфө" редакцияһына килеп кергәс, нисектер, күңелгә тыныслыҡ һирпелде. Карантин шартын тотоп, күрешеү-ҡосаҡлашыу булманы, ләкин ҡунаҡтың ҡыйыу сая күҙ ҡарашы, мөләйем йылмайыуы йылы ҡосаҡтарға алмаштырғыһыҙ самими-ихлас ышаныс уятты. Республика һәм баш ҡала өсөн башҡорт телендә ун алты битлек аҙналыҡ гәзит сығарып ултырған журналистарҙың ябай ғына эш бүлмәләренә күҙ һалып ҡарап сыҡты ул, шунан сәй өҫтәле янына үттек тә йәнле әңгәмә ҡороп ебәрҙек. Ни өсөн "йәнле" тигән һүҙ тура килә, сөнки мәҙәниәт министры баштан уҡ "дилбегәне үҙ ҡулына алды", йәғни үҙе беҙгә һорау ҡуйып: "Башлайыҡмы? Әҙерһегеҙме?" - тиеп, йәһәтләп һүҙ башланы. Беҙ уның беҙҙә лә үҙ кабинетындағыса иркен тотоуын, эргәһендәге кешеләрҙе йәтеш кенә ҡороҡлап алыуын көләмһерәп кенә күҙәтеп, диҡҡәтләп тыңлай башланыҡ.**

- Мин Бөрйән ҡыҙы. Бөрйәндә тыуҙым, ете йәшемә хәтле шунда йәшәнем, шуға күрә бик яратам, бик һағынам, бик яҡын күрәм был төбәкте. Бөрйән минең өсөн бер ҡасан да төпкөл булманы, ә донъяның башы булды. Унда туған башҡорт телемде булмышыма һеңдерҙем, тәүләп музыка мәктәбенә йөрөнөм, бик матур ҡыҙҙар, малайҙар менән дуҫлашып, геү килеп уйнап рәхәтләндем...

Әсәйем Ейәнсура районы Үрген ауылынан, атайым Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан. Беҙҙең ғаилә эш буйынса һәр саҡ күсеп йөрөй - башта Йылайыр яғында Дмитриевка ауылында йәшәйҙәр, унда апайым Әнисә тыуа. Торараҡ йәш ғаилә Бөрйән районына Ырғыҙлы ауылына күсенә, унда икенсе бала булып мин донъяға килгәнмен. Миңә ете йәш булғансы Бөрйәндә йәшәгәнбеҙ. Тап шул осорҙа атайым Ивнәй Шафиҡов башҡорт тоҡомло ҡырағай бал ҡортон - солоҡ ҡортон өйрәнеү, эйәләштереү, республикала таратыу буйынса ғилми эш башлай. Атайым йәне-тәне менән тәбиғәт кешеһе, йөрөгән ерендә бары тик ер-һыу донъяһы менән ҡыҙыҡһына һәм бик яратып һөйләй - ҡош булһынмы, үлән-ағас булһынмы, бик яҡшы белә, һәр яҡтан оҫта тасуирлап, теләһә кемдең ауыҙын астырырлыҡ ҡыҙыҡлы итеп лекциялар уҡый. Ул һәр тәбиғәт күренешенә ифрат теүәл халыҡсан күҙәтеүсәнлек менән аңлатмалар бирә ала. Ә инде уның белеменең "тоҙо" - башҡорт солоҡ бал ҡорто. Ошо темаға мөкиббән киткән ғалим кеше ул, фән кандидаты дәрәжәһенә ирешеүе лә "Изучение и селекция бурзянских бортевых пчел Башкирского государственного заповедника" тигән темаға эҙләнеүҙәре менән бәйле. Ул ҡортсолоҡто оло һөнәрмәнлек итеп ҡараны, фәнни хеҙмәттәр яҙҙы. Бал алыусы һәм бал ашаусы булараҡ түгел, ә бал ҡорто цивилизацияһы менән йәнәш йәшәгән кешелек цивилизацияһы күҙлегенән өйрәнде был тармаҡты. 1990 йылдарҙа атайымдың "Бал ҡортоноң наҙы бар" тигән баш аҫтындағы яҙмалары республиканың бик күп матбуғат баҫмаларында донъя күрҙе, Башҡортостан халҡы тәү тапҡыр шундай төпсөр һәм аңлайышлы ғилми анализ-күҙәтеүҙәрҙе уҡып кинәнде, уйланды, тетрәнде...

**Тәбиғәткә һөйөүегеҙ аңлашыла - Бөрйәндә һәм шулай уҡ тәбиғәткә битараф булмаған ғаиләлә тыуып үҫкәнһегеҙ. Ә һеҙҙең музыкаға мөкиббәнлек кемдән һуң?**

- Бындай ырыҫыма ла атайым менән әсәйем ихлас итеп нигеҙ һалды, беҙҙе үҙебеҙҙең йыр-моң менән тәрбиәләне, тип ҙур рәхмәт тойғоһо менән әйтә алам. Әсәйем - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, махсус музыка мәктәбендә лә эшләне. Радио аша көнөнә өс мәртәбә башҡорт йырҙары концертын тапшыралар ине беҙ бала саҡта, шул да бик ҙур роль уйнаны беҙҙең тәрбиәлә, бөтә йырсыларыбыҙҙы тауышынан танып үҫтек, улар башҡарған халыҡ көйҙәрен күңелгә һеңдерҙек. Радионан ағылып торған был моңдаръя беҙҙә милли мәҙәниәт зауҡын үҫтергән йән аҙығы булды.

1981 йылда ғаиләбеҙ Өфөгә күсеп килде, һәр ял һайын тиерлек Башҡорт академия драма театрына, опера һәм балет театрына бармай ҡалмайбыҙ. Атайым менән бергәләп "Кармен" операһын, "Аҡҡош күле" балетын ҡарап ҡыуанғаным һаман иҫтә. Әсәйем мине Өфөләге бер музыкаль кисәнән дә ҡалдырмай йөрөттө. Беҙ ҡарамаған бер спектакль дә ҡалманы шикелле. Ошо үҙе бәхет түгелме ни? Атай-әсәйемдең илһөйәрлек тәрбиәһе, күңелемде байытҡан классик мәҙәни күренештәр миңә ғүмергә етерлек һабаҡ булды. Бигерәк тә халыҡ моңо миңә шулай уҡ бәләкәйҙән һеңгән, тип уйлайым, шуға күрә мин уны бик яҡын күрәм, аңлайым. Халҡыбыҙҙың музыкаль мираҫын яҡын күреүем - донъя сәнғәтенә асҡыс ул, шуға ла һәр халыҡтың йыр-көй сәнғәте миңә ҡыҙыҡлы һәм аңлашыла. Шулай итеп, академик музыканы ла тыңлап һәм үҙем дә фортепианола уйнап үҫтем, академик театрҙарҙа оло актерҙар уйнауын ваҡытында үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Башҡорт сәнғәте тураһында һөйләшеүҙәр беҙҙең өйҙә һәр ваҡыт ғәҙәти күренеш булды, фекер алышыу бик ҡыҙыҡлы үтә ине. Шулай итеп, мәҙәниәткә һәм сәнғәткә битараф булып үҫмәнем, киреһенсә, һәр яҡшы йәки кире яңылыҡҡа ҡарата үҙ ҡарашым, үҙ баһалауым шулай уҡ бала саҡтан тәрбиәләнде.

**Сәнғәт һәм мәҙәниәт бөтә кешегә лә яҡын, әммә бик һирәктәр тормош диңгеҙендә үҙҙәренең яҙмышына уларҙы ишкәк итеп ала, йәғни ғүмерен мәҙәни ижадҡа бағышлай, сәнғәткә хеҙмәт итә. Ундайҙарҙы ваҡытында һәм һәр ваҡытта дөрөҫ баһаларға, күрә белергә, ярҙам итергә кәрәк. Һеҙгә оло сәнғәткә юл нисек асылды?**

- Бала саҡтан музыка мәктәптәрендә шөғөлләнеү, сәхнәләрҙә сығыш яһау, тәүге уңыштар, еңеүҙәр - береһе лә еңел генә, үҙ-үҙенән генә булмай. Етди конкурстарҙа, талапсан баһалама төркөмө алдында классик көйҙө башҡарыу - ябай ғына сығыш яһау түгел әле. Ана шул мәлдә характер ҙа формалаша, тәүәккәллек һәм ҡыйыулыҡ, яуаплылыҡ һәм оҫталыҡ тигән сифаттар ҙа нығына. Халыҡ алдына сығыу - ул һәр көн һайын туғыҙ-ун сәғәтләп инструмент артында ултырыу, оҙайлы сәғәттәр буйы ҡабатланған күнекмәләрҙең һөҙөмтәһе. Уңыш тырышлыҡ һәм сыҙамлыҡ талап итә - ошо ябай ҡанунды онотоорға ярамай. Ҡабатлап әйтәм, атай-әсәй беҙҙе эшкә, тырышлыҡҡа, ныҡышмаллыҡҡа өйрәтеп үҫтерҙе, шуға рәхмәтлебеҙ.

**Дәүләт хеҙмәтенә, хөкүмәт эшенә әҙерлек мотлаҡмы? Уңышлы чиновник булыр өсөн ниндәй сифаттар йәки тәрбиәүи шарттар кәрәк?**

- Эште яратырға, эштән ҡурҡмаҫҡа кәрәк! Шулай уҡ тырышып эшләгән кешеләрҙе танырға һәм хөрмәт итергә кәрәк. Әлбиттә, ойоштороуәйҙәү һәләтең, административ яҡтан ниндәйҙер оһолоң-дарманың булмаһа, кешегә тота килеп дәүләт кимәлендәге эште йөкмәтмәйҙәр. 2012 йылда мине Хөкүмәт йортона саҡыртып, министрлыҡ эшен тәҡдим иткәндә мин Өфө дәүләт сәнғәт институты ректоры инем. Профессор статусым бар, эшемде яратам, эшем көйлө генә бара. Институттағы бөтә төр мәҙәни йүнәлешле бүлектәр менән танышмын, ә бөтә республикала был ижади йүнәлештәр әллә нисә ҡоштоң ҡанаты кеүек, бермә-бер киңәйеп, асылып китә. Мәгәр мин был киңлеккә осорға әҙер инем. Һәр хәлдә, институтта проректор, шунан аҙаҡ ректор булып ҡайнап эшләгән осор - минең тормошомда алтын дәүер, тип һанайым: кеше менән эшләргә, ижад кешеһе менән елғыуарҙарҙы - көндө-ваҡытты бушҡа үткәреүселәрҙе айырырға ла өйрәндем. Был осор минең өсөн ҙур мәктәп булды.

Министрлыҡтағы эшкә баштан-аяҡ сумып, һәр мәҙәни тарафҡа тулы диҡҡәт бүлеп, төрлө кимәлдәге белгестәрҙе дәррәү әйҙәп тотонорға тура килде. Минең быға тиклем дәүләт аппаратында эшләү тәжрибәм дә бар ине, был йәһәттән үҙемдең остазым тип һанаған шәхескә - Ишморатов Хәләф Хәлфетдин улына рәхмәтем ҙур. Ул үҙе бөтә Рәсәйҙә күренекле етәксе - мәҙәниәт министры булды, уны һәр төбәктә хөрмәт иттеләр, ҡайҙа барһа ла һүҙе үтә, эште белеп ойоштора ине. Ул министрлыҡта йәш һәм берҙәм команда туплап алды, уны эшкә ҡуша белде. Ишморатов ҡулы аҫтында эшләп алған ваҡытты мин бик мөһим рухи сынығыу һәм белем туплау осоро, тип баһалайым. Беҙҙең ул саҡтағы аппарат бик теремек, төплө белемле кешеләрҙән торҙо. Дүрт йыл эшләнем мин ошо коллективта, күптәре хаҡында, ул минең бына тигән арҡаҙашым, фекерҙәшем, әйҙәүсем һәм уҡытыусым булды, тип әйтә алам.

Шуға күрә минең Мәҙәниәт министрлығы етәксеһе вазифаһында эш башлауым стратегик яҡтан еңел булды, тип әйтә алам, сөнки алда әйтеп киткән уҡытыусыларым миңә төп принциптарҙы, ойоштороу серҙәрен һәйбәт төшөндөрҙө. Ә инде иҫәп-хисап нескәлектәре, йәғни пландар, цифрҙар-һандар улар профессиональ белемдәре булған хеҙмәткәрҙәр ҡулында, шулай ҙа тап ошо яҡтан рычаг-тотҡа ныҡ булырға, дөрөҫ һәм ваҡытында хәрәкәткә килергә тейеш. Был яҡлап мин белгестәргә ышанам, таянам һәм үҙем дә был эште артабан өйрәнеүемде дауам итәм.

Мәҫәлән, минең эшкә башлаған мәлдәге иң тәүге аҙымым - республикала һәм баш ҡалала балалар музыка мәктәптәренең матди базаһын нығытыу, уҡыу шарттарын яҡшыртыу булды. Быға тиклем икешәр тиҫтә йылдар буйы ҡаралмаған музыка мәктәбе бүлмәләрендә ремонт үткәрелде һәм уйын ҡоралдары тулыһынса яңыртылды. Әүәлгесә арзан һәм сифатһыҙ эшләнгән инструменттар урынына, хаҡының ҡиммәтле булыуына ҡарап тормайынса, махсус оҫтахаnaларҙа яһалған, яҡшы яҡтан баһаланған музыка ҡоралдары һатып алынды. Хәҙер инде был мәктәптәрҙән һәйбәт һөҙөмтәләр көтөргә һәм талап итергә була.

Матди етешһеҙлектәр мәҙәни тормошҡа аяҡ та сала, алға барырға ла сәмләндерә. Беҙ - Рәсәйҙә иң күп клубтар тотҡан республика. Мәҙәниәт йорттары ла бер өҙлөкһөҙ ремонт һәм реконструкция талап итә. Элек уларҙы колхоз-совхоз-заводтар ҙа ҡараған, әммә тейешле ҡоролмалар, кейемдәр һәм инструменттарҙың үҙ ваҡыты бар, уларҙы яңыртып торорға кәрәк.

Ләкин донъяның рухи байлыҡ тигән яғы ла бар. Бигерәк тә кеше таланты, яҙмыштары, кеше күңеле тураһында һаҡ уйлап эш итергә ине. Кешегә уңайлы булһын, файҙалы булһын ине беҙҙең бөгөнгө мәҙәни ҡаҙаныштар. Дәүләт эше лә мәңге-

> ***Эштәге ҡәтғи аҙымдарҙы "Был - характер күрһәтеү", тип әйтмәҫ инем. Була шундай мәлдәр: миңә йөҙәрләгән ҡараш төбәлә, хәл иткес төп яуапты минән көтәләр. Бындай саҡта бөтә көсөмдө һалам: килеп тыуған мәсьәләне тиҙ һәм дөрөҫ сисергә, бер кемде лә рәнйетмәҫлек һәм кәмһетмәҫлек юлдар-яуаптар, һәр кешегә дәрт, ышаныс, илһам бирерлек алтын урталыҡты табырға. Мөһим ҡарар ҡабул иткән ваҡытта мин ике шартты ныҡ тотам: беренсенән, үҙ-үҙем менән килешеүем, үҙемдең ышаныуым һәм теләүем кәрәк. Икенсе шарт: янымдағы коллегаларым менән кәңәшләшәм, уларҙың уй-фекерен ишетәм, үҙемдеке менән уртаҡлашам, әгәр аныҡ яуап табылмаһа, мәсьәләне ситкә ҡуйып торам, сабыр итәм. Минең быға ғына сыҙамлығым етә, бары тик дөрөҫ юл һәм фекер табылһын. Был характермы? Бәлки, ошо ла минең холҡомдоң төп сифатылыр...***

***✓ Һәр хәлдә, етәксе булырға яҙғас, үҙеңдең аҡыл һәм тәжрибә бизмәнең булырға тейеш. Ҡарар ҡабул итәһең, төп стратегия-эштең барышын билдәләйһең, эшеңдә бөтә халыҡ һәм ил тормошона ярашлы алға алып бараһың.***



лек түгел бит. Аҙаҡ, был эштән киткәс тә, һине хөрмәт итеүҙәре кәрәк. Минең балама ла, һинең әсәйең шулай булды, былай булды, тип ауыр һүҙҙәр ишетерлек булмаһын.

Шулай итеп, минең рухи булмышым хаҡында бер ауыҙ һүҙ менән әйткәндә: мин - халыҡ йыр-көй сәнғәтенә һәм классик донъя музыкаһына берҙәй тоғро кешемен, шунан һуң бергә тупланып эшләгән фекерҙәштәремде, арҡаҙаштарымды хөрмәт итәм, эргәмдәге эшлекле команда миңә бөгөн көс бирә. Ошо ике төп принцип, ике таяныс - бала саҡтан бирелгән маҡсатлы тәрбиә ул.

**Башҡортостан Республикаһының бөгөнгө мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡованы сая һәм тәүәккәл холоҡло кеше тип беләбеҙ. Эшегеҙҙә төрлө ваҡыттар була, күп осраҡта характер күрһәтергә тура киләлер...**

- Характер булмаһа, бер ни ҙә эшләп булмай. Характер ныҡ булыуы бик мөһим. "Булыр бала биләүҙән", тигәндәй, бала саҡта минең менән бер ҡыҙыҡлы хәл булды. Уны әле булһа көлөп иҫкә ала яҡындарым. Дүрт йәштә инем. Әсәйем мине күрше апайға ҡалдырып, эшкә китте. Уянып китһәм, күк күкрәп ямғыр яуа, теге апай өйҙә юҡ. Мин тәҙрәне яра һуҡтым, һикереп тышҡа сыҡтым да апайҙы эҙләп киттем. Ошо ваҡиғала ниндәйҙер характер барлығы сағыла түгелме?

Ләкин эштәге ҡәтғи аҙымдарҙы "Был - характер күрһәтеү", тип әйтмәҫ инем. Була шундай мәлдәр: миңә йөҙәрләгән ҡараш төбәлә, хәл иткес төп яуапты минән көтәләр. Бындай саҡта бөтә көсөмдө һалам: килеп тыуған мәсьәләне тиҙ һәм дөрөҫ сисергә, бер кемде лә рәнйетмәҫлек һәм кәмһетмәҫлек юлдар-яуаптар, һәр кешегә дәрт, ышаныс, илһам бирерлек алтын урталыҡты табырға.

Мөһим ҡарар ҡабул иткән ваҡытта мин ике шартты ныҡ тотам: беренсенән, үҙ-үҙем менән килешеүем, үҙемдең ышаныуым һәм теләүем кәрәк. Икенсе шарт: янымдағы коллегаларым менән кәңәшләшәм, уларҙың уй-фекерен ишетәм, үҙемдеке менән уртаҡлашам, әгәр аныҡ яуап табылмаһа, мәсьәләне ситкә ҡуйып торам, сабыр итәм. Минең быға ғына сыҙамлығым етә, бары тик дөрөҫ юл һәм фекер табылһын. Был характермы? Бәлки, ошо ла минең холҡомдоң төп сифатылыр...

Һәр хәлдә, етәксе булырға яҙғас, һинең үҙеңдең аҡыл һәм тәжрибә бизмәнең булырға, һәм ул бизмән һәр ваҡыт эшкә көйләнгән булырға тейеш. Һин ҡарар ҡабул итәһең, һин төп стратегия-эштең барышын билдәләйһең, һин эшеңдә бөтә халыҡ һәм ил тормошона ярашлы, синхронлы, алға алып бараһың. Ошо өс баҫҡыс бер-береһенә бәйле: кешеләр менән һөйләшеү, кәрәкле ҡағыҙҙар һәм фармандар менән нығытыу - былары иһә формаль шарттар.

Мин урынбаҫарым, бүлек етәкселәре менән даими һөйләшәм, беҙгә кәңәшсе булырҙай шәхестәргә мөрәжәғәт итәм, ғөмүмән, күп ваҡытымды кәңәшләшеү-әңгәмәләшеү менән үткәрәм, сөнки беҙҙән өлкәнерәк, күпте күргән һәм тормошто тәрән аңлаған кешеләр бар бит әле, улар менән аралашыу - үҙе бер мәктәп. Ә белем бер ҡасан да артыҡ булмай.

Өҙә һуға торған ҡоро ҡәтғилек, ҡырҡа холоҡ күрһәтеү менән эш бармай, миңә бер кешенең генә фекере менән сикләнмәйенсә, киреһенсә, күп фекерҙе белешеп, уртаға һалып һөйләшеү, хатта бәхәсләшеү, күмәкләп уйлашыу, бер-береңде тыңлау һәм ишетеү нығыраҡ оҡшай, һәм бындай эш алымы беҙҙең заманда ысынлап та ышаныслы, емешле, өмөтлө юл, тиер инем.

**Йыш ҡына ошондай һүҙҙәр яңғырай: "Беҙҙең республикала донъяны шаҡ ҡатырырлыҡ аҡыллы һәм талантлы кешеләр күп. Уларҙың хыялын, уйын, һәләтен илгә күрһәтмәү, йәшереү, юл ябыу - ҙур гонаһ. Сәхнәгә сығыу һәм халыҡты арбау көсө һирәктәргә бирелә, мәҙәниәт-сәнғәт етәкселеге уларҙы танырға, өҫкә ҡалҡытырға бурыслы". Был тәңгәлдә һеҙҙә ниндәй аныҡ фекерҙәр бар?**

- Килешәм, һәләтлелек - Аллаһынан бирелә, тормош һәм яҙмыш ул һәләтте башҡаларға күрһәтерлек һәм таратырлыҡ форсат-шарт тыуҙыра. Ысынлап та, һин сәхнәгә сыҡһаң, йәнең дә, күңелең дә күренә. Үтәнән-үтә күренә бар булмышың, ошо мәлдә тотороҡло кисерергә һәм үҙ-үҙең булып ҡалырға һәм аҙаҡ үҙ-үҙең булып сәхнәнән кире сыға белергә лә кәрәк. Бөйөк артистар халыҡ алдына сығыуы була, үҙенең энергияһы, күңел байлығы менән тотош һауаны тултыра, тамашасыны үҙенә ылыҡтыра, ышандыра, йөрәге менән асыла... Ошондай тәрән хиссиәт батшабикәһе, минең өсөн эталон булған башҡорт ҡатыны - бөйөк актриса Гөлли Мөбәрәкова. Ул сәхнәгә сығып баҫһа, бер һүҙ әйтмәһә лә, күңеленән бөркөлгән йылы һәм ҡеүәтле көс бөтә залға тарала, халыҡты ялмап ала ине.

Мин үҙемдә башҡорт кешеләренә генә хас булған сама һәм ихласлыҡ үлсәмдәрен һаҡларға тырышам. Беҙҙең башҡорт халҡына Хоҙайҙан һәм тәбиғәттән сама белеү тойғоһо бирелгән, ул яһалмалыҡты һәм бушҡыуыҡлыҡты ҡабул итмәй, ул ихлас йән сафлығы һәм тәбиғи һәләт менән һуғарылған тамашаны ғына аңлай һәм ярата. Арала әллә күпме күҙбуяуҙар йә үтә ялтырауыҡтар ҙа килеп сыға, әммә улар халыҡтың күҙен быуа алмай, ундайҙар үҙҙәренән-үҙҙәре янып көл була, тарих сүплегенә ҡойола бара.

**Әлбиттә, һеҙҙә диктатор һыҙаттары юҡ, ләкин республиканың мәҙәни картаһында һеҙҙең исем менән бәйле тамғалар ҡалыуы ла кәрәк бит әле. Эҙ ҡалдырырлыҡ ниндәй эштәрҙе алға алғанһығыҙ йәки башҡарып ятаһығыҙ?**

- Бөгөн башҡорт мәҙәниәтен һаҡлау - төп йүнәлештәрҙең береһе булып тора, тиһәк, һис тә хилаф булмаҫ, сөнки бөтә Рәсәйҙә милли мәҙәниәтте һәм туған телде яҡлау-һаҡлауға йөҙ борған яңы ҡараш йәйелә. Беҙҙең республикала яңы мәҙәни күренеш: рухи байлыҡтарыбыҙҙы патент менән раҫлау һәм нығытыу. Был парадокс, әммә заман талабы.

Был йәһәттән, мөһим ваҡиға: милли музыка ҡоралыбыҙ булған ҡурайға патент алыу. Дүрт йыл буйы юлланыҡ шул документты, меңәр йыллыҡ тарихыбыҙҙа ҡурай менән йәшәүебеҙҙе, ҡурай тотоп көрәшеүебеҙҙе, һаман да ҡурай уйнай-уйнай тарих арбаһында барыуыбыҙҙы бөтә яҡлап та иҫбатланыҡ.

Йәнә бер ҡот-бәрәкәтле эшебеҙ: башҡорт халыҡ йырҙарын барлау һәм һаҡлау ниәте менән дүрт йыл элек "Йөҙ башҡорт йыры" китабын баҫтырып сығарҙыҡ. Көй-мондарыбыҙҙы быуаттар буйы һаҡлаған һәм бөгөн дә яратып башҡарған милләттәштәребеҙ генә түгел, ата-бабаларыбыҙ рухы шатланыр, килер быуын балаларыбыҙға бер ғорурлыҡ һәм илһам сығанағы булыр ул баҫма.

Өсөнсөнән, һеҙгә һәм илгә һөйөнсөләп әйтәм: әле күптән түгел өр-яңы ҡарарға республика Башлығы ҡул ҡуйҙы, йәғни беҙҙә "Нематериальное культурное наследие Башкортостана" тигән яңы закон сыҡты (14 июль 2020 йыл). Маҡсаты һәм асылы шул: Башҡортостанда йәшәгән бөтә халыҡтарҙың милли байлыҡтарын туплап, бер реестр-теҙмә булдырыу һәм ҡануниәт ярҙамында уларҙы яҡлау, үҫтереү, өйрәнеү юлдарын табыу. Был ҡанун нигеҙендә һәр бер йыр-көй, бейеү, һәр йола, кейем, музыкаль инструмент, эш һәм донъя көтөү ҡоралдары, ауыҙ-тел ижады өлгөләре - барыһы ла реестрға беркетелә, уларҙы раҫлағанда бөтә тарихи сығанаҡтар, варианттар, фәнни эштәр һәм бөгөнгө бар-булмыштары иҫәпкә алына. Бигерәк тә башҡорт халҡының меңәр йыллыҡ рухи хазинаһын - йыр-мондарын башҡа яҡҡа тартҡылап йонсотҡан кешеләр өсөн дә иҫкәртеү булараҡ үҙ көсөнә инә был закон.

Академик сәнғәт буйынса ла уй-ниәттәребеҙ бик өмөтлө: беҙҙең Башҡорт опера һәм балет театры репертуарын башҡорт милли әҫәрҙәре менән тулыландырыу. Беҙҙең бөтә донъяла танылған опера йырсыларыбыҙ, балет бейеүселәребеҙ бар, тимәк, иҫ киткес тәрән фәлсәфәле һәм бай йөкмәткеле башҡорт легендаларын, иртәк-эпостарын академик сәхнәлә лә балҡытырлыҡ илһамлы көстәр етерлек.

**Башҡортостанда "Башҡорт милли кейемен тергеҙеү" акцияһы бара. Был мәҙәни күренеште һеҙҙең министрлыҡ нисек баһалай, нисек ярҙам итә?**

- Әйтергә кәрәк, милли кейемде тергеҙеү эшен башлаусы төп көс - "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы. Улар менән бергә Өфөлә милли кейем парадын өс мәртәбә ойоштороусы - беҙҙең министрлыҡтың Халыҡ ижады үҙәге менән Халыҡтар дуҫлығы йорто. Был халыҡсан йыйын - милли кейем парады хәҙер Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Учалы һәм башҡа яҡтарҙа район һабантуйҙарының сағыу бер өлөшөнә әйләнә. Баш ҡалала 2016 йылғы тәүге йыйын-парадта өс йөҙләп ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет ҡатнашһа, һуңғыһында, 2019 йылда, өс мең ярымдан ашыу кеше ҡала урамы буйлап үтте - Башҡорт академия драма театры янынан Салауат Юлаев исемендәге майҙанға хәтле бер саҡрым араны тултырып, бөтә халыҡты хайран ҡалдырып, бер нисә башҡорт ырыуы кейемдәрен күрһәтеп уҙҙы улар. Минеңсә, һәр кем үҙ милли кейемен кейеп йөрөргә хаҡлы. Өйөндә, ҡунаҡ ҡаршылағанда, байрамдарҙа бигерәк тә урынлы милли биҙәктәр: хөрмәт һәм байрам билдәһе, тыныс һәм бәхетле тормош күрһәткесе булып тора улар. Форумдарға, конференцияларға килгән оло ҡунаҡтарҙы милли кейем менән ҡаршылау ғына ла шундай тантана һәм илһам өҫтәй. Ҡыҙғаныс, әлегә республикабыҙҙа милли кейемдәр бөтөнләй етештерелмәй. Уны һәр кем һатып алырлыҡ кимәлдә тегеүҙе еңел сәнәғәт предприятиелары, шәхси тегенселәр булдыра алыр ине. Ололар араһында ла, балалар араһында ла быға ихтыяж бар. Балалар баҡсаһына йөрөгән кескәйҙәребеҙгә ритмика, физкультура дәрестәре өсөн махсус кейем менән бергә милли кейемде лә мотлаҡ әҙерләп бирергә ине. Минең ҡыҙым былтыр балалар баҡсаһындағы Яңы йыл кисәһенә, үҙе теләп-һорап, башҡорт кейемен тектерҙе. Шыршы уратып бейегән принцессалар, мушкетерҙар араһында беҙҙең милли күлдәк-камзул бик тә йәмле күренде, һәммә кешегә оҡшаны. Уны күреп, күптәр үҙ балаларына шулай уҡ милли күлдәк тектерергә дәртләнде.



# МИНИСТРЫ...

## бүләсәре ул

***Башҡорт милли кейемен тергеҙер өсөн башҡорт традицион кейемен бик-бик яҡшы белеү, ентекләп өйрәнеү, һәр биҙәкте-орнаментты бик уйлап ҡулланыу кәрәк. Әгәр беҙ "бөтә нәмә рөхсәт ителгән" тигән уй менән, батшаһыҙлыҡ, тимәк башһыҙлыҡ һәм бәйһеҙлек менән, күргәҙмәләрҙе шаҡы-шоҡо кейем һәм мәғәнәһеҙ биҙәүестәр менән тултырабыҙ икән, уларҙың файҙаһынан зыяны күберәк, бөтәһен бергә ут төртөп яндырғы килә башлаясаҡ. Шуға күрә, милли кейем тергеҙеүселәр был милли "ут" менән бик һаҡ эш итһендәр, белгестәрҙе, уҡытыусыларҙы, оҫталарҙы, ғалимдарҙы ишетһендәр ине. Бына әле милли кейемде тергеҙеү буйынса "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы ҙур эш башҡара, әлеге лә баяғы халыҡтың күңелендә, булмышында, тарихи хәтерендә булған төп нөсхәләге кейемде тергеҙә. Әлбиттә, уларға матди ярҙам, гранттар бүлеү мотлаҡ кәрәк.***

**(Дауамы 10-11-се биттәрҙә).**

*✓ Ҡыҙғаныс, әлегә республикабыҙҙа милли кейемдәр бөтөнләй етештерелмәй. Уны һәр кем һатып алырлыҡ кимәлдә тегеүҙе еңел сәнәғәт предприятиелары, шәхси тегенселәр булдыра алыр ине.*



# БЕҘҘЕҢ МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЫ...

## Әхмәтбаҡый хәҙрәт бүләсәре ул

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Бөгөнгө мәҙәни яңылыҡтар йәштәрҙә халыҡсанлыҡ тойғоһо уята аламы?**

- Әгәр ҙә яңы күренеш беҙҙең тарихыбыҙҙа, холоҡ-тәрбиәбеҙҙә һәм күңелебеҙҙә булған икән, уларҙы яңыртыу ҙа тәбиғи һәм уңышлы буласаҡ. Мәҫәлән, төрки халыҡтар тарихында булған "Ылаҡ" уйынын тергеҙҙек. Элек башҡорт циркын ойоштороуҙа ҡатнашҡан, уның төп артистарының береһе булған Миҙхәт Солтангәрәев ағайға мөрәжәғәт иттек, ул йәштәрҙе йыйып, уйынды бөтә яҡлап өйрәтте, ойоштorҙо, ошо фиҙакәр батырлығы өсөн оло рәхмәт яуһын уға. Егеттәребеҙ Ҡырғыҙстанға барып, "Бөтә донъя күсмә халыҡ уйындары фестивале"ндә ҡатнашты, уларҙы үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтты. Бөгөн һабантуйҙарҙа "Ылаҡ"сылар булмаһа, байрам төҫө етмәй ҡала. Халыҡ ифрат яратып, ҡабат-ҡабат һорап уйната. Тимәк, милли ярышуйындың сихри көсө әле лә ҡайтмаған, тик бер осҡон етә - хәтер уты дөрләп ҡабына.

**Шулай уҡ Башҡортостанда киң тарала барған "Мәргән уҡсы" йәмәғәт ойошмаһы да Мәҙәниәт министрлығы эшмәкәрлеге менән бәйлеме? Шулай уҡ "Евразия йөрәге" лә һеҙҙең башланғыс булды бит инде...**

- Әлбиттә, туранан-тура бәйле. "Мәргән уҡсылар" - мәҙәни-тарихи күренеш. Мәргән уҡсылар идеяһы миндә 2014 йылда тоҡанды - Мәскәүҙә Тыва республикаһының мәҙәниәт министры Алдар Тамдын менән таныштым, ул ВДНХ-ға барыуын, ундағы магазиндан уҡсылар кейемен алырға йыйыныуын әйтте. Тывала традицион уҡ атышыу ярыштары тергеҙелә, тине ул. Бөтә төрки халыҡтарҙа ла булған был ир-егеттәр оһолон беҙ ҙә тарихыбыҙ буйынса, бөтә ауыҙ-тел мираҫы, әкиәт һәм эпос батырҙары аша беләбеҙ: башҡорттар - иң мәргән уҡсылар, рус армияһы сафында Наполеон яуын ҡыуып, Парижға еткән "Төньяҡ амурҙары" булып тарихҡа ингән, ә Европа халҡы уларҙың уҡ-һаҙағы ҡеүәтен һәм оҫталығын әле лә онотмай. Мәскәүҙән ҡайтҡас та урынбаҫарым Ранис Алтынбаев менән уҡсыларҙы йыйҙыҡ. Егеттәр шундай ихлас тотондо. Бөтә республика буйлап таралды мәргән уҡсылар - йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар дәррәү ҡуҙғалды, тәүге турнирҙар үтте, Башҡортостан Башлығы гранты алып, һәр төбәктә ярыштар-дәрестәр ойошторалар. Ойошма етәксеһе Юлай Ғәлиуллин барыһына ла өлгөрә, уның ярҙамсылары, алмашсылары ла бик күп. Тимәк, халыҡсан уйын боронғо рухты уята һәм тәбиғи рәүештә мәҙәни тормошто байыта ала.

Һәм тағы. "Сердце Евразии" - "Евразия йөрәге" тип аталған яңы халыҡ-ара милли йыр-моң фестивале ике ҡитғаны тоташтырырлыҡ йәш тауыштарҙы һәм башҡарыусыларҙы Өфөгә - Урал тауҙарына, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы этнопаркка йыя. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: ғүмерендә бер мәртәбә концерт залына бармаған, милли музыканы ишетмәгән халыҡ бушлай, асыҡ һауала, тәбиғи амфитеатрҙа ярым космик донъяны тыңлай - төрлө халыҡ йырсыларын һәм музыканттарын күрә. Йәғни Евразия йөрәге изге халыҡ моңдары тантанаһына шаһит була, ғашиҡ була, таҙарына, ял итә... Бына нимә ул "Евразия йөрәге"!

Мотлаҡ булырға тейешле мәҙәни проект - "Оҙон көй", сөнки беҙҙәге кеүек йыр байлығы, бейеү төрлөлөгө бүтән бер халыҡта ла юҡ! Аяныс, бөгөн телеэкранда оҙон көй яңғырамай тиерлек. Мин тележурналист Гүзәл Хәмитованың "Алтын мираҫ" тапшырыуҙарын һоҡланып ҡарай торғайным - улар үҙе бер хазина, милли көй мәктәбе ине. Ошоно дауам итеп, тотош бер "Оҙон көй" телеканалы асырға кәрәк ине ул.

**Башҡорт миҫалиәте-мифологияһында халыҡтың аҡылфәлсәфәһе, донъяға ҡарашының үҙенсәлеге, тәрәнлеге сағыла, был образдар менән дә күп мәҙәни асыштар яһарға мөмкин. Сәсәндәр борондан мәҙәниәт министрлығы эшен атҡарған түгелме?**

- "Сәсәндәр мәктәбе"н 2014 йылда Сибайҙа, сәнғәт колледжында астыҡ, ул мәктәпкә йөрөгән ун биш баланың, исмаһам, бер-икеһе киләсәктә сәсән булараҡ эш алып барһа ла бик мәслихәт булыр ине, әммә улар фольклорсы, халыҡ ижадын яҡлаусы, таратыусы һәм ғалимдар буласаҡ. Бөгөн беҙҙә сәсәндәр түгел, ҡобайыр һөйләүселәр генә бар. Беҙгә ысын сәсәндәр, артабанғы хеҙмәт юлын башҡорт эпосын ныҡлап өйрәнеүгә бағышлаған ғалимдар, белгестәр тәрбиәләү фарыҙ.

Өфөлә ике тапҡыр, 2016 һәм 2018 йылдарҙа, Ҡобайырсы-сәсәндәрҙең бөтә Рәсәй асыҡ фестивале үтте. Башҡортостандың төрлө яғынан ҡырҡ-илле сәсән һүҙ оҫтаһы йыйылды, Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән, Ҡырғыҙстан, Дағстан, Ҡаҙағстан, Саханан бөтә донъяға танылған аҡын, сказитель, олонхосуттар менән бер сәхнәлә осрашты беҙҙең һүҙ оҫталары. Әммә шунысы ҡыҙғаныс: беҙҙә әле ошондай сығыштарҙы тыңларға өйрәнмәгән халыҡ. Мәҫәлән, күптән түгел Ҡырғыҙстанға барған "Арғымаҡ" этнотөркөм солисы Ринат Рамазанов менән йәш ҡырғыҙ аҡыны үҙ-ара шундай үткер һәм оҫта әйтеш әйтеп ташланы, барса кеше геү килеп ҡул сапты. Йәштәргә ошондай теремек аудитория, ҡыҙыҡлы башҡарыу оҫталығы, бөгөн донъяла бик популяр булған интерактив аралашыу ғәләмәт ныҡ оҡшай - тап шул саҡ сәсәнлектең үткерлеге, зирәклеге, бөтмәҫ энергетикаһы күренә бит! Бындай халыҡсан күренеш бер ҡасан да ялҡытмай һәм моданан да сыҡмаясаҡ. Бына шундай сәсәнлек мәктәбе булдырырға кәрәк беҙгә.

**Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ ижады үҙәге халыҡ һөнәрмәндәре эшмәкәрлеген үҫтереүҙе хәстәрләп, уларҙың күргәҙмәләрен ойоштороу менән генә түгел, һөнәр-кәсеп серен тергеҙеү, таратыу, өйрәтеү өсөн дә яуаплылыҡты тарта. Кейеҙ баҫыу, аҫалы балаҫ һуғыу, дебет шәл бәйләү, һандыҡ эшләү, эйәр-өпсөн яһау, көн әйберҙәр етештереү, бигерәк тә милли кейем тегеү - бөтә эш Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағында. Шуға ла беҙ һөнәрмәндәр етештергән уникаль әйберҙәрҙе һатыуҙарҙа түгел, күргәҙмәләрҙә генә күрәбеҙ...**

- Эйе, беҙҙең башҡорт халыҡ оҫталары башлыса үҙҙәре һәм күргәҙмәләр өсөн генә эшләй, алыпһатырлыҡ-сауҙа итеү нескәлектәрен бик һирәктәр белә. Ә бит халҡыбыҙ элек-электән шәл бәйләп йә һуғып, балаҫ һуғып, кейеҙ баҫып, тун-елән тегеп, алыш-биреш итеп йәшәгән. Халыҡ һөнәрмәндәре өсөн иркен сауҙа итеүгә һәм етештереү кәрәк-ярағына юл асылырға тейеш. Былтыр "Ладья" фестивалендә балаҡатайҙар ҡайылған ҡара күлдәк килтергәйне, күптәр һатып алырға теләк белдерҙе уны, тик ул күргәҙмә өсөн генә эшләнгән, һатылмай булып сыҡты. Улай булырға тейеш түгел.

Мәҫәлән, борондан һәр башҡорт ҡыҙының туй һандығы булған, ул бөгөн дә булырға тейеш. Оҫталар бар, һандыҡтар эшләнә. Никах туйында ла кәләш менән кейәү мотлаҡ милли кейемдә булһын ине.

Стилләштерелгән милли кейемдәр бар ул, үтә ситкә тайпылғандары ла етерлек, уларҙы айырым автор эштәре булараҡ ҡына ҡарап булалыр. Башҡорт милли кейемен тергеҙер өсөн башҡорт традицион кейемен бик-бик яҡшы белеү, ентекләп өйрәнеү, һәр биҙәкте-орнаментты бик уйлап ҡулланыу кәрәк. Әгәр беҙ "бөтә нәмә рөхсәт ителгән" тигән уй менән, батшаһыҙлыҡ, тимәк башһыҙлыҡ һәм бәйһеҙлек менән, күргәҙмәләрҙе шаҡы-шоҡо кейем һәм мәғәнәһеҙ биҙәүестәр менән тултырабыҙ икән, уларҙың файҙаһынан зыяны күберәк, бөтәһен бергә ут төртөп яндырғы килә башлаясаҡ. Шуға күрә, милли кейем тергеҙеүселәр был милли "ут" менән бик һаҡ эш итһендәр, белгестәрҙе, уҡытыусыларҙы, оҫталарҙы, ғалимдарҙы ишетһендәр ине. Бына әле милли кейемде тергеҙеү буйынса "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы ҙур эш башҡара, әлеге лә баяғы халыҡтың күңелендә, булмышында, тарихи хәтерендә булған төп нөсхәләге кейемде тергеҙә. Әлбиттә, уларға матди ярҙам, гранттар бүлеү мотлаҡ кәрәк. Ғөмүмән, беҙ аныҡ һөнәр-кәсепте тергеҙеүселәргә ярҙам итергә әҙер. Бөрйәндә сергетыш, Учалыла флүр яулыҡ менән сарыҡ, Ейәнсурала дебет шәл, Хәйбуллала һәм Бөрәлә һуҡма шәл, Дәүләкән менән Әлшәйҙә аҫалы балаҫ, Миәкәлә кейеҙ тирмә һ.б. Беҙ һәр бер оҫтаны күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ, һәр ваҡыт ярҙам итергә тырышабыҙ. Тик был тәңгәлдә ентекле эшләйһе эштәр бихисап әле.

> ***Әсәйемдең ҡартатаһы Әхмәтбаҡый хәҙрәт - әүлиә. Ул минең ҡарт ҡартатайым. Эйе, эйе, Ейәнсура районы Үрген ауылынан арҙаҡлы Әхмәтбаҡый мулланың бүләсәре булам мин. Уның илгә эшләгән яҡшылығын халыҡ белә һәм 1930 йылдарҙа сәйәси репрессияға дусар булғанын да иҫтән сығармайҙар, ул вафат булғас, күккә яҙылып ҡуйылған илаһи ауазды - "Әхмәтбаҡый хәҙрәт вафат булды" тигән яҙыуҙы ла кешеләр онотмай... Мин дә бөгөн шундай ҡарт ҡартатайымдың лайыҡлы бүләсәре булырға ынтылырға тейешмен. Киләсәктә ағинәй булырмын, тигән өмөт менән йәшәйем. Ағинәй булһам ине, тип хыял итәм хатта. Күп сифаттарҙы мин үҙемдә яңы асам, ҡанымда һәм аңымда булған донъяны мин бөгөн килеп табам, тимәк, мәле еткәндер...***

**Быуындар бәйләнешенә таянып яңы заманда йәшәү - Мәҙәниәт министрлығы өсөн шулай уҡ бик әһәмиәтле шарт булып тора. Быуындар бәйләнешенең үҙегеҙҙең тормошҡа ҡағылышы-сағылышы бармы?**

- Бар тигәс тә, ҡалайыраҡ әле! Әлбиттә, быуындар бәйләнеше минең һәр тынымда, һәр аҙымымда. Әйтәйек, минең үҙемдә Мәсетленән килгән монаят - өләсәйемдең һандығы бар. Ул өйөмдә тора. Уға хәҙер илле йыл, тиҙҙән ул антиквар буласаҡ. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың өләсәләренән ҡалған биҙәүестәренә һоҡланып ҡарайым, миндә, әлбиттә, ундай монаят юҡ. Әммә минең ҡыҙымда ул буласаҡ. Был да башҡорт йолаһын тергеҙеү.

Әсәйемдең ҡартатаһы Әхмәтбаҡый хәҙрәт - әүлиә. Ул минең ҡарт ҡартатайым. Эйе, эйе, Ейәнсура районы Үрген ауылынан арҙаҡлы Әхмәтбаҡый мулланың бүләсәре булам мин. Уның илгә эшләгән яҡшылығын халыҡ белә һәм 1930 йылдарҙа сәйәси репрессияға дусар булғанын да иҫтән сығармайҙар, ул вафат булғас, күккә яҙылып ҡуйылған илаһи ауазды - "Әхмәтбаҡый хәҙрәт вафат булды" тигән яҙыуҙы ла кешеләр онотмай... Мин дә бөгөн шундай ҡарт ҡартатайымдың лайыҡлы бүләсәре булырға ынтылырға тейешмен. Киләсәктә ағинәй булырмын, тигән өмөт менән йәшәйем. Ағинәй булһам ине, тип хыял итәм хатта. Күп сифаттарҙы мин үҙемдә яңы асам, ҡанымда һәм аңымда булған донъяны мин бөгөн килеп табам, тимәк, мәле еткәндер...

Бала саҡта атай-әсәйем менән бергә күп урындарҙа йәшәнек, Башҡортостандың төрлө һауаһын һулап, төрлө һыуын тәмләнек, шулар йөрәгемдә йылы тамырҙар йәйгән - мин үҙемде бөрйән, үҫәргән, дыуан, әйле ырыуы ҡыҙы тип хис итәм. Ҡайҙа барһам да Башҡорт илендә мин үҙ еремдә, шул бәхетле хистойғо миңә көс бирә. Бөтә ырыу кешеһен дә яратам, яҡын итәм, алға сығарам.

**Һеҙ мәҙәниәт тормошоноң тағы бер яғын - театрҙарҙы - башта уҡ телгә алдығыҙ. Бөгөн театр сәнғәтен үҫтерерлек йәш режиссерҙар, актерҙар уҡыймы, һеҙ уларҙы белем алырға ҡайҙа ебәрәһегеҙ?**

- Театр буйынса уҡытыу өсөн бөгөн мөмкинлек бар, Мәскәү вуздары көтә уларҙы. Ләкин уларҙа уҡый торған кеше тап ошо йүнәлеште һайлаған, яҙмышын һәм эшмәкәрлеген ошо эшкә бәйләргә риза, мөкиббән бирелгән булырға тейеш. Мәктәп эскәмйәһенән генә театр донъяһына инеп китеүселәр аҙаҡ йыш ҡына кире уйлай. Дирижер булырға теләгән кеше лә тап шул хеҙмәтте яратырға тейеш. Йәш белгестәр араһынан теләүселәр булһа, уҡырға ебәрәбеҙ. Беҙ актер Фирғәт Ғариповты режиссерлыҡҡа уҡыттыҡ. Наил Абдуллин, Антон Макаров дирижерлыҡҡа стажировка үтә. Киләһе йылда төп театрға яңы щепкинсылар төркөмө уҡып ҡайтасаҡ.

**Хаталарҙан ҡурҡаһығыҙмы?**

- Хаталаныу-яңылышыу тере кешегә генә хас, үлгәндәр быны булдыра алмай. "Хаталар булһын ул, тик төҙәтерлек булһын", тигән ти бер аҡыл эйәһе. Хаталаныуҙың бер сәбәбе - ҡабаланыу, шунан йәнә бер хата: күпте эҙләп, аҙҙан тороп ҡалыу. Мин ҡурҡҡан тағы бер "хата" - дилетантлыҡ, йәғни белер-белмәҫ көйө тотоноп, эштең асылын һәм төп маҡсатын таба алмау. Һәр тема, һәр аҙым бик ныҡ тәрәндән алып өйрәнеүҙе, ентекләп тикшереп башҡарыуҙы талап итә. Бигерәк тә мәҙәниәт эшендә. Беҙ

✓ *Ә Ғәбит сәсән бер һөйләй башлаһа, туҡтай алмай, онотолоп китә, көлгән ерҙә көлөп ебәрә, илаған ерҙә илай, хатта ҡайсаҡ урынында тороп сыҙашмай, ергә ултыра, аунай, йырлап-бейеп тә ала...*

бит тиҫтә йылдар, быуаттар өҫөн эшләйбеҙ. Кеше хәтеренә һәм йөрәгенә яҙылырлыҡ, ил тарихына һәм яҙмышына уйылырлыҡ эштәр эшләйбеҙ, тип уйлайым. Халыҡты алға алып барырлыҡ баҫҡыс булайыҡ, уны артҡа йә упҡынға тартмайыҡ.

**Кеше йәмғиәттә йәшәй, дәүләт эшендә эшләй, әммә ғаиләлә тормош тәмен тоя. Һеҙҙең өсөн ғаилә ҡиммәте ниҙә?**

- Ғаилә ҡиммәте, минеңсә, ағинәйҙәр аҡылында. Ағинәйлек беҙҙең күңелгә бик яҡын бит. Иң беренсе аҡ күңелле, изге ниәтле ҡатын үҙенең ғаиләһендә ағинәй була. Ағинәйе булмаған өйҙә ҡот юҡ. Ғаилә ҡиммәте, ғаилә ҡото уның хужаһы - йәғни атаһы - аҡһаҡалы булғанда ғына тулыһынса асыла. Аҡһаҡалы булмаған йортта бушлыҡ, һаҡ-ҡарауыл юҡ. Әйткәндәй, күп райондарҙа ағинәйҙәр ауыл ир-уҙамандарын алға сығара, улар артынан йөрөй, аҡһаҡал-уҙамандарҙы "Һөнәрмәндәр" хәрәкәте менән күтәрә. Бик тә дөрөҫ эшләйҙәр, улар ғаилә ҡиммәтенең ҡәҙерен белә, тип иҫәпләйем.

Мин эшемдә лә арҡаҙаштарым - йәш кадрҙар, белгестәр, етәкселәр менән ошо хаҡта йыш һөйләшәм. Күпте беләләр, аңлайҙар, республика мәнфәғәтендә эшләргә теләктәре ихлас. Мәҙәниәт министрлығында йөрәге янмаған осраҡлы кешегә урын юҡ. Минең эшкә бирелеп китеп, ғаиләмде оноторға ла хаҡым юҡ. Башта әйткәнемсә, бер туған апайым Әнисә исемле, минән дүрт йәшкә өлкән ул, һөнәре буйынса химик. Беҙҙең ғаилә ҡиммәте - ҡартатай-өләсәй, атай-әсәй, инәй-олатай. Һәм балалар, улар - тормош сәскәһе, мәғәнәһе. Беҙҙең ғаилә йырлай. Атайым да, әсәйем дә һаман да матур, асыҡ тауышлы. Атайым гармунда, әсәйем мандолинала, мин пианинола көйҙәр уйнап рәхәтләнәбеҙ. Атайыма - 84, әсәйемә 80 йәш. Әсәйем әле минең баламды ҡараша, бик теләп-бәпләп үҫтерешә. Туған тел дәрестәрен бирә. Ҡыҙым миңә "әсәй" тип өндәшә, башҡортса ла һөйләп ебәрә ҡайсаҡ. Ҡыҙым инглиз төркөмөнә йөрөгәйне балалар баҡсаһында, инглиз телен яҡшы белә, һөйләшә ала. Башҡортса һөйләшкәс, "һ", "ҙ", "ҫ" өндәрен бик асыҡ, акцентһыҙ әйтә. Шулай. Ғаиләм - ҡәлғәм, тиҙәрме әле? Һәр кемгә лә иң тәүҙә ғаилә бәхете кәрәк.

Ә эшемде яратып эшләйем, ҡайсаҡ "Әлдә эшемде яратам әле" тип эстән генә ҡыуанып ҡуям. Иҫән-имен торһон замандар, кинәнеп кенә эшләргә яҙһын һәммәбеҙгә. Тормош үҙгәрҙе бит. Коронавирус сәбәпле үҙизоляцияла кабинетта ултырып, йәмле яҙҙарҙы еткерҙек. Ниһайәт, июнь айында Абдразаковтар концерт ойошторҙо. Битлектәр кейеп булһа ла, күңел булғансы классик моңға сумдыҡ, тере һыу уртланыҡмы ни! Шунан һуң республика Башлығы мәҙәниәт эшмәкәрҙәрен тантаналы бүләкләне. Ифрат шәп осрашыу булды, барыһы ла ҡыуанды. Беҙ бит халыҡ араһында йөрөп, халыҡ менән аралашыуҙан йәм табып өйрәнгәнбеҙ. Татыу һәм ижади йәшәүҙең ҡәҙерен белерлек булдыҡ инде, тик донъялар имен торһон. Бөтә кешегә һаулыҡ, мөхәббәт, ғаилә бәхете, ижад бәхете теләйем.

**Сәрүәр СУРИНА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

**Арҙаҡлы эпосыбыҙ, халҡыбыҙҙың рухи байлығы "Урал батыр" эпосын яҙып алыуға быйыл 110 йыл тула. Тап ошо көндәрҙә, 1910 йылда, урағай уртаһында, йәғни халыҡ бесән сапҡан, ураҡ урған мәлдә, бер төркөм зыялы йәндәр ошо мәшһүр ауыҙ-тел ҡомартҡыһын яттан һөйләй һәм ҡағыҙ битенә төшөрә.**

# СӘСӘН ТАШЫ




Башҡорт иленең тарихын бер нигеҙгә туплаған, батырҙарын бер рухи тамырға тоташтырған ҡобайырҙарҙы башҡорт сәсәндәре борон-борондан ижад иткән. Ауыҙ-тел ижадының иң юғары өлгөһө булған ҡобайыр ижад итеү һәм һөйләү - бик абруйлы, мәртәбәле күренеш һанала. Нимә ул "ҡобайыр"? "Ҡоба" - "оло, бөйөк" тигәнде аңлата. "Ҡобайыр"- ололау, данлау, оло ваҡиғаларҙы бәйән итеү, уларҙың асылын аңлатҡан йыр-тарих. Донъя яралтылмыш дәүерҙән килгән иң тәрән һәм боронғо фәлсәфәне һәм миф-мәҫәлдәрҙе сағылдырған "Урал батыр" ҡобайырын бөгөнгө фән "эпос", тип билдәләй. Ә сәсәндәр мираҫында ул "ҡобайыр, иртәк, ҡарһүҙ" тип йөрөтөлгән.

Башҡорт халҡының күңел байлығын, рухи ынтылышын, илһөйәрлеген, батырлығын, фиҙакәрлеген, тормош фәлсәфәһен һәм киләсәккә тотор юлын сағылдыра ҡобайыр. Ошондай мөһим ауыҙ-тел ижады әҫәрен яҙып алыу - үҙе бер бәхет һәм ҡаһарманыҡ. Ҡобайырҙы яҙып алған шәкерт егеткә - Мөхәмәтша Буранғоловҡа ул осор ни бары егерме ике йәш була. Бөгөнгө Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылы янындағы "Хәмит утары" тип йөрөтөлгән тау биләнендә бынан йөҙ ҙа ун йыл әүәл - 1910 йылдың йәйендә, ураҡ мәлендә була был хәл. Тирә-яҡта бик абруйлы шәхес - ҡурайсы, сәсән, мировой судья Хәмит сәсән Әлмөхәмәтов йәшәй. Халыҡ араһында күп йөрөй. Уның кейәүе Ғәбит Арғынбаев Үрге Иҙрис ауылыныҡы була. Сәсәнһүҙ оҫтаһы, ҡурайсы Ғәбит Арғынбаев тынғыһыҙ, илгиҙәр кеше булараҡ, башҡа төбәктәге һүҙ оҫталары һәм фекерҙәштәре менән тығыҙ аралашып йәшәй. Хәҙерге Әбйәлил районы Балапан ауылында йәшәгән Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев менән аралаша, унан ҡобайыр һөйләргә өйрәнә, ошо яҡтан уны үҙенең остазы һанай. Сәсәндәр араһында үҙ-ара хөрмәт-ихтирам күрһәтеү йолаһы, һәр кемдең дәрәжәһен белеү-таныу бик ныҡ ҡуйылған була. Был яҡтарға килеп йөрөгән Мифтахетдин Аҡмулла менән осрашыуҙар, уның сая фекерле шиғырҙарын ишетеү, аңға һеңдереп өләң әйтеүен тыңлауҙар тиккә булмай. Ҡобайыр һөйләү башҡарыусынан рух ныҡлығын һәм хис-тойғо сафлығын талап итә.

Мөхәмәтша Буранғоловтың иҫтәлектәре буйынса, ул башта Ғәбит Арғынбаевҡа тура бара, әммә Ғәбит Арғынбаев уны ошо ергә, Хәмит сәсән утарына алып килә. Ләкин хужа кеше өйҙә булмай. Ул мир эштәре менән йөрөй. Һәм Ғәбит Арғынбаев уны көтөргә ҡуша, ҡайнағамдан уҙып ҡобайырҙы һөйләй башлай алмам, ти. Бер аҙна буйы улар Хәмит сәсәндең ҡайтыуын көтәләр...

Сәсәндәрҙең нисек алмашлап ҡобайыр һөйләүен үҙ күҙҙәре менән күргән кешеләр ошондай хәтирәләр ҡалдырған: "Хәмит сәсән һөйләрҙән алда оҙаҡ ҡына итеп ҡурай уйнап алыр ине. Оҙон, талғын көй менән тыңлаусыларҙы ла, үҙен дә тарихи йыр көйө аша ул оло ҡобайыр эсенә алып инеп китә торғайны. Ә Ғәбит сәсән бер һөйләй башлаһа, туҡтай алмай, онотолоп китә, көлгән ерҙә көлөп ебәрә, илаған ерҙә илай, хатта ҡайсаҡ урынында тороп сыҙашмай, ергә ултыра, аунай, йырлап-бейеп тә ала. Әгәр һөйләүенән бүлдерһәләр, ул киренән ыңғай дауам итә алмай, ҡобайырҙы яңынан башлап әйтер булған..."

Мөхәмәтша Буранғолов ике сәсән һөйләгәнде ҡағыҙға ғәрәп хәрефтәре менән яҙып барған. Яҙа торған ҡараһы бөтһә, уға ҡоромдан ҡара ҡайнатып биреп торғандар. Ҡоромло ҡараның аҙаҡ ҡойолоп бөтмәүен ҡайғыртып, уның кипкәнен көтәләр, ҡағыҙҙа яҙыу эҙе ҡалғанына ышанғас ҡына, эште артабан дауам итәләр. Бына шулай яйлап аҙнаға ашыу һөйләп яҙҙыра сәсәндәр. Ҡайһылыр ауылдағы байға ялланып ураҡ урырға йәки бесән сабырға барған кешеләр ҙа уларҙы уратып йыйылып тыңлап ултыра. Ҡыҙыҡһынып һорашыусылар була, ҡобайырҙы яҙып алғас, нишләтәһегеҙ, нимәгә кәрәк була, тиҙәр. Мөхәмәтша Буранғолов уларға асыҡ итеп былай ти: "Был сәсәндәр һаҡлаған ҡобайырҙар киләсе быуындарға бик кәрәкле хазина буласаҡ!"

Асыҡ аҡланда өс сәсән - Хәмит сәсән, Ғәбит сәсән, Мөхәмәтша Буранғолов сәсән үҙҙәре ултырып яҙған урынға метр ярымға яҡын оҙонса таш килтереп ҡуя. Яртыһына тиклем ергә күмелгән был таш - бөйөк ҡобайырҙы яҙып алыуҙың, уны ниһайәт ташҡа баҫыуҙың тарихи күренеш икәнен аңғарта. Ул таш оҙаҡ йылдар буйы шул ерҙә тора. Замандар алмашына, уға бер кем дә ҡағылмай, артыҡ телгә лә алмай, айырыуса яңы түрә-властарға таш тураһында әйтмәйҙәр. Ә халыҡ үҙе белә. Ваҡыты еткәс, рухи иркенлек асылғас, сәсәндәр тамғалап киткән таш эргәһенә яңы яҙыулы киң таш ҡуйыла. Был урын кәртәләп алына, йөрөй торған һуҡмағына килтерелгән ҡайраҡ таштар түшәлә. Ҡайраҡ таштар Брагин тауынан килтерелә. Был эштәрҙең барыһын да ауыл советы йә мәктәп түгел, Хәмит сәсәндең ейәнсәре (Килдейәр исемле улының ҡыҙы) Сәлимә апай Әлмөхәмәтова үҙ аҡсаһына ойоштора. Артабан уның эшен яҡын туғандары, ҡурайсылар Зыя Хәлилов, Моразым Хәлиловтар күтәреп ала. Сәлимә Килдейәр ҡыҙы ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләй, ул йәмәғәт эшендә лә салт ҡатнаша - Баймаҡ яғында тәүге ҡатын-ҡыҙҙар советы етәксеһе була. Ҡартатаһының исеме менән бәйле һәр эште ул башлап йөрөй. Сәсәндең исеме юғалмаһын, тип, Сәлимә апай үҙенең кесе улының улына, ейәненә Хәмит тип исем ҡуша. Был бала әлегә сабый ғына. Арҙаҡлы Хәмит сәсәндең тағы ла бер тыуаһы -Искәндәр Хәсәнов. Искәндәр атлы малай "Урал батыр"ҙан өҙөктәрҙе биш йәшендә үк һөйләй башлай, район конкурстарында ҡатнаша.

Сәсән ташы янында халыҡ электән аят уҡып китә торған булған, әле лә иҫтәлектәр һөйләрлек ауылдаштары иҫән. Шуларҙың береһе Икенсе Этҡол ауылы уҙаманы Сөнәғәт Шәрәфетдинов былай ти: "Хәмит сәсән бик иркен, демократ рухлы кеше була. Бер кемдән дә ҡурҡмаған. Ырымбурҙан килгән губернатор менән аралашҡан, үҙе лә уның янына барып йөрөгән, ил-йорт мәсьәләләрен хәл иткән. Рәсәй эсендәге хәл-торошҡа ҡағылышлы эштәрҙә лә ҡатнашҡан ул. Наполеонға ҡаршы Ватан һуғышына күтәрелгән халыҡ батырҙары хөрмәтенә 1912 йылда Ырымбурҙа ҙур бәйге, милли көрәш ярыштары үткән. Шунда Хәмит Әлмөхәмәтов та баһаман булып бара. Ҡаҙаҡ көрәшселәре бик уҙына башлағас, мировой судья үҙенең башҡорттарының рухын күтәрер өсөн, үҙе майҙанға сыға һәм еңеүсе була. Уның ошо фиҙаҡәрлеген күреп, башҡа көрәшселәр ҙә билбауҙарын тотоп көрәшкә сыға. Хәмит Әлмөхәмәтов халыҡ-ара низағ-бәхәстәрҙе лә оҫта сисә торған була: ҡарымта-барымта менән бер-береһен ҡаҡшатҡан болғауыр замандарҙа, ул ҡомһоҙ ҡаҙаҡтарҙы баҫымһаҡлатып ҡайтарып ебәрер аҡыл-хәйләләр ҙә тапҡан. Бындай көслө ихтыяр эйәһенең ҡобайыр әйтеүе айырыуса аһәңле һәм фәһемле булғандыр, әлбиттә.

Башҡорт халҡының күңел байлығын, рухи ынтылышын, илһөйәрлеген, батырлығын, фиҙаҡәрлеген, тормош фәлсәфәһен һәм киләсәккә тотор юлын сағылдыра ҡобайыр. Икенсе Этҡол ауылының ҡобайыр һуҡмағын ауылдың йырсылары, ҡурайсылары дауам итә...

Бөтә Башҡортостан сәнғәте, мәҙәниәте ҡаҙанышы булған, оло мираҫ булараҡ фәнни, сәнғәти, әҙәби, рухи асыштарҙың нигеҙендә ятҡан ҡобайыр ул "Урал батыр". Уның яҙып алынған урынын белеү, күркәмләү - халыҡ ижадына һәм яҙмышына ихтирам билдәһе. Баймаҡ районында Башҡортостан сәнғәте һәм мәҙәниәтенең алтын бағаналары - арҙаҡлы шәхестәребеҙ, йырҙар, ҡобайырҙар менән бәйле урындар күп. Уларҙы йәш быуынға һәм килгән халыҡҡа күрһәтерлек кимәлдә тәрбиәләү, бәҫен арттырыу, пропагандалау, хуплау мотлаҡ. Был баймаҡтарҙың ғына бурысы түгел, республика күләмендә яҡлау һәм матди даими ярҙам, ҡурсыу кәрәк.

**Кинйә МӘЗИТ.**

✔ Ҡытайҙа Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үсеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған.



ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮ МӘЛЕНДӘ...

## алтын алҡа таҡ

■ Алтын менән борондан дауаланғандар. Алтын һәм уның ҡушылмаларынан яһалған препараттар туберкулез, тирене, периферик нервы системаһын, күҙҙе һәм ҡайһы бер эске ағзаларҙы зарарлаусы проказа сирен, ҡыҙыл сөсә ауырыуын дауалай. Алтын, алтындың көмөш менән аҡ алтын ҡушылмаһынан биҙәүестәр тағыу истерия, депрессия, эпилепсиянан ярҙам итә, тип иҫәпләнә, сөнки кешене тынысландыра, кәйефен яҡшырта. Алтын шешеүгә, микробтарға, бактерияларға ҡаршы ҡулланыла, аллергия булдырмай. Шуға ла киҙеү эпидемияһы ваҡытында алтын биҙәүестәр тағырға кәңәш итәләр. Алтын шулай уҡ ҡан баҫымын түбәнәйтә, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үсеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Эксперимент 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың ата-әсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими тоҡандырып ҡуйылған булһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра. Психологтар әйтеүенсә, экранда барған ситуацияларҙағы геройҙарҙың тойғолары бары уйын ғына йәки артыҡ шаштырып ебәрелгән була.

■ Әле күптән түгел генә хроник арыу синдромын уйлап сығарылған буш хәбәр, тип иҫәпләй инеләр. Һуңғараҡ психик тайпылыш тип һананылар. Бөгөн ғалимдар был ауырыу - физиологик тайпылыш һәм ул өлкәндәрҙә генә түгел, балаларҙа ла осрай, ти. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 16 йәштәге үсмерҙәрҙең 2 проценты хроник арыу синдромы менән ярты йыл, тағы ла 3 проценты өс ай яфалана. Үсмерҙәр араһында малайҙарға ҡарағанда ҡыҙҙар был диагнозға дусар була. Тикшеренеүҙәрҙә 5 756 бала һәм үсмер ҡатнашҡан. Иң ҡурҡынысы, тип иҫәпләй ғалимдар, үҙенең проблемаһы менән белгескә мөрәжәғәт итеүселәр һаны бик аҙ.

ҺАБАҠТАР

# БЕР НӘМӘ ЛӘ ОСРАҠЛЫ БУЛМАЙ



**Тормошобоҙ төрлө ваҡиғаларҙан тора. Эштә лә, ғаиләлә лә, урамда ла беҙҙе көн һайын ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр, хәлдәр көтә, яңы кешеләр осрай. Уларҙың ҡайһы берҙәрен беҙ иғтибарға ла алмайбыҙ. Айырыуса яҡшы күренештәрҙе шулай булырға тейеш кеүек кенә ҡабул итәбеҙ. Ниндәй ҙә булһа күңелһеҙлеккә осраһаҡ ҡына йәки уйлағаныбыҙ алдыбыҙға килмәһә, дөрөҫөрәге, үҙебеҙ теләгәнсә булмаһа, бер аҙ уйланабыҙ, ғәйепләләрҙе эҙләйбеҙ.**

Мәҫәлән, юлыбыҙ уңмаһа, юлға сыҡҡанда беренсе булып кем осрағанын иҫкә төшөрөргә маташабыҙ. Берәй ҡапма-ҡаршылыҡҡа осраһаҡ, күргән төштө хәтерләйбеҙ. Шунан үҙебеҙ өсөн юллыҡһыҙ, төшлөкһөҙ кешеләрҙе уйлап табабыҙ. Әммә теге йәки был һынауҙы үтергә тейешлегебеҙ хаҡында уйланмайбыҙ. Ныҡлабыраҡ уйланһаң ғына беҙҙе уратып алған хәл-ваҡиғаларҙың бөтәһендә лә тиерлек ниндәй ҙә булһа мәғәнә һәм бәйләнеш барлығын тояһың.

Кешеләр менән осрашыу, танышыу ҙа осраҡлы түгел. Ниндәйҙер көс тарафынанмы, әллә Аллаһу Тәғәлә әшкәртәме, бер-береһенә кәрәкле, мохтаж булғанға кеше кеше менән осраша. Миҫалға күптән түгел үҙем менән булған хәлде килтермәксемен. Үҙәк урамдарҙың береһендә яҡут ҡашлы һыу тамсыһына оҡшаған һыңар алҡа табып алдым. Шунда уҡ ломбардҡа тапшырырға уйлағайным, сумкала паспорт булмай сыҡты. Быны иртәгәгә ҡалдырып, ҡайтып киттем. Ауылдан килгән ҡустәнәстәр менән сәй эсергә генә ултырғайным, телефон шылтыраны. Алһам - эш буйынса таныш икән. Йомошон әйтеп тә өлгөрмәне, мин уны сәйгә саҡырҙым - ҡумәкләп ашаһаң, ҡустәнәс тағы ла тәмлерәк була бит.

Быға тиклем аралашыуыбыҙ рәсми генә булһа ла, танышым баш тартманы. Һөйләшә-һөйләшә сәй эстек, йомош та йомошланды. Шулай, әңгәмәләшеп ултыра торғас: "Минең бөгөн бик күңелһеҙ көнөм - яратҡан алҡамды юғалттым", - тип әйтеүе булды, мин бер-бер артлы: "Алтынмы, ҡашы яҡутмы, тамсыға оҡшағанмы?" - тигән һорауҙарымды яуҙыра ла башланым. Береһенә яуап алып өлгөрмәйем, икенсеһен, өсөнсөһөн бирәм. Бөтәһенә лә яуап биреүенә алҡа уның ҡулында ине инде. Был хәлгә уның да, минең дә ғәжәпләнеүебеҙҙең сиге булманы. Бына бит, бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына! Көнө буйына буләкалҡаны төшөрөп ҡалдырыуына ҡайғырып йөрөгән булған, ә бында уны табырға осраҡ ярҙам итте.

Бер нәмә лә осраҡлы булмай, тигәнгә шулай тағы бер тапҡыр инандым. Һәр ваҡиға-күренеште, шулай уҡ проблемаларҙы, һынауҙарҙы иҫкәрмә кеүек, беҙгә дөрөҫ юл күрһәткән, хаталарҙан һаҡлаған тәбиғәт законы итеп ҡабул итергә өйрәнергә генә кәрәк беҙгә. Шул ваҡытта тормошҡа ла икенсерәк ҡарарбыҙ, сәбәләнмәҫбеҙ, күңелебеҙ тынысыраҡ булыр. Шулай иткәндә, яҡын кешеләребеҙ ҙә беҙҙең эргәлә үҙен бәхетлерәк тойор.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

# ЙӘШЛЕК НИСЕК ТӘ ҮТӘ,

## ҡартлыҡта бәхет кәрәк



Автобуста ҡаршыма йәш ҡыҙ ултырҙы. Уның йөҙө шундай таныш кеүек тойолдо. Һормәле ҡуңыр күҙҙәр, оҙон ҡуйы керпектәр, моңһоу ҡараш... Эйе, бына тап ошо ҡарашы бынан егерме йыл элек булған ваҡиғаны иҫкә төшөрҙө һәм, был ҡыҙҙы беренсегә күрһәм дә, уның кем икәнәнә, дөрөҫөрәге, уның кем ҡыҙы булыуына шигем ҡалманы.

Уның әсәһе менән йыш ҡына балалар майҙансығында осраша инек. Ҡыҙым менән бер тиҫтер улын уйнарға алып сыға ине ул. Бер аҙҙан уның ауырлы икәнлеге беленде. Әммә ул был хаҡта ауыҙ асып һүҙ әйтмәне. Биле апаруҡ йыуанайғанда ла йәшерергә тырышты. Тыуырға ваҡыт еткәс кенә, эс сере менән бүлеште ул. Һуңға тиклем балаһын төшөртөргә тигән уй менән йөрөгән булған икән.

Ҡатын тәүҙә ысынлап та йөккә уҙыуын белмәгән. Беленгәс иһә, врачтар аборт эшләргә ярамағанлығын әйткән. Тыуасаҡ балаһын дауаханала ҡалдырып китергә ниәтләүенең сәбәбе иренең икенсе бала теләмәүендә икән. Быға тиклем егетенән алданған ҡыҙҙар йәки кейәүҙә булмаған ҡатындарҙың ғына сабыйын бала табыу йортонда ҡалдырыуын ишеткәнем бар ине. Әммә ирле ҡатындарҙың шундай ҡарарға килеүе тураһында беренсе тапҡыр ишеткәнгә, улай ғына ла түгел, ул кешене үҙем күреп белеүем мине төрлө уйҙарға этәрҙе. Бындай ваҡытта башҡа йүнле уй киләме ни, йәшмен дә, тормош тәжрибәм дә аҙыраҡ. Иң беренсе, әлбиттә, ҡатын иренә хыянат иткәндер ҙә, ауырға ҡалғандыр, ире үҙен ғәфү иткән, тик балаһынан баш тартҡан, тип уйланым. Әммә эш мин уйлағандың төптә киреһе булып сыҡты.

Тәү ҡарамаҡҡа татыу ғына булып күренгән ғаилә тәүҙән уҡ серек нигеҙгә ҡоролған. Матур хыялдар менән уҙаллы тормошҡа баҫҡан ҡыҙҙы егет көслөк менән алған. Бөгөнгө заманда көслән кейәүгә сығыу йәки биреү бармы ни, тиһегеҙме. Бар икән шул... Мәсхәрәләнгән ҡыҙҙың атай-әсәһе суд менән ҡурҡытып, егетте өйләндереүгә ирешә.

Тик кейәүгә сығыу тигәне шунан ғына ғибәрәт була: иргә ашарға әҙерләү, кейемен йыуыу, кистән артығыраҡ "ҡырын тейәһә", иртәнсәк бала һымаҡ тәрбиәләү. Сабый тыуһа үҙгәрер, беҙ ҙә кешесә йәшәп китербеҙ, тип, киләсәккә яҡты өмөт менән бағып, бик яңылыша йәш ҡатын. Ире, бала тауышын яратмайым тип, эштән һуң тура ҡайтмай башлай. Шулай йөрөгәнендә икенсе ҡатындың унан ауырға ҡалыуын ишетһә лә, танышым ҙур сабырлыҡ менән үткәреп ебәрә. Ә инде үҙенең йөккә уҙыуын әйткәс, ире: "Баланды алып ҡайтһаң, урамға ҡыуып сығарам", - тип ҡурҡыта.

Ул ваҡытта дөйөм ятаҡтың ике урынлы бүлмәһендә йәшәй ине улар. Бер ғәйбәттең ғүмере - икенсеһе сыҡҡансы, тигән кеүек, көсләнеүе, һуңынан ауырға ҡалыуы тураһында хәбәрҙәр 4-5 йыл үткәс кенә тынып ҡалыуын, хәҙер икенсе бала күтәреп, атай-әсәй йортона ҡайтһа, тағы яман һүҙгә ҡалыуын күҙ алдына килтереп, йәш ҡатын сабыйын ҡалдырырға ҡарар иткән булған.

Был бисҭәнән күсеп китеү сәбәпле, аҙаҡ был ҡатындың яҙмышы тураһында белмәгәйнем. Уртаҡ таныштарҙан уның иренән айырылып, ситкә сығып китеүен ишеткәйнем.

Бына уның ҡыҙы алдымда ултыра. Нисек һүҙ башларға белмәй ултырғансы, төшөргә лә ваҡыт етте. Бәхеткә күрә, ул да ҡуҙғалды. Урамға сыҡҡас, уның әсәһе ниндәй хәлдә булыуын һораным. Ҡыҙ итәғәтле генә йылмайҙы ла, бөтәһе лә яҡшы булыуын хәбәр итте. Башҡортса аңлай, әммә һөйләшә белмәүенән уның шунда уҡ сит мөхиттә үҫкәнен аңланым. Был торошонан, әлбиттә, ул ғәфү үтенде. Ҡыҙ Норильскиҙа тыуған, әле лә шунда йәшәйҙәр икән.

- Әле бына атайҙы ерләшергә ҡайттым да бер ыңғайҙан туғандарҙы барлап йөрөйөм, - тине ул. - Иҫән сағында бер тапҡыр ҙа күрергә насип булмағайны, әле бына һуңғы юлға оҙаттым. Бик бәхетһеҙ кеше булған атайым, аяҡтан ҡалғас, һуңғы йылдарҙа көндәлек алып барған. Уның һәр битендә тиерлек әсәйемдән ғәфү үтенгән. Бер ғәйепһеҙгә саф күңелле кешене рәнйетеүе өсөн ебәрелгән язаларҙың бөтәһен дә күреп китеүен яҙған ул.

Ҡыҙ атаһы хаҡында тағы нимәләр әйткәндер, башҡа бер нәмә лә ишетмәнем дә, тыңламаным да, сөнки һәр яуызлыҡ өсөн кеше иртәме-һуңмы ғазапланыуын белер йәштәмен хәҙер. Уның ҡарауы, ҡыҙҙың матурлығына, аҡыллы, тәүфиҡлылығына һоҡланып киндем. "Баламды барыбер дауаханала ҡалдырасаҡмын", - тигән ҡәтғи ҡарарға килгәндә кире уйларға мәжбүр иткән кешегә рәхмәт уҡыйҙыр инде әсәһе.

Мин дә йәш саҡтағы танышым өсөн ҡыуаныс кисереп, был осрашыуҙан йылы тойғолар алдым һәм был ваҡиғаның күптән түгел генә ишеткән "Йәшлек нисек тә үтә, ҡартлыҡта бәхет кәрәк" тигән әйтемгә миҫал булыуын аңланым.

**Лена БАРЫЕВА.**

✓ ***Баш тартыу - ул еңелеү түгел. Еңелеү менән уңыш араһында бәләкәй генә бер аҙым, һәм тик тәүәккәллегебеҙ генә меңдән бер өлөш дюймдай ғына сик буйынса үтергә ярҙам итәсәк.***



*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

# БАЛАЛАРҒА...

## был яман ғәҙәт йоҡмаһын

**Эскелектең һаулыҡҡа, иҡтисадҡа, йәмғиәт һәм ғаилә именлегенә, тыуасаҡ балалар сәләмәтлегенә ҙур зыян килтереүен һәр беребеҙ белә. Белә, әммә унан баш тартырға теләүселәр генә аҙ.**

Эскән кеше һәр ваҡыт үҙенә аҡлау таба. Берәүҙәр ҡунаҡта ғына эсеүен әйтә. Икенселәр ауырыуға, өсөнсөләр проблемаларына һылтана. Йәнәһе лә, аҙыраҡ эсһән, онотолаһың, хәл еңеләйә һәм башҡалар. Байрамда ғына эсә лә, иҫергәнсе ҡырын тейәмәһә лә, эскән кешеләрҙең барыһы ла хәүеф төркөмөндә. Эш бит алкоголикка әйләнеүҙә генә түгел. Ә иҫерткес эсемлектең зыянында. Бер тапҡыр эсеп тә әллә ниндәй фажиғәләргә сәбәпсе булыуың ихтимал.

Күңел төшөнкөлөгөнән, стрестан ҡасыу маҡсатында ҡулына шешә алғандар янында йәшәгәндәргә түҙемлек бирһен. "Миңә ҡыйын. Эсергә хаҡым бар", - тигән кешегә нисек ҡаршы торһаһын? Депрессияла булған бәндә өсөн үҙе һәм уның ғазабы ғына бар, сөнки ул - эгоист. Ул фәҡәт үҙен һәм проблемаһын ғына уйлай. Уның өсөн башҡалар юҡ. Үҙенең эсеүе менән эргә-тирәһендәгеләргә ниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырыуы хаҡында уйламай. Ул булған аҡсаһын эсеп бөтөргә, булмаһа, йорттан алып сығып һатырға, урларға мөмкин. Баш төҙәтергә тапмаһа, яҡындарын рәнйетә, ҡул күтәрә, туҡмай. Алкоголизм - ул ауырыу, әммә үҙең теләп алған сир. Унан дауаланыу ифрат ауыр, әгәр эскесе үҙе теләмәһә, яҡшы һөҙөмтәне көтөргә лә түгел.



Эскән кеше күберәк тормош ауырлығына зарлана. Йәнәһе лә, эшендә етәксе ҡыҫҡыра, эш юғалтыуҙан ҡурҡа, өйҙә ҡатын - тун, балалар айфон һорай. Етеш йәшәгәндәр - яратҡыһы, яратылғыһы, осто осҡа ялғап йәшәгәндәр матур кейенгеһе, хыялдарын тормошҡа ашырғыһы килә... Берәүҙәр күршеһе менән ярыша, икенселәр туғанынан көнләшә. Ҡыҫҡаһы, эсергә сәбәбен таба ундайҙар. Тормош ауырлығына зарланғандарға шуны еткергем килә: ҡасан еңел булған һуң? Аслыҡ-яланғаслыҡты, яу афәтен күргән өләсәй-олатайҙарың, әллә һуғыштан һуң ауыр йылдарҙа буй еткергән әсәй-атайың яҡшы йәшәгәнме? Был һорауға эскесе, әлбиттә, "Минә генә ҡыйын", тип яуаплаясаҡ. Шуны иҫбат итер өсөн мең һылтау табасаҡ.

Шулай ҙа эскелеккә ҡаршы алып барған эш үҙ һөҙөмтәһен бирмәй ҡалманы. Айыҡ туйҙар, байрамдар үткәрелә. Йәйләп ҡына сәләмәт тормош модаға инә башланы. Шулай ҙа табын артында, эсмәйем, тип ҡулына рюмка алмағандарға сәйерһенеп ҡарағандар ҙа бар әле һаман. Минең үҙемдең иптәшем эсмәй ҙа, тартмай ҙа. Шуны белһә лә, бергә эшләгән хеҙмәттәштәре уға әле лә гәжәпләнеп ҡарай. Хәмер ҙә, тәмәке лә ғаилә бюджетын, кеҫәне таҡырайтыусы ғына түгел, ә һаулыҡҡа ныҡ зыян килтереүсе зарарлы ғәҙәт тә. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, шуны әйтергә теләйем: йәш быуын, балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ уға бирелмәһен өсөн бөгөн ҙур тәрбиә эшен башларға кәрәк. Мәктәптә түгел, ә балалар баҡсаһында уҡ кескәйҙәр араҡы һәм тәмәкенең йәмғиәткә, иҡтисадҡа, сәләмәтлеккә, матурлыҡҡа килтергән зыяны хаҡында белергә тейеш. Бала саҡта һалынған онотолмай бит ул. Уларҙың күңеленә орлоҡ һалып ҡуйыу кәрәк...

**Гөлшат ХАЖИЕВА.**

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# АУЫРЫУЫҢ СӘБӘБЕН...

## күңел торошондан эҙлә



**Кеше организмында бөтә нәмә бер-береһе менән бәйле. Хатта уйыбыҙ ҙа, кисерештәребеҙ ҙә теге йәки был ағзаның эшмәкәрлегенә йоғонто яһай.**

**Баш ауыртыуы** даими стресс һәм етди көсөргәнеш кисереүгә бәйле. Унан ҡотолоу өсөн медитация эшләгеҙ, йога менән шөғөлләнегеҙ. Эмоциональ хәл-торошоғоҙҙо контролдә тотоғоҙ.

**Муйын һыҙлауы** үҙен ғәфү итә алмағандарҙа йыш осрай. Унан ҡотолоу өсөн ғәйеп тойғоһонан, выждан ғазабынан азат булырға кәрәк. Тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәнегеҙ. Үҙегеҙҙе лә, һеҙҙе рәнйеткәндәрҙе лә кисерегеҙ.

**Яурын ауыртыуҙың сәбәбе** бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөгөҙгә алыуға бәйле булыуы ихтимал. Шуға күрә бурыстарҙы яҡындарығыҙ менән бүлешеп үтергә кәңәш ителә.

**Арҡаның өҫкө яғы һыҙлаһа**, мөхәббәт өлкәһендәге мөнәсәбәт хаҡында уйланығыҙ. Яратҡан кешегеҙ менән энергия алмашыу процесын көйләү мөһим. Һөйөү хисен бер кимәлдә бирергә һәм алырға өйрәнегеҙ.

**Арҡаның аҫҡы өлөшө** финанс мәсьәләһе өсөн яуаплы. Әгәр матди хәлегеҙ менән ҡәнәғәт булмаһағыҙ, билегеҙ ауыртҡанына ғәжәпләнмәгеҙ. Матди килем тураһында көн-төн уйлаған йәки күп тотонған кешеләрҙә йыш осрай был сир. Унан ҡотолоу өсөн аҡса менән мөнәсәбәтте көйләгеҙ.

**Терһәк ауыртыуы** - эргә-тирәләгеләргә ҡаты мөғәмәләлә булған кешеләрҙең сире. Йомшағыраҡ булһағыҙ, ул ауыртыуҙан туҡтаясаҡ.

**Ҡул һыҙлауы** күп йәки, киреһенсә, аҙ аралашҡан бәндәләрҙә күберәк барлыҡҡа килә. Бөтә нәмә сама менән булырға тейеш.

**Янбаш һыҙлауынан** ҡотолорға теләһәгеҙ, үҙгәрештәрҙән ҡурҡмағыҙ. Алда көткән ваҡиғаларҙы ҡабул итергә әҙер булығыҙ. Һәр яңы нәмәгә асыҡ булыу физик һәм психик һаулыҡ нигеҙе икәнен онотмағыҙ.

**Тубыҡ ауыртыуы** үҙен түбән йәки юғары баһалаған кешеләрҙә йышыраҡ осраҡ. Үҙенә юмор менән ҡарағандарҙы был сир борсомай.

**Балтыр** - ул үпкә һәм көнсөллөк тойғоһо йыйылған урын. Ошо кире хистәрҙән арынһағыҙ, балтыр мускулдары ла ауыртыуҙан туҡтар.

**Бәкәл йәки шайтан ашығы тирәһе борсоһа**, ял итә, күңел аса, тормошҡа ҡыуана белмәүегеҙ тураһында һөйләй. Бәләкәй генә нәмәгә лә ҡыуанырға өйрәнергә кәңәш ителә.

**Табан ауыртһа**, кире уйҙарығыҙҙан ҡотолоғоҙ. Тормошоғоҙҙағы яҡшы ваҡиғаларҙың ҡәҙерен белегеҙ, күберәк шулар хаҡында уйлағыҙ.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ҠАРАҒАТТЫҢ ФАЙҘАҺЫН БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

**Ҡарағат япрағы** быуын һәм бөйөр ауырыуҙарынан яҡшы дауа. С, К, Р витаминдары - атеросклерозды иҫкәртеүҙә уникаль сара. Аддисон сире булғанда бөйөр өҫтө биҙе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫир итә. Дөрөҫ дозала эшләнгән ҡарағат япрағынан төнәтмә ревматизм һәм подагра менән ауырығанда бәүел һәм ҡуҙғалаҡ кислотаһын сығарырға ярҙам итә.

**Бөйөр ауыртҡанда** 0,5 литр ҡайнар һыуға 3 ҡалаҡ ҡара ҡарағат япрағын һалып, 15-20 минуттан һөҙөгөҙ ҙә, 2 ҡалаҡ ҡарағат емешен өҫтәп ҡайнатып сығарығыҙ. Көнө буйына яртышар стаканлап эсегеҙ, емешен ашағыҙ. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләгеҙ. Дауалау курсы - 1 ай. Бөйөрөгөҙҙө генә түгел, тотош организмығыҙҙы дауаларһығыҙ.

**Невралгияны** 4 ҡалаҡ кипкән ҡарағат япрағын, ваҡланған 1,5 лимон тышын һәм 3 аш ҡалағы мелиссаны 500 мл ҡайнар һыуҙа бешереп яһалған төнәтмә менән дауаларға мөмкин. Был эсемлекте 6 сәғәт ултырғандан һуң һөҙөп, ашар алдынан 100 мл эсегеҙ.

**Ревматизм һәм подаграны** дауалау өсөн 10-12 бөртөк япраҡҡа 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, һыуынғас, көнөнә 4-6 тапҡыр яртышар стаканлап эсегеҙ.

**Аддисон сире** булғанда бөйөр өҫтө биҙе эшмәкәрлеген көйләү өсөн 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡарағат ботағына, япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Һыуынғас, көн дауамында ашағандан һуң 30-40 минут үткәс, 5-6 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшөн эсегеҙ.

**Лимфотөйөндәр туберкулезын** түбәндәге ысул менән дауалағыҙ: 3 ҡалаҡ ваҡланған ҡарағат япрағын 0,5 литр ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтегеҙ, һөҙөгөҙ. Уны көнөнә 4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшөн эсегеҙ. Дауалау курсын оҙайлы ваҡыт ҡулланырға мөмкин.

**Ҡолаҡ шаулауынан** да ҡотолорға була. Бер тигеҙ өлөштә ваҡланған ҡарағат япрағы, сирень һәм ҡара мөрүәр (бузина) сәскәһе йәки япрағынан эшләнгән ҡатнашманы алығыҙ. 2 ҡалаҡ япраҡты 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтмәне һауытығыҙҙы ябып, 20 минут тирәһе һыулы кәстрүлдә болғата-болғата ҡайнатығыҙ. Уттан алғас, 10 минуттан һуң һөҙөгөҙ. Һауыҡҡансы көн һайын өс тапҡыр ашарға 15-20 минут ҡалғас, 70 мл эсегеҙ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 34-се идея
## Еңеү менән еңелеү араһында

Микрометр күргәнең барҙыр, моғайын. Был бик ябай бәләкәй генә ҡорал өсөн үтә яңғырауыҡлы атама, әлбиттә. Микрометр - меңдән бер дюймға тиклем аныҡлыҡ менән бик бәләкәй аралыҡтарҙы үлсәй торған прибор. Мин тәүге тапҡыр микрометрҙы күргәс: "Шул тиклем генә араны үлсәү кемгә кәрәк икән?" тип аптыраным. Ләкин һуңынан бер бинаның емерелеүе һөҙөмтәһендә бик күп кешеләр һәләк булыуы, ә унан килгән зыян йөҙәр меңләгән доллар менән иҫәпләнеүе хаҡында уҡыным. Фажиғәне тикшереү уның иҫәп-хисапта дюймдың меңдән бер өлөшөн тәшкил иткән хата ебәреү арҡаһында килеп сығыуын асыҡлаған.

Бинаның рәшәткәле тимер каркасы, арҡыры әрләктәрен етерлек һыҡтырмайынса һәм киңәйтмәйенсә, урынлаштырылған булған. Температура үҙгәреү һәм дюймдың меңдән бер өлөшө ҙурлығында хата ебәреү һөҙөмтәһендә тимер рәшәткәләрҙең бер-береһе сатнап, бина емерелеп төшкән һәм бик күп кешеләр һәләк булған.

Тороҡлоҡ менән һәләкәт араһында шундай тар сик, саҡ ҡына ара! Уйлап ҡарағыҙ әле, был бит беҙҙең үҙ тормошобоҙға шул тиклем оҡшаған. Еңеү менән еңелеүҙе ҡайһы берҙә бик тар ғына сик айыра.

Беҙ барыбыҙ ҙа, үҙ маҡсатына өлгәшергә ынтылып, йылдар буйы тырышып эшләгән, ә маҡсат күренгәс кенә ышанысын, өмөтөн, көсөн юғалтып, туҡтап ҡалған кешеләр тураһында ишетеп беләбеҙ.

Баш тартыу - ул еңелеү түгел. Еңелеү менән уңыш араһында бәләкәй генә бер аҙым, һәм тик тәүәккәллегебеҙ генә меңдән бер өлөш дюймдай ғына сик буйынса үтергә ярҙам итәсәк. Тағы бер талпыныу - һәм тойолған еңелеү ысын уңышҡа әйләнәсәк.

Әйе, дуҫтарым, микрометр дюймдың меңдән бер өлөшөләй аралыҡты ғына үлсәй. Бәлки, ошо мәлдә һин үҙеңдең бөйөк уңышыңдан меңдән бер өлөш дюймдай, микросекундтай ғына айыралтаһыңдыр. Бары тик тағы ла бер ынтылып ҡарарға кәрәктер.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 17 АВГУСТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.25 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
1.20 Д/ф "Ген высоты, или Как пройти на Эверест". К 175-летию Русского географического общества. [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.25 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Лабиринты". [12+]
1.40 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 ло 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Соседи". [12+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00 "Лестница в небо". [12+]**
**18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.00 "Бай баҡса". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 18 АВГУСТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.55, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.25 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
1.15 Д/ф "Ген высоты, или Как пройти на Эверест". К 175-летию Русского географического общества. [16+]
2.10 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.25 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Лабиринты". [12+]
1.40 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [6+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Вспомни меня". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.30 Спектакль "Любовница". [12+]**
**2.45 Спектакль "Башмачки". [12+]**
**5.00 Спортивная история. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 19 АВГУСТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.10 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.25 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
1.20 Д/ф "Ген высоты, или Как пройти на Эверест". К 175-летию Русского географического общества. [16+]
2.25, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.25 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Лабиринты". [12+]
1.40 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**14.55 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Кубок чемпионов в Казани.**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Вспомни меня". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Незваный гость". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Выходили бабки замуж". [12+]**
**4.15 "ВасСәләм!" [16+]**
**4.45 "Пофутболим?" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 20 АВГУСТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.45, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.25 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
1.20 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
2.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.25 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Лабиринты". [12+]
1.40 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**14.55 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - СКА (Санкт-Петербург). Кубок чемпионов в Казани.**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Времен связующая нить". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Земляки". [12+]**
**2.45 Спектакль "Завидуй, Америка, завидуй!". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 21 АВГУСТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 3.25 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.10 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Точь-в-точь". Лучшее. К 25-летию Первого канала. [16+]
23.30 Х/ф "Любовь-морковь по-французски". [18+]
1.00 Я могу! [12+]
2.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.10 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Юморина. [16+]
23.30 Х/ф "Фродя". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00, 4.15 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00, 17.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.30 Автограф. [12+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00, 4.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30, 5.45 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**2.30 Спектакль "Неотосланные письма". [12+]**
**5.15 Теге өсәү. [12+]**

### 22 АВГУСТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Олег Табаков. Все, что останется после тебя..." [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.05 Д/ф "Олег Табаков и его "цыплята Табака". [12+]
17.55, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Познер. [16+]
0.00 Х/ф "Обмен принцессами". [16+]
1.35 Я могу! [12+]
3.15 Модный приговор. [6+]
4.00 Давай поженимся! [16+]
4.40 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 100ЯНОВ. [12+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Подсадная утка". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Роман с прошлым". [12+]
1.00 Х/ф "Сводная сестра". [12+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30, 5.30 "Йәйләү". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт НСО РБ. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.55 Хоккей. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). Кубок чемпионов в Казани.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Спектакль "Красная звезда". [12+]**
**0.30 Итоги недели (на баш. яз.). [12+]**
**1.15 Спектакль "Неравные". [12+]**
**3.15 Ради добра. [6+]**
**3.30 "Монологи". Гузель Сулейманова. [12+]**
**6.00 Детей много не бывает. [12+]**

### 23 АВГУСТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.25 Моя мама готовит лучше! [0+]
7.25 Т/с "Тонкий лед". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
13.45 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.15 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.20 "Русский ниндзя". Финал. [12+]
19.30 Три аккорда. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Налет". [16+]
23.30 "КВН". Премьер-лига. [16+]
0.50 Я могу! [12+]
2.30 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
3.55 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 1.00 Х/ф "Везучая". [12+]
6.00, 2.50 Х/ф "Пять лет и один день". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Т/с "Замок из песка". [12+]
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**10.45 "Байтус". [6+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45, 4.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Башкорттар. [6+]**
**14.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**15.00, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**15.30 Автограф. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 "Дарю песню". [12+]**
**17.30, 2.30 Юбилейный вечер народного артиста РБ Артура Туктагулова. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45, 4.00 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Спектакль "Мона". [12+]**

✓ *"Ниндәй гонаһтар?" - тип һораған. Аллаһ илсеһе шулай тигән: "Аллаһҡа тиңдәшлек килтереү; сихыр; кеше үлтереү; процентҡа йәшәү; етемдәрҙең мөлкәтенә ҡул һуҙыу; яу яланынан ҡасыу; ғәйепһеҙ мосолманға яла яғыу".*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ АТЫ ЕЛЕП ЕТМӘҪ ЕРГӘ БАРЫП ЕТТЕ БАШҠОРТ КИТАБЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**32-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әҙәми. Биишева. Туған. Тесла. Ҡоҙоҡ. Цензура. Башҡорт. Шаман. Елпәҙә. Баҡыр. Тау. Балыҡ. Лама. Цент. Тамыр. Винни. Илеш. Яра. Әни. Аскет. Тонзура. Рубрика.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Ташбаҡа. Операция. Балл. Ректор. Ацтек. Әкиәт. Тәте. Әбүзәр. Ғиззәтуллин. Литер. Иоанн. Аша. Ҡаш. Батша. Арҡа. Алты. Ҡон. Ҡорот.

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*



# СЕЛЛӘЛӘ СӘЙ ЭС!

**Йәйге эҫелә үлән сәйҙәре яҡшы ярҙам итә. Улар йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшенә ыңғай йоғонто яһай. Бына бер нисә үлән сәйе рецепты:**

**Элеутерококк** организмдың стрестарға сыҙамлығын арттыра. Уның был сифаты организмдың эҫегә түҙемлеген дә күтәрә. Дарыухананан алынған элеутерококк төнәтмәһен алып, көнөнә 20-30 тамсыһын эсергә. Ятраҡан эсемлеккә тамыҙып та эсергә була. Әммә бер юлы 2 аҙнанан да артыҡ дауаланырға ярамай, мотлаҡ 2-3 аҙнаға туҡталып торорға кәрәк.

**Еркәүек (таволга)** - был шифалы үлән лайлалы тиресә кибеүҙән ҡотҡара һәм шуның менән түҙгеһеҙ эҫелә хәлде яҡшырта. Эҫелә тын алыуы ауырлашып, тамаҡ кипкән саҡта 1 ҡалаҡ киптерелгән еркәүек япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә. Был сәйҙе көнөнә 1 стакан эсергә була.

**Календула** сәскәһенән әҙерләнгән сәй ҙә организмға һыуынырға ярҙам итә һәм шешеү процестарына ҡаршы яҡшы сара. Уның киптерелгән сәскәһен дә, түтәлдә үҫеп ултырғанын өҙөп тә ҡулланырға була. 2 ҡалаҡ календула сәскәһенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, һыуытып, көн дауамында 50-шәр мл эсергә.

**Һырғанаҡ** япрағы ҡан тамырҙарында төйөр - тромб барлыҡҡа килеүенән яҡшы иҫкәртеү сараһы. Үҫемлектең япраҡтары ҡан тамырҙарының тонусын күтәрә. 1 ҡалаҡ һырғанаҡ япрағын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып бешерергә, көн дауамында йотомлап, аҙлап эсергә. Был сәй ҡанды шыйығайта, организмдың эҫегә сыҙамлығы ла арта.

**Мелисса** - тәбиғи энергетик. Эҫе көндә мелисса япрағын сәйгә һалып йәки үҙен генә бешереп эсергә була, башҡа төр сәйҙәргә лә ҡушырға ярай.

**Ниндәй генә сәй күңелегеҙгә хуш килмәһен, уларҙы йәйгеһен ғәҙәттәгенә ҡарағанда йышыраҡ эсергә кәрәк. Һалҡын эсемлектәр организмға еңеллек килтермәүе лә бар. Киреһенсә, йылы сәйҙәр эсергә кәңәш ителә. Сөнки унан организм ныҡ тирләй һәм был тәнгә һыуынырға ярҙам итә. Кәрәкле миҡдарҙа һыуҙар эсеү һыуһыҙланыуҙан да һаҡлай, үлән сәйҙәре организмды файҙалы матдәләргә туйындыра ла. Шулай ҙа дарыу үләндәрен самаһынан артыҡ ҡулланмағыҙ, һәр нәмәлә алтын урталыҡ яҡшы. Сәләмәт булығыҙ!**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441-42 һижри йылдар.*

| Август (Зөлхиҙә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17(27) дүшәмбе | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 18 (28) шишәмбе | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 19 (29) шаршамбы | 4:31 | 6:01 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 20 (1) кесе йома | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 19:04 | 20:34 | 22:04 |
| 21 (2) йома | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 19:02 | 20:32 | 22:02 |
| 22 (3) шәмбе | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 19:00 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (4) йәкшәмбе | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:57 | 20:27 | 21:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# РИБА АЛЫУ

Ҡөрьән-Кәримдең "Баҡара" сүрәһенең 278 -279-сы аяттарында былай тип әйтелә: "Иман килтергән кешеләр! Мосолман икәнһегеҙ, Аллаһтың нәфрәтенән ҡурҡығыҙ, риба алмағыҙ. Риба алһағыҙ, Аллаһҡа һәм Бәйғәмбәргә һуғыш асҡан кафырҙар кеүек булырһығыҙ. Был эштәрҙән тәүбә итһәгеҙ, малығыҙ-байлығығыҙ үҙегеҙгә ҡалыр".

"Риба (бурысҡа биреп торған аҡсанан-малдан арттырып алынған харам керем) ашағандар иһә шайтан зәхмәте һуҡҡан тиләләр кеүек, ҡәберҙәренән торасаҡ. Улар: "Сауҙа итеү ҙә риба кеүек бит", - тигән өсөн шундай хәлгә ҡалырҙар. Аллаһ алыш-бирештә хәләл итте, рибаны харам ҡылды. Әгәр ҙә кемдер Аллаһтан (риба алмаҫҡа) әмер килгәс, рибанан баш тартһа, әмер килгәнгә ҡәҙәр алған рибаһы ғәфү ителер. Уның эше Аллаһ хөкөмөндә булыр һәм улар шунда мәңгегә ҡалыр".

Күренеүенсә, килтерелгән аяттар Ҡөрьәндәге иҫкәртеүҙәргә ҡарамай, процент буйынса йәшәй башлаған һәм шул арҡала оҙаҡ ваҡытҡа тамуҡҡа эләгеүселәргә алдан киҫәтеү булып яңғырай. Аллаһ илсеһе: "Ете һәләкәтле гонаһты эшләүҙән ҡурҡығыҙ", - тигән. Сәхәбәләр: "Эй, Аллаһ илсеһе! Былар ниндәй гонаһтар?" - тип һораған. Аллаһ илсеһе шулай тигән: "Аллаһҡа тиңдәшлек килтереү; сихыр; кеше үлтереү; процентҡа йәшәү; етемдәрҙең мөлкәтенә ҡул һуҙыу; яу яланынан ҡасыу; ғәйепһеҙ мосолманға яла яғыу".

Аллаһ илсеһе: "Аллаһ риба менән шөғөлләнеүселәрҙе лә, риба алыусыларҙан аҡса алыусыларҙы ла ҡарғай". Ан-Насаи Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең шундай хәҙисен еткерә: "Кем риба алыусыларҙан аҡса ала, кем риба алыу менән шөғөлләнә, шулай уҡ кем быларҙың барыһын да яҙып алып бара - Аллаһтың ҡарғышы булыр".

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЭПОСТЫ...

## өйҙән тороп һөйләнеләр




**"Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың республика конкурсы быйыл дистанцион рәүештә уҙғарылды. Егерме икенсе тапҡыр үткәрелгән конкурста Башҡортостандың 31 район һәм 7 ҡала округтарынан, Татарстан, Ханты-Манси автономиялы округы, Канаданан 101 уҡыусы ҡатнашты.**

Республиканың Баймаҡ, Баҡалы, Белорет, Бөрйән, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Илеш, Ишембай, Мәсетле, Туймазы, Учалы райондарынан, Өфө, Сибай һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларынан ҡатнашҡан уҡыусылар юғары һөҙөмтәләргә өлгәште. Быйылғы конкурста Гран-прины Илеш районы Ябалаҡ ауылы мәктәбенең 8-се синыф уҡыусыһы Диана Әғәлиева яуланы, етәксеһе - Лилиана Әғәлиева.

Шулай уҡ "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың XXII республика конкурсында башланғыс синыф уҡыусылары араһында I урынды Ейәнсура районы Яныбай ауылы урта мәктәбенең 4-се синыф уҡыусыһы Зәйтүнгөл Байгилдина, уртансы синыфтар араһында Бөрйән районы Аҫҡар мәктәбенән 6-сы синыф уҡыусыһы Ҡәҙриә Йәрмөхәмәтова, юғары синыф уҡыусылары араһында Стәрлетамаҡ ҡалаһы Дж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияның 8-се синыф уҡыусыһы Ләйлә Тимерғәлиева яуланы. Бынан тыш, ярышта икенсе һәм өсөнсө урындарҙа барлығы 12 уҡыусы, төрлө номинацияларҙа һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының махсус призына лайыҡ булыусылар билдәләнде. "Мин "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын 2-се синыфтан алып ятлай башланым, хәҙер тулыһынса беләм. Яңы форматта үткән конкурсҡа 3 сәғәтлек видео төшөрөп һалдыҡ. Шунан һәр ҡатнашыусы билдәле бер ваҡытта "Zoom" программаһы ярҙамында өйҙән жюриҙар менән бәйләнешкә сығып, улар беҙҙе бүлдерә-бүлдерә тыңланы. Бер аҙ тулҡынланһам да, алтынсы йыл рәттән ҡатнашыуым һәм эпосты яҡшы белеүем ярҙам итте. Әйткәндәй, былтыр "Артек" Халыҡ-ара балалар үҙәгенә барғанда ла "Урал батыр" эпосын тыған телемдә яттан һөйләп, "Актерлыҡ оҫталығы" номинацияһында еңеү яулағайным", - ти Диана Әғәлиева конкурс тураһында.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАЛАЛАРАҒА - ӘКИӘТ



**Сибай балалар театрында "Тылсымлы ҡурай" әкиәтенең ябыҡ премьераһы үтте.**

Был тамаша театр тормошонда бер күренеш булды. Спектакль, заман балаларына аңлайышлы итеү маҡсатында, башҡорт халыҡ әкиәтен яңы алымдарға һалып ҡоролған. Бында сағыу костюмдар, үҙенсәлекле сәхнәләштереүҙәр, ҡыҙыҡлы хореография һәм ғәҙәти булмаған режиссер алымдары ҡулланыла. Әкиәттең төп геройҙары Аҡбуҙат, Урал батыр һәм Юлдыбай йәш быуынды ҡыйыу, намыҫлы, илһөйәр булырға һәм дуҫлыҡ ҡәҙерен белергә өйрәтә.

Яңы спектаклдә баш ҡаланан саҡырылған белгестәр ҡуйҙы. Инсценировка авторы - кинодраматург Дамир Йосопов, ҡуйыусы режиссеры - Илсур Ҡаҙаҡбаев. Ҡуйыусы рәссамы БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Альберт Нестеров, композитор Мәғүлә Мәзинова һәм хореограф Ольга Даукаева.

Сибай концерт-театры берекмәһендә быйылғы йылда "Культура малой Родины" проекты сиктәрендә тағы ла ике сәхнә әҫәре ҡуйыласаҡ. Балалар өсөн "Карлсон" (режиссеры БР-ҙың атҡаҙанған артисы Фирғәт Ғарипов) һәм дөйөм тамашасы хөкөмөнә "Мираҫ" (режиссеры БР-ҙың атҡаҙанған артисы Сулпан Аҫҡарова) театрлаштырылған тамашаһы әҙерләнә.

# БЫНЫҺЫ ЛА СИБАЙҘА

**"Ирәндек моңдары-XV" Халыҡ-ара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың төбәк-ара бәйгеһе быйыл онлайн форматта үтә. Еңеүсегә, ғәҙәттәгесә, автомобиль билдәләнгән.**

Быйылғы конкурста Башҡортостан, Ҡурған, Мәскәү, Силәбе өлкәләренән һәм Ханты-Манси автономиялы округынан йөмғеһе 200 бәйгесе ҡатнаша. Уларҙың һәләтен Азамат Тимеров, Изел Аралбаев, Рөстәм Шаһыбалов, Сулпан Моратова һәм Раян Алтыншин кеүек йыр белгестәре баһалай.

Сараның Гала-концерты 19 августа, Сибай ҡалаһының юбилейы билдәләнгән көндә, үҙәк майҙанда үтәсәк. Әйткәндәй, был көндә ҡалаға нигеҙ һалыусыларға һәйкәл дә асыласаҡ. Бронзанан ҡойолған скульптура композицияһы төҙөүсе ҡатын-ҡыҙ һәм таусы ир-егет һындарынан (бейеклеге 2,3-2,5 метр), импровизацияланған шахта күтәргесе рәүешендәге стеланан тора (5,5-6 метр).

# ЫРЫМБУРҘА...

**Ырымбур өлкәһендә "Йәшәй әле башҡорт моңдары" төбәк-ара башҡорт йыры онлайн-конкурсы башланды. Ҡатнашыуға солистар һәм коллективтар саҡырыла. Йәш сикләүе юҡ.**

Еңеүселәрҙе онлайн-конкурс жюрийы: Башҡортостан Республикаһының һәм Ырымбур өлкәһенең танылған эстрада башҡарыусылары, сәнғәт оҫталары һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре - Башҡортостан Республикаһының халыҡ артистары Артур Туҡтағолов һәм Сәғиҙулла Байегет, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Ринат Рамазанов, шулай уҡ Ырымбур өлкәһенең "Каруанһарай" Башҡорт ҡоролтайы рәйесенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса урынбаҫары Луиза Райманова-Бәхтийәрова баһалай. Жюри агзалары халыҡ коллективтары, үҙешмәкәр коллективтар, солистар, дуэттар, трио һәм квартеттар араһында беренсе, икенсе һәм өсөнсө урындарҙы билдәләй. Ҡатнашыусыларҙың йәш категорияһы - 18 йәшкә тиклем һәм 18 йәштән өлкән. Ҡатнашыусыларҙың бөтәһенә лә дипломдар тапшырыла. Конкурс һөҙөмтәләре15 августа иғлан ителә. Конкурсты Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы һәм Халыҡтар дуҫлығы йорто булышлығында Ырымбур өлкәһенең Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге ойоштора. Маҡсаты - популяр һәм халыҡ йырҙарын пропагандалау, башҡорт халҡының милли ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын һәм мәҙәниәтен һаҡлау, шулай уҡ халыҡ башҡарыусылары традицияларын үҫтереү.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН - ТАШТА,

## аҡыл - башта

Байҙың ҡатыны үлһә - түшәге яңырыр; ярлының ҡатыны үлһә - башы ҡаңғырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бар эттәр ҙә - эт балалары.

**(Уильям Филдс).**

Үбешеүҙе ҡатын-ҡыҙ бер генә минутка булһа ла һөйләнмәй торһон өсөн ир-егеттәр уйлап тапҡан.

**(Жюльен де Фалкенаре).**

Балаларынан үҙен хөрмәт итеүҙе талап иткән ата-әсә был хөрмәткә лайыҡлымы икән?

**(Петер Тилле).**

Дошмандарыңды һайлауҙан туҡтап, ҡул аҫтындағылар менән ҡәнәғәтләнә башлағанда йәшлек тә бөтә.

**(Эмиль Сьоран).**

Беренсе рәттә ултырғандар йыш ҡына суфлерҙар әйтеп торғанға ғына күнегеп китә.

**(Влодзимеж Счисловский).**

Демократия - ул тауыш биреү түгел, ә тауыштарҙы һанау.

**(Том Стоппард).**

Түләй алыу һәләтлеген килем түгел, ә темперамент билдәләй.

**(Логан Смит).**

Бәхетеңдә һаҡла, тиҙәр. "Һаҡларға" кәрәк булған бәхет - бәхет түгел инде ул.

**(Жилбьер Сесброн).**

Уйлылар бар, уйһыҙҙар бар. Ә иң ҡурҡынысы - бөрәүҙәрҙең башҡалар өсөн уйлауы.

**(Хораций Сафрин).**

Әгәр ҙә Хоҙай менән һин һөйләшәһең икән - был доға ҡылыу; әгәр ҙә Хоҙай һинең менән һөйләшә икән - был шизофрения.

**(Томас Сас).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешенең ҡатынын һағыҙаҡ тешләй. Был ҡатын бар көсөнә ҡысҡырып, ихатала йүгереп йөрөй башлай. Уларҙың йорто эргәһенән бер ир үтеп бара. Ихата эсендә ҡысҡырып йүгергеләп йөрөгән ҡатынды аҡылдан шашҡан тип уйлап, уның иренең эшләгән урынына йүгерә. "Эй, дуҫ кеше, - ти ул, - ҡатының аҡылынан яҙған, ахыры, бар, ҡайта һал". Ир кеше был хәбәргә әллә ни әһәмиәт бирмәй һәм былай ти: "Ул минең ҡатыным түгелдер, һин яңылышаһыңдыр, булмаған нәмәнән яҙып була тиме ни?"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3007
Заказ - 644/08